*Наполеон Вестфалияға король итеп ултыртҡан ҡустыһының сәйәсәтенә ризаһыҙлыҡ белдергән. Ләкин әйләнә-тирәләгеләре быға ҡаршы килгән һәм ҡустыһының артыҡ нығ изге йән булыуын билдәләгән. "Монарх тураһында "изге йән" тип әйтәләр икән, тимәк, ул бер нигә лә эшкинмәй", - тип асыулана Наполеон.*

*(Синезий).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11 - 17 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №50 (416)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ир абруйын...

ғаилә һаҡлай



5

Әхмәтзәки Вәлиди һәм...

бөрйән башҡорттары



7

Мифология боронғолоҡто раҫлай

Тағы ла "Урал батыр" эпосы тураһында



8-9

Сабыйынды оҙағыраҡ имеҙһән...

йөндәрегеҙ йөнәш булыр



12

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Хоҡуҡи дәүләт төҙөйбөҙ, тип һөйләйбеҙ, әммә илебеҙҙә кеше торған һайын үҙен яҡлауһыҙыраҡ тоя. Ҡайҙа барабыҙ?

**Салауат ЮЛБАРЫҪ, яҙыусы, журналист:** 90-сы йылдарҙан башлап илебеҙ граждандары йылдан-йылға, көндән-көнгә яҡлауһыҙға әүерелә бара. Дөрөҫөн әйткәндә, дәүләт яйлап-яйлап үҙ граждандарының социаль-хоҡуҡи гаранты булыу бурысынан бушана килә. Бушлай фатир юҡ хәҙер, медицина һәм мәғариф хеҙмәте күрһәтеү ҙә түләүлегә әүерелә бара. Әле килеп, Кубандың Кущевская станицаһындағы ҡанлы ваҡиғалар ошо хәҡиҡәтте бермә-бер раҫланы.

Күптәр йәшәү кимәлен урамдағы сит ил машиналарының күплегенә ҡарап билдәләргә тырыша. Йәнәһе, совет осоронда был мөмкин түгел ине. Әммә ул машиналарҙың 90 проценты кредит буйынса алынғанын йәғни граждандарҙың айҙан-айға кредитын түләү өсөн ниндәй боҙло һыуҙарға сумып йәшәгәнен берәү ҙә күрергә теләмәй. "Ана, хәҙер ҡалаларыбыҙҙа ниндәй күркәм йорттар төҙөлә, элек ундай йорттарҙы беҙ сит ил киноларында ғына күрә инек", тип әйтер икенсе берәү. Ә һеҙ әнер төшкәс, шул йорттарҙың тәҙрәләренә ҡарағыҙ: күпме йортта Ильич лампалары яна икән? Ул йорттарҙағы фатирҙар күп йылдар инде үҙенең һатып алыусыһын көтөп, буш тора. Ипотека айҙан-айға осон-осҡа саҡ-саҡ ялғап йәшәгән беҙҙең ил граждандары өсөн түгеллеге күптән мәғлүм бит инде. Бына шундай хәлдәр: ошоларҙан сығып, ҡайҙа табан китеп барғаныбыҙҙы үҙегеҙ самалап ҡарағыҙ...

**Йәлил СӨЛӘЙМӘНОВ, рәссам:** Ҡатыным менән икәүләп көнө-төнө әллә нисә урында эшләйбеҙ, әммә ныҡлап аяҡҡа баҫып китә алмайбыҙ әле. Ярай әле, мин йәйге отпускаға сыҡҡансы бер нисә картинамды һатып, өҫтәмә аҡса эшләп өлгөрәм. Ә башҡаса килем алыр урындары булмағандар ни эшләргә тейеш һуң? Әйтәйек, улар отпуск аҡсаһын алып, шул аҡсаға ял итергә, кейенергә, туҡланырға һәм балаларын уҡырға барырға әҙерләргә тейеш. Нисек осон-осҡа ялғайҙарҙыр инде, әйтеүе ҡыйын.

Мин үҙем өсөн ҡайғырмайым, бына балаларымдың киләсәге өсөн ныҡ борсолам. Ни өсөн тигәндә үткән быуаттың 90-сы йылдарынан алып, реформа артынан реформа үткәрелеп, илебеҙ ныҡлап аяғына баҫып китә алманы. Фермерлыҡ эшмәкәрлеге рөхсәт ителгәс, Хәйбулла районында йәшәүсе бер туғаным ҙур дәрт менән ошо эшкә тотонғайны. Бер нисә йыл эшен уңышлы алып барҙы, ауылдаштарына эш урыны бирел килде. Әммә бер туҡтауһыҙ энтузиазм менән генә эшләп булмай, әле килеп ул барыһына ла ҡул һелтәне. Бындай төңөлөүҙәрҙе, күңел ҡайтыуҙарын бик күп кешеләрҙә күҙәткәнем бар.

Һуңғы ваҡытта торлаҡ хужалығында реформалар бара. Дәүләт был йөктө шәхси ҡулдарға тапшырмаҡсы. Ә беҙ Хрущев ваҡытынан бирле төҙөлөп килгән йорттарҙың ниндәй хәлдә икәнлеген бик яҡшы беләбеҙ. Уларға ремонт талап ителә. Әгәр ҙә торлаҡ хужалығы хосусилаштырыла ҡалһа, ремонт эштәренең "тоҙлоғо" фатир хужаларына эләгәсәк һәм әлеге лә баяғы осон-осҡа саҡ ялғап йәшәүселәр был йөктө күтәрә алмаясаҡ.

**Айһылыу БАЯЗИТОВА, эшҡыуар:** Ирем менән ялланып шәхси фатирҙарҙы ремонтлайбыҙ. Машинабыҙ бар, руль артында үҙем йөрөйөм. Бер мәл ремонт эштәре алып барған фатир урынлашҡан йорт янына килеп туҡтаныҡ та, ирем төҙөлөш материалдарын күтәреп йортҡа инеп китте, мин машина эсендә уны көтөп ҡалдым. Баҡтиһәң, ошо йортта йәшәүсе кемдеңдер урынына килеп туҡтағанмын икән. Бер мәл "урын хужаһы" килеп туҡтап, ҡатлы-ҡатлы итеп һүгенеп, мине был урындан ҡыуырға тотондо. Иплән кенә кешеләрсә итеп өндәшһә лә булыр ине. Мин унан саҡ ҡына ситкәрәк китеп, миңә был урындан сығып китер өсөн "коридор" яһауын һораным. Әммә теге ир һаман да һүгенеүен дауам итте. Тегенең агрессияһы арта барыуын тойғас, мин монтировкамды әҙерләп ҡуйҙым. Бына бер мәл асыуы сиккә сыҡҡан ир кабинаһынан сығып минең яҡҡа килә башланы. Мин монтировкамды алып уға ҡаршы сыҡтым. Шул саҡ ирем килеп сыҡты ла, үҙенең өндәшеүе менән теге ирҙе туҡталып ҡалырға мәжбүр итте. Ир йүгереп барып машинаһына ултырҙы ла, беҙҙең яҡҡа килә башланы. Шул саҡ ике машина араһына баҫҡан ирем, инде тапалды тигәндә, теге машинаның капотына һикереп менеп ятып ҡотолоп ҡалды. Теге ир машинаһын артҡа сиктерҙе лә, әле аяғына ла баҫып өлгөрмәгән иремдең йән еренә типте.

Ирем әле ҡаты йәрәхәт алып дауаханала ята. Был ваҡиға хаҡында милицияға яҙып бирҙек. Теге ирҙең машинаһы хәтһеҙ ваҡыт шул урында торҙо. Оҙаҡ ҡарауылланыҡ. Бер мәл ул ҡиммәтле тундар кейеп, ҡатыны менән йорттан килеп сыҡты ла, икенсе бер "Джип" машинаһына ултырҙы. Милиция менән янына барғайныҡ, теге ир: "Бына миңә монтировка менән ынтылған ҡатын...", - тип өҫтәмә килә башланы. Милиция хеҙмәткәрҙәрен бар тип тә белмәне. Ярай әле, улар булды, йүгиһә...

Бына шундай хәлгә тарыныҡ. Әле ул ирҙе судҡа бирҙек, әммә уға ғәҙел хөкөм булырына өмөтөбөҙ ҙур түгел. Илебеҙҙең ҡайҙа табан барғаны билдәле инде...

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

АФАРИН!

# ЕГЕЛЕП ЭШЛӘМӘҺӘ...

## уҡытыусы уҡытыусы түгел инде



**Стәрлетамаҡ районының Рощинский ҡасабаһы урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гүзәл Сәлимйәнова күптән түгел Мәскәүҙә туған тел уҡытыусылары араһында үткәрелгән конкурста ҡатнашып, өсөнсө урын яулап ҡайтты. "Рәсәйҙең иң алдынғы педагогтары тарафынан яҡшы баһа алыу артабан да ышаныс, көс, дәрт өҫтәне, юлымдың дөрөҫ булыуына тағы бер ҡат инандырҙы, - ти Гүзәл Сәлимйәнова, тәьҫораттары менән уртаҡлашып".**

(Дауамы 2-се биттә).

✓ *Әгәр мин балаларҙы үҙ дәресемә ылыҡтырырға теләйем икән, яҡшы эшләргә тейешмен. Кемдер, башҡорт телен өйрәнмәйем, тип әйтә икән, тимәк, уҡытыусыға уйланырға, үҙ өҫтөндә эшләргә урын бар.*



ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫБЫҘ!

**2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланыу алдында. Яраткан дуҫың, серҙәшең, фекер уртаҡлашыр баҫмаңа яҙылып ҡалырға ашыҡ.**

➔ Гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Уларға **микротулҡынлы мейес, кеҫә телефоны, сепаратор, электр сәйнүге, үтек** һәм башҡа төрлө матур бүләктәр оттораcаҡбыҙ.



Квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 300 кеше "Дини календарь" алып ҡыуанасаҡ.

➔ Әйткәндәй, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

➔ **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

➔ **Һәм тағы...** Халыҡ араһында гәзит-журналдарҙы таратыу йөгө барыбер ҙә **почтальондар** иңенә төшә. Уларҙың энтузиазмын, тырышлығын юғары баһалайбыҙ, хөрмәт итәбеҙ, оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ. Шуға ла гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы һөҙөмтәләре буйынса почтальондарыбыҙҙы ла бер аҙ бүләкләп китергә уйлайыҡ. Иң күп "Киске Өфө"нө яҙҙырған почтальондарға **ДВД-плеер, кеҫә телефоны, электр сәйнүге, үтек һәм башҡа бүләктәребеҙ** бар. Почта бүлексәләренән ошо бүләктәребеҙгә лайыҡлы почтальондар тураһында белешмәләр көтәбеҙ.

**50665** индекслы **"Киске Өфө"** алты айға **330 һум 24 тин, 50673** индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - **360 һум 24 тин** тора.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

АФАРИН!

# ЕГЕЛЕП ЭШЛӘМӘҺӘ...

## уҡытыусы уҡытыусы түгел инде

**(Башы 1-се биттә).**

Илебеҙҙең баш ҡалаһында ике көн барған конкурста ҡатнашыу, аралашыу ҡабатланмаҫ тәьҫораттар ҡалдыра. Тәүге һынау көнөндә "Минең республикам, минең мәктәбем, минең һөнәри эшмәкәрлегем" темаһына сығыш яһағандан һуң, конкурстың икенсе көнөндә "Ғаилә. Исем" темаһына мастер-класс күрһәтә. Был дәрес конкурста иң яҡшыһы, тип баһалана. "Уҡытыусы ниндәй булырға тейеш?" тигән һорауға яуап итеп, Гүзәл Сәлимйәнова халҡыбыҙ тарихылай бай йөкмәткеле, милли үҙенсәлектәре менән айырылып торған дәрес тәҡдим итә һәм мәртәбәле һәм талапсан жюри ағзалары уны алҡышлап ҡабул итә. Әлбиттә, ниндәйҙер айырым регламент талаптарына яуап биргән конкурста бөтә педагогик эшмәкәрлекте лә сағылдырып бөтөп тә булмайҙыр. Шулай ҙа, сәсәнде тәүге һүҙенән таныған кеүек, иң оҫта уҡытыусыларҙы ла бер дәресенән үк билдәләп булалыр. Шулай итәләр ҙә.

Ә бына Стәрлетамаҡ районында, коллективында Гүзәл Фәрит ҡыҙын бер дәресе өсөн генә түгел, ғөмүмән, алдынғы, әүҙем, талантлы уҡытыусы булараҡ баһалайҙар. Һуңғы ваҡытта туған телдәрҙе уҡытыу методикаһы буйынса төрлө фекерҙәр ишетергә тура килә. Мәҫәлән, урыҫ, татар, сыуаш телле мәктәптәрҙә дәүләт теле булараҡ башҡорт телен күберәк коммуникатив яҡтан аралашыу методикаһы буйынса уҡытыу тураһында һүҙ алып барыла. Был турала ни уйлауы хаҡында һорағас, Гүзәл Фәрит ҡыҙы бына нимә тине:

- Рощинский мәктәбендә 17 йыл эшләйем. Рус кластарында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәткәндә баҫымды һөйләү телмәрен үҫтереүгә бирәм. Телгә, халҡыбыҙға ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу маҡсаты менән инновацион технологиялар, күргәҙмә материалдар ҡулланам. Ә башҡорт балаларына туған телде уҡытҡанда һөйләү телмәрен генә үҫтереүҙе маҡсат итеп ҡуйыу дөрөҫ түгел. Грамматиканы өйрәтмәй тороп, уларға төплө белем биреп булмай. Ғөмүмән, рус мәктәптәрендә башҡорт теле уҡытыусыһы икеләтә тырышлыҡ күрһәтергә тейеш. Сөнки башҡорттар ғына йәшәгән ауылда, ҡасабала тел, заң, милли үҙаң кеүек төшөнсәләр былай ҙа бар. Бында мөхит - төп тәрбиә сығанағы булып тора. Ә инде сит милләт вәкилдәре күпләп йәшәгән ауылдарҙа рух мөхитте түгел, ә мәктәптә һалына. Мәҫәлән, беҙҙең ҡасабала 13 төрлө милләт вәкиле бар. Мәктәптә лә тиҫтәгә яҡын милләт балаһы белем ала. Әгәр мин балаларҙы үҙ дәресемә ылыҡтырырға теләйем икән, яҡшы эшләргә тейешмен. Кемдер, башҡорт телен өйрәнмәйем, тип әйтә икән, тимәк, уҡытыусыға уйланырға, үҙ өҫтөндә эшләргә урын бар. Ә уҡытыусыға булған ихтирам предметҡа ла ихтирам тыуҙыра...

Гүзәл Сәлимйәнова беҙҙе мәктәптәге үҙе ойошторған музейға алып инде. Тәжрибәле уҡытыусы күргәҙмәлелек талап ителгән дәрестәрҙе ошо этнографик музей ярҙамында аңлайышлы ла, мауыҡтырғыс та итеп ойоштора икән. Был бүлмәгә килеп ингән егерменсе быуат кешеһе сал быуаттарға аяҡ баҫҡандай, халҡыбыҙҙың тарих төпкөлөнә килеп сыҡҡандай була. Ә йөрәге менән уйлаған, күңеле менән фекер йөрөткән балаларға бындай музейҙарҙың тәьҫире бигерәк тә көслө. Хатта рәссамдар ҙа боронғолоҡ еҫе аңҡып торған был "тарих утрауына" килеп, ҡомартҡы - хазиналар менән күҙгә-күҙ осрашып, ижад итә икән. Тимәк, был хазинаны туплаған уҡытыусы Гүзәл Фәрит ҡыҙы Сәлимйәнова уҡыусы балаларҙы ғына түгел, рәссамдарҙы ла ижад юлына әйҙәй.

Уҡытыусының кемлеге уҡыусыларының ҡаҙанышында ла күренә. Гүзәл Фәрит ҡыҙының уҡыусылары "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса Республика конкурсында ҡатнашып, 3-сө урын яулай. "Башҡортостан йыйылары" конкурсында уның ике уҡыусыһы - Терентьева Мария менән Дятлов Андрей башҡорт йырҙарын йырлап, башҡорт йолаларын сәхнәләштерәләр һәм 2-се урын яулайҙар.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# АҠСА КИЛТЕРЕР ШӨҒӨЛДӨ...

## ҡырағай туристарға бирмәйек

**Мин ҡайһы бер матбуғат баҫмаларын биш-ун минутта уҡып сығам, ә бына "Киске Өфө"нө аҙна буйы уҡыйым. Сөнки был гәзитте күҙ йөрөтөп кенә уҡыу мөмкин түгел. Гәзит рубрикалары халҡыбыҙҙың, милләтебеҙҙең, йәшәйешебеҙҙең һәр өлкәһенә ҡағыла, материалдарҙың аңлайышлы, төплө дәлилдәр менән бирелеүе беҙҙе, уҡыусыларҙы, үҙенә арбап ҡына ҡалмай, уйланырға, фәһем алырға, унда күтәрелгән мөһим мәсьәләләргә ҡарата үҙ фекереңде әйтергә мәжбүр итә.**

Гәзиттең 40-сы һанында "Бал ҡортобоҙ, балыбыҙ, атыбыҙ, ҡымыҙыбыҙ..." тигән диалог баҫылды. Яңы Президентыбыҙ Рөстәм Хәмитовтың ошо традицион башҡорт брендтарын республикаға рәсми беркетеү тураһында һүҙ башлауына рәхмәтлебеҙ. Шулай уҡ ошо диалогта Халис Килдеғошовтың башҡорт атына һәйкәл ҡуйыу тураһындағы тәҡдимен хуплап, ул һәйкәл уның тыуған урыны - Бөрйән районы Шүлгән (Ғәҙелгәрәй) ауылы янындағы "Йылҡысыҡҡан" күле янында булырға тейеш, тип әйтергә теләйем. Бынан 14-15 мең йыл элек йылҡы малының нәҡ ошо күлдән өйөр-өйөр булып сығыуы әкиәт кенә түгел, ә ысынбарлыҡ. Был хаҡта белгертеп, билдәһеҙ рәссам "Шүлгән" мәмерйәһе стенаһына ат һүрәттәре ( мамонттарҙы ла) яҙып ҡалдырған. Ә ундай "паспорт" башҡа бер ерҙә лә юҡ!

Моғайын, "Киске Өфө"лә күтәрелгән мәсьәлә һүҙҙә генә ҡалмаҫ. Күптәр Президентыбыҙҙың атҡа, башҡорт балына, солоҡҡа, ҡымыҙға башҡорт брендтарын республикаға беркетеү тураһындағы тәҡдимен яҡлап сыҡыр һәм башҡорт атына һәйкәл ҡуйыу тураһында ла аныҡ эш башланыр, тигән өмөттәмен.

Һәм тағы. Бөрйән районында туризмды үҫтереү буйынса эш башланған икән, уны артабан үҫтереүҙе дауам итергә кәрәк. Сит илдәргә барып, меңәр доллар аҡсаларын ҡалдырып, рәхәтләнеп ял да итмәй ҡайтҡансы, Бөрйәнгә килеп, сылтырап аҡҡан шишмәләрҙән, Мәсем тауының иң бейек нөктәһендә ер аҫтынан урғылып сыҡҡан зәм-зәм һыуҙарын да эсеп, Ағиҙелебеҙҙә рәхәтләнеп һыу инеп, ҡарағас, ҡарағай урмандарының саф һауаһын һулап, башҡорт балын, ҡымыҙын тәмләп ҡайтыуға ни етә! Тик был эште лә оҙаҡҡа һуҙмай ойоштороу зарур. Юғиһә, ҡырағай туристар Бөрйәнебеҙҙең урмандарын бысратып, тарих ҡомартҡыларын юҡҡа сығарып бөтәсәк.

**Сәләх ӘХМӘТОВ, хеҙмәт ветераны. Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай йортонда үткән "Берҙәм Рәсәй" сәйәси партияһы Башҡортостан төбәк бүлексәһе Сәйәси советының киңәйтелгән ултырышында ҡатнашты. Унда РФ Президентының Мөрәжәғәтнамәһен тормошҡа ашырыу буйынса төбәк һәм урындағы партия бүлексәләренә йөкмәтелгән бурыстар ҡаралды.

✓Башҡортостан Республикаһының Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы 2011 йылдың ғинуарындағы ял һәм байрам көндәре тураһында аңлатма бирҙе. 1-10 ғинуар ял көндәре булып тора. 2010 йылдың 31 декабрендә эш көнө оҙайлығы бер сәғәткә кәметелә. Ә 24 декабрь - БР Конституцияһы көнө - иҫтәлекле дата итеп билдәләнә һәм эш көнө иҫәпләнә.

✓Мәскәүҙә Союздар йортоноң Колонна залында "Йыл компанияһы-2010" милли премияһы лауреаттарын бүләкләү тантанаһы булып үтте. РФ Транспорт министрлығы һәм Федераль һауа транспорты агентлығы йылдам үҫеүсе өс авиапредприятиены, шул иҫәптән "Өфө" халыҡ-ара аэропортын милли премияға дәғүә итеүсе булараҡ тәҡдим итте. Премия халыҡ-ара статуска эйә. Лауреатты билдәләү ике этапта барҙы. Дәүләт власы, бизнес һәм йәмәғәтселек вәкилдәренән торған эксперт советы ағзаларының йәшерен тауыш биреү һөҙөмтәһендә "Өфө" халыҡ-ара аэропорты өс дәғүәсе араһында лауреат булды.

✓13 декабрҙә Конгресс-холда Башҡортостанда мәҙәниәт һәм сәнғәт үҫеше проблемалары буйынса түңәрәк ҡор үтә. Сараны уҙғарыу идеяһын БР Президентының мәҙәниәт буйынса советнигы Олег Киреев тәҡдим иткән. Был башланғысты БР Президенты хакимиәте һәм БР мәҙәниәт министры Асҡар Абдразаҡов та хуплаған. Түңәрәк ҡорҙа ижади союздар етәкселәре, билдәле сәнғәт эшмәкәрҙәре, артистар ҡатнашасаҡ. Сарала төбәктәге театр һәм музыка сәнғәте үҫеше мәсьәләләре ҡаралаcаҡ.

✓Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһына ректор итеп Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, профессор Әминә Шафиҡова һайланды. Ул 1974 йылда Бөрйән районында тыуған, ошо уҡ уҡыу йортонда проректор булып эшләгән.

✓ *Бәлки, "фонарҙар"ҙы бөтә илдә яндырырға кәрәктер? Йәғни, балалар футболын үҫтерергәләр, ә? Тәүҙә эреле-ваҡлы ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа спорт майҙансыҡтарын, стадиондарҙы, футбол яландарын төҙөргә кәрәктер, тим?*



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ДОНЪЯ ЧЕМПИОНАТЫНА ТИКЛЕМ...

## малайҙарыбыҙҙы футбол уйнатырға өйрәтәйексе әле

**Ура, йәмәғәт! 2018 йылда футбол буйынса донъя чемпионаты Рәсәйҙә үтәсәк. Ура, ура һәм тағы ла бер тапҡыр ура! Эшләпәләрҙе, кәпәстәрҙе күккә сөйөр ваҡыт. Рәсәй бөтә донъяның танылған спорт үҙәгенә әүерелергә тора. 2012 йылда Сочиҙа - Ҡышҡы Олимпиада! 2018 йылда - Футбол буйынса донъя чемпионаты! Мундиаль, йәғни!**

Юк, юк, Чукоткала ла, Магаданда ла, Якутскиҙа ла үтмәй ул. Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта, Калининградта һәм Түбәнге Новгородта, Ярославлдә һәм Ҡаҙанда, Саранскиҙа һәм Һамарҙа, Волгоградта һәм Дондағы Ростовта, Краснодарҙа, Сочиҙа и Екатеринбургта үтә. Күп ҡалманы. Ни бары һигеҙ йыл ғына. Аҡса йыя башларға ла була. Билетҡа, тим. Донъя чемпионатын телевизор аша түгел, ә үҙ илебеҙҙә, өр-яңы, махсус рәүештә ошо чемпионат өсөн төҙөлгән стадиондарҙа ҡарарға мөмкин буласаҡ. Донъя футболы йондоҙҙарын үҙ күҙҙәребеҙ менән күреп, хатта (ә кем белә?) уларҙың ҡултамғалары ҡуйылған футбол туптары, футболкаларын да алып булыр...

Эх, йәмәғәт, беҙҙең урамға ла байрам килеп етте. Ни бары һигеҙ йыл, йәғни 2920 көн генә ҡалды уға тиклем. Һигеҙ йыл - пүстәк бит ул. Һигеҙ йыл эсендә беҙҙең ил танымаҫлыҡ булып үҙгәрәсәк. Ун өс ҡала ун биш стадион төҙәләсәк. Теләһә ниндәй түгел, ә донъя стандарттарына ярашлы. Һәр береһе кәмендә 50 мең тамашасы һыйҙырышлы. Ә бынан тыш, әллә күпме мең километр юғары сифатлы юл, тимер юлдары, күперҙәр, вокзалдар, аэропорттар, ҡунаҡханалар, рестораndар... Әллә күпме яңы автобустар, самолеттар, вагондар... Европалағы һымаҡ. Америкалағы кеүек.

Бына ошо булалыр инде беҙгә күпме йылдар буйына вәғәҙә ителгән яңы тормош. 2018 йылға тиклем, тим, илебеҙҙә әллә ниндәй үҙгәрештәр булыр әле. О-о-о! Ҡапыл ғына күҙ алдына ла килтереп булмай уларҙы. Өҫтә әйтеп үтелгән ҡалаларҙа, мәҫәлән, транспорт "тығындары" тигән нәмәнең еҫе лә, тоҫо лә ҡалмаясаҡ. Беҙҙең илгә футбол ҡарарға тип килгән күп һанлы аҡлы-ҡаралы-һарылы туристарҙы выжлатып ҡына һә тигәнсә ҡаланың һәм илдең теләһә ниндәй мөйөшөнә алып барып ҡуясаҡтар. Самолет менәнме, поезд менәнме, әллә автобус менәнме - уныһы бик үк мөһим түгел. Алып барасаҡтар - һәм вәссәләм.

Беҙҙең илдә ике бәлә - алйоттар һәм юлдар, тиҙәр ине бит. Хәҙер шуларҙың береһе юҡҡа сығасаҡ. Бөтә илдә түгел, әлбиттә. Донъя чемпионаты үткән ҡалаларҙа ғына. Әммә барыбер беҙгә ҡыуанысլы. Беҙ шатланабыҙ. Үрле-ҡырлы һикерәбеҙ. Сикһеҙ бәхеттән күҙҙәребеҙ аҡая. Эйе, әлегә илебеҙҙе донъя футбол державаһы тип атап булмай. Беҙҙең әлегә Марадона, Пеле, Криштиану Роналду, Дэвид Бекхэм, Рауль Гонсалес, Арьен Роббен, Роберто Карлос, Алессандро Дель-Пьеро, Майкл Оуэн, Зидан кеүек донъя кимәлендәге футболсыларыбыҙ юҡ. Беҙ әлегә нефть һәм газ державаһы. Тағы ла урман державаһы. Дөйөмләштереп әйткәндә, сеймал дәүләте. Йәғни, бөтә донъяны тәьмин итәбеҙ сеймал менән. Ер аҫтынан сыҡҡан һәм ер өҫтөндә йүгереп йөрөгән "сеймал" менән. Европаны һәм Ҡытайҙы - нефть һәм газ, Төркиәне һәм Египетты - туристар менән. Италияны, Испанияны, Грецияны - ҡарт-ҡороно ҡараусылар, йыйыштырыусылар менән. "Мейе"ләрҙе, йәғни аҡыллы баштарҙы ла оҙатабыҙ икән сит илдәргә. Дөрөҫөрәге, улар үҙҙәре үҙҙәрен оҙата. Олигархтар ҙа беҙҙең "сеймалыбыҙ". Улар менән беҙ башлыса Лондонды (инглиз халҡы хәҙер был ҡаланы Лондонград тип атай имеш) тәьмин итәбеҙ. Березовский ҙа, Абрамович та, Гусинский ҙа, Дерипаска ла шунда төйәкләнгән. Башҡаларын әйтергә лә түгел. Тағы ла бер сеймалыбыҙ бар. Ул да булһа - аҡса. Уны олигархтарыбыҙ ҙа ситкә сығара, беҙгә эшкә килгән мигранттар ҙа. Үзбәкстан, Тажикистан кеүек дәүләттәрҙең ҡаҙнаһы, асылда, Мәскәү, Санкт-Петербург урамдарын һепереп, эре ҡалалар эргәһендәге ҡасабаларҙа байҙарға йорттар төҙөгән мигранттар иҫәбенә генә йәшәй, имеш. Улар әле беҙгә донъя чемпионатына ун биш стадион төҙөп бирәсәк.

Был футбол темаһынан ситләште, тип уйлайһығыҙҙыр әле. Юҡ, йәмәғәт. Футболдың ҡап уртаһында йөрөйөм. Йәмйәшел үлән менән (махсус һәм ҡыйбатлы үлән, онотмағыҙ шуны!) ҡапланған ялан буйлап махсус рәүештә иң алдынғы технологиялар (ә, бәлки, нанотехнологияларҙыр?) ҡулланып эшләнгән бик ҡыйбатлы тупты ҡыуып йөрөгән 22 кеше тирәләй меңәрләгән, хатта миллионлаған кеше әйләнә. Футбол бөгөн - донъя тотҡаһы. Футболсыларға спорт формаһын тегеү өсөн махсус туҡыма һәм махсус ептәр уйлап сығаралар. Уларҙың аяҡ кейемеңең (бутсыларының, тимәк) һәр береһе ҡыйбатлы автомобиль кеүек тора. Ә тренерҙар, уның ярҙамсылары, врачтар, массажсылар?.. Ә футбол тирәләй ойошторолған реклама? Ә тамашасылар килтергән килем? Улар билет алып ҡына ҡалмай, ашай, эсә, сувенирҙар һатып ала бит. Донъя чемпионатын телевидение аша бөтә донъяға трансляциялау ғына кәмендә бер нисә йөҙ миллион долларға төшәсәк.

О-о-о! Футбол бөгөн бик табышлы шөғөл. Футболсыларҙың һәм уларҙың тренерҙарының эш хаҡының күләмен беләһегеҙме? Йылына бер нисә тиҫтә миллион, тиҙәр. Юҡ, әлбиттә, һумдарҙа түгел. Долларҙарҙа, йәки еврола. Ә стадиондарҙы, юлдарҙы, вокзалдарҙы төҙөүселәр? Ташсылар һәм бетонсылар түгел, әлбиттә, ә төҙөлөш фирмаларының етәкселәре, уларға подряд биреүсе дәүләт ойошмалары һәм башҡалар? Улар, футболсы булмаһа ла, чемпионат алдынан кеҫәләрен ҡалынайтырға иҫәп тоталарҙыр, моғайын.

Хәйер, футбол иң тәүҙә тамаша бит. Борон-борондан кеше тамашаға битараф булмаған. Икмәк һәм тамаша талап иткән икән боронғо Рим империяһы халҡы. Һәм императорҙар улар өсөн махсус рәүештә амфитеатрҙар (бөгөнгөсә, стадион була инде) төҙөгән. Иң ҙуры, иң мөһабәте - Римда. Колизей тип атала. Емереклектәре әле лә бар тиҙәр. Ә йәмғеһе империя буйлап ике йөҙләп амфитеатр төҙөлгән булған. Дөрөҫ, ул ваҡытта әле футболды уйлап сығармағандар. Әммә кеше барыбер тамашаһыҙ ултырмаған. Гладиатор алыштары ойошторолған, йәғни кеше кеше менән, йә йыртҡыс хайуан менән һуғышҡан. Кем көслөрәк, шул тере. Бына бит ул ниндәй әтәргес көс булған! Әйткәндәй, гладиатор алыштары алдынан Колизейҙа һәм башҡа амфитеатрҙарҙа тамашасыларға ысынлап та икмәк таратҡан булғандар икән. Бай патрицийҙарға түгел, әлбиттә. Улар мохтажлыҡ кисермәгән. Ә ябай халыҡҡа. Икмәк һәм тамаша, йәмәғәт.

Тамағы туҡ һәм күңеле күтәренке кеше өҫтө бөтөн булмаһа ла, килешә. Баш күтәрмәй. Тауыш сығармай. Ҡулына күсәк, һәнәк, йәки һуйырташ, йә булмаһа ҡәләм алмай. Ул ҡәнәғәт. Шул иҫәптән, торомшо менән дә.

Хәйер, һуҙебеҙ футбол хаҡында ине бит. Иң мөһиме, (стадиондарҙан, инфраструктуранан башҡа) - уйын. Дөрөҫөрәге, еңеү. Тағы ла аныҡлабыраҡ әйтһәк, Рәсәй йыйылма командаһының Еңеүе. Беҙ ҡасан да булһа, сирек финалға, ярым финалға һәм финалға үтеп, донъя чемпионы булырға тейешбеҙ ҙә инде. Беҙҙең милли менталитетыбыҙ (һүҙ Рәсәй халҡы тураһында барғанын аңлағанһығыҙҙыр инде) бары тик еңеүҙе генә талап итә. Быны Совет системаһы "калдығы", тип тә әйтергә булыр ине. Ә икенсе яҡтан, кем еңеүҙе теләмәй икән? Спорттағы еңеү, айырыуса, донъя йәки халыҡ-ара кимәлендәгеһе, кешеләрҙә патриотик тойғолар тәрбиәләргә һәм үҫтерергә ярҙам итә. Халыҡта үҙ иле өсөн ғорурлыҡ уяна. Ул дәүләте өсөн йәнен, тәнен бирергә әҙер. Ул дәүләт ҡайҙа ҡушһа, шунда барырға, нимә ҡушһа, шуны эшләргә тырышсынып, атлығып тора. Сөнки ул бөгөн - Еңеүсе. Ә уның Тыуған иле - донъялағы иң шәп ил.

Күктән ергә төшәйек. Футболсыларыбыҙ бөгөн, дөрөҫөн генә әйтергә кәрәк, бик шәптән түгел. Үҙ-ара, ил чемпионатында, йәғни, уйнағанда, был бигүк һиҙелмәй. Хатта ҡайһы бер ваҡытта, айырым осраҡтарҙа матур ғына голдар индерергә һәләтле улар. Ә бына башҡа илдәрҙең йыйылма командалары менән осрашҡанда иһә, беҙҙекеләр нисектер... баҙап тип әйтәйемме икән, ҡалалар. Уларға, аптырағас, сит ил тренерҙарын беркетеп ҡаранылар. Гус Хиддингты, мәҫәлән. Аҡсаны умырып алды ул. Ә футболсыларыбыҙ нисек "уйнаған", шулай уйнауын дауам итә. Әле бына Дик Адвокат беҙҙекеләр менән булаша. Бәлки, берәй нәмә килтереп сығарыр, тигән өмөт ҡуҙы баҙлай әлегә күңелдә. Әммә бик һүренке генә.

Шуныһы ғәжәп, ил ҙур, ә уйнар кеше юҡ. Улай булмай ҙа баһа. Бөтә донъяға билдәле талантлы артистәребеҙ, йырсыларыбыҙ һәм бейеүселәребеҙ, аҡыллы ғалимдарыбыҙ, хатта эшлекле эшҡыуарҙарыбыҙ (олигархтарҙы әйтәм) бар. Ә футболсылар юҡ. Бәлки, дөрөҫ эҙләмәйбеҙҙер? Бәлки, кәрәкле урында эҙләмәйбеҙҙер? Төндә ҡараңғы мөйөштә юғалтҡан аҡсаһын фонарь аҫтында эҙләп йөрөгән кеше кеүекбеҙ түгелме шул? Бәлки, "фонарҙар"ҙы бөтә илдә яндырырға кәрәктер? Йәғни, балалар футболын үҫтерергәләр, ә? Тәүҙә эрелеваҡлы ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа малайҙарға туп тибеү серҙәрен өйрәнергә бәләкәс кенә мөмкинлек бирергә кәрәктер? Спорт майҙансыҡтарын, стадиондарҙы, футбол яландарын теүҙә шунда төҙөргә кәрәктер, тим?

Йәмәғәт, миндә шәп бер идея тыуҙы әле. Өҫтәрәк сит илдәргә сығарған нәмәләр тураһында әйтеп үткәйнем бит. Чемпионатҡа тиклем әле һигеҙ йыл бар. Бәлки, беҙгә сит илдәрҙең иң шәп футболсыларын индерергәләр? Абрамовичтың "Челси" командаһы уйынсыларын тулыһынса Рәсәй йыйылма командаһы тип иғлан итергә лә була. Уларға Рәсәй гражданлығы вәғәҙә итәйек, мул ғына премия (әйтәйек, бер стадион хаҡы) бирәйек. Әйҙә уйнаһындар Рәсәй өсөн. Беҙгә Донъя чемпионаты кубогын бүләк итһендәр. Беҙгә аҡса йәл түгел. Беҙ аҡсаны былай ҙа уңлы-һуллы туҙҙырырға оҫтабыҙ. Беҙгә Еңеү мөһим. Һәм, әлбиттә, икмәк һәм тамаша. Ә Абрамович ҡаршылашып маташһа иһә, беҙҙең бойондороҡһоҙ һәм ғәҙел судыбыҙ, прокуратурабыҙ һәм милиц...ғәфү, Яңы йылдан полициябыҙ бар ҙа баһа... Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт?

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Йыл аҙағына тиклем алты йөҙҙән ашыу йәш ғаилә балалары тыуған осраҡта дәүләт тарафынан матди ярҙам - торлаҡ өсөн кредиттарҙы ҡаплау өсөн түләнә торған субсидияны аласаҡ. Республика бюджетынан ошо маҡсатта 150 млн һум аҡса бүлендә.

✓"Ләлә-Тюльпан" мәсетендә мосолман йәштәр мөхитендә терроरсылыҡты иҫкәртеү мәсьәләләренә арналған түңәрәк ҡор булып үтте. БР Президенты ҡарамағындағы Дәүләт конфессия- ара мөнәсәбәттәр буйынса совет рәйесе Вячеслав Пятков билдәләүенсә, Уралдағы ислам һәр ваҡыт толерантлы булды һәм бөгөн ошо традицияны, донъяуи диндә боҙорға берәүгә лә хоҡуҡ бирелмәгән. Фән докторы Айһылыу Юнысованың: "Дәүләт үҙ-үҙен яҡлай, әммә йәштәр үҙ-үҙен яҡлай алмай. Уларҙы һеҙ, дин әһелдәре, яҡларға тейешһегеҙ. Әммә беҙҙең дини идаралыҡтар был мәсьәләлә бик ҡуҙғала һалып бармай", - тигәне лә урынлы булды.

✓Стәрлетамаҡ ҡалаһында башҡорт драматургияһының Республика театр фестивале булып үтте. Бер аҙналыҡ фестивалдә 11 театр милли драматургия буйынса ҡуйылған спектаклдәр менән сығыш яһаны. М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры Салауат Әбүҙәрҙең "Хыялый" лирик комедияһы менән ҡатнашты. Был спектакль фестивалдең өс призын алып ҡайтты: автор Салауат Әбүҙәр "Драматургиялағы дебют", артистар Илдар Сәйетов, Азамат Ғафаров төрлө номинацияларҙа призарға лайыҡ булды.

✓18 декабрҙә "Нефтселәр" мәҙәниәт һарайында "Байыҡ" башҡорт бейеүҙәрен башҡарыусылар араһындағы республика телевизион бәйгеһенең гала-концерты үтә. Был конкурс 2008 йылдан үткәрелеп килә. Быйылғы бәйгелә 500-ҙән ашыу кеше ҡатнашты, уларҙың иң-индәре генә гала-концертҡа үтте. Концертта Татарстан, Украина, Хакасия, Ҡалмыҡстан, Бүрәт, Осетиянан бейеүселәр ҡатнаша.

✓18 декабрҙә Миәкә районының Туҡһанбай ауылында "Аҡмулла нәсихәттәре" республика фольклор байрамы үткәрелә. Ойоштороусылары - БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Миәкә районы хакимиәте. Байрам барышында күптән түгел үткән сәсәндәр бәйгеһе еңеүселәрен бүләкләү һәм Аҡмулла исемендәге премияның 2010 йылғы лауреаттарын тәбрикләү ҙә көтөлә.

*✓ Сәйәхәт итергә яратыусылар мәмерйәнән палеонтологик ҡомартҡыларҙы - боронғо йәнлектәрҙең һөйәктәрен дә алып сыҡҡан. Кеше күп йөрөү һөҙөмтәһендә тәбиғәт ҡомартҡыһының микроклиматы үҙгәреүгә дусар булған.*



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ШӘМ ЯНДЫРЫП...
## белгес эҙләйбеҙ

**Республикала профессиональ белем биреүҙе үҫтереү концепцияһы ҡабул ителде. Ул белгестәрҙе әҙерләүҙең сифаты һәм хеҙмәт баҙарындағы һорау араһындағы тигеҙһеҙлекте бөтөрөүгә йүнәлтелгән.**

"Беҙҙең мәғариф системаһы бөгөнгө иҡтисад талап иткән белгестәрҙе күпләп сығарыуға әҙер түгел. Үкенескә күрә, уҡыу йорттарын тамамлаусыларҙы ҡабаттан уҡытырға кәрәк", - ти Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов. Шуға күрә ул эш биреүселәрҙе, шулай уҡ бизнес-йәмәғәтселек вәкилдәрен кадрҙар әҙерләү мәсьәләһенә ҡушылырға саҡырҙы. "Белгестәрҙе уҡытыуҙа, программалар әҙерләүҙә ҡатнашығыҙ, практика ойоштороғоҙ, үҙегеҙҙең белгестәрегеҙҙе лекциялар уҡырға ебәрегеҙ. Юғары уҡыу йорттары талап ителмәгән бакалаврҙар ағымын сығара, ә аныҡ эш биреүсе үҙенә кәрәк белгесте көндөҙ шәм яндырып эҙләп тә таба алмай", - тине ул.

● Уҡытыусы профессияһының абруйын күтәреү маҡсатынан Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республика вуздарында лекциялар уҡый башларға ниәтләй. Шулай уҡ ул Хөкүмәттә эшләүсе ғилми дәрәжәһе булған кадрҙарҙы ла ошо эште башларға саҡыра. "Бәлки, артабан быға эшҡыуарлыҡ та әйәрер. Бәлки, шулай итеп беҙ белем биреү һәм ысынбарлыҡ араһындағы айырмалыҡты бөтөрә алырбыҙ", - ти республика башлығы.

● Республиканың юғары уҡыу йорттары ректорҙарына төбәктә федераль кимәлдәге университет булдырыу буйынса эште әүҙемләштереү бурысы ҡуйылды. Бөгөн Башҡортостанда урынлаштырылған әһәмиәткә эйә вуздар ғына эшләй. Дәүләт башлығы Рөстәм Хәмитов дөйөм Рәсәй һәм халыҡара кимәлдәге белем биреү үҙәктәре булған күрше өлкәләрҙе миҫалға килтереп: "Үҙ бөйөклөгөң тураһындағы миф менән йәшәү етер. Әлегә Башҡортостандың бер генә вузы ла федераль йәки милли тикшеренеү статусы алмаған. Ил етәкселеге иң яҡшы тип тапҡан 7 федераль һәм 29 милли тикшеренеү университеты араһында беҙҙән береү ҙә юҡ. Быны кемдәндер интриғаһы һөҙөмтәһе тип үҙ-үҙеңде тынысландырырға ярамай. Берәү ҙә беҙгә ҡаршы интрига ҡормай, ә бары тик яҡшыраҡ эшләргә генә кәрәк", - тип белдерҙе. Ысынлап та, Башҡортостандың иң яҡшы уҡыусыларының ситкә, федераль университеттарға Мәскәүгә, Санкт-Петербургҡа, Ҡаҙанға, Екатеринбургҡа китеүе, демографик хәлторош республиканы "кадрҙар көрсөгөнә" терәүе лә ихтимал бит.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

**Халҡыбыҙҙың "Берҙәмлектә-көс" тигән билдәле генә әйтеме бар. Йәшәй, йәшәй, ошо әйтемдең дөрөҫлөгөнә инанаһың. Берҙәмлек, тигәндән. Өфөнөң башҡорт гимназиялары, лицейҙары уҡыусылары араһында ойошторолған"Урал батыр вариҫтары" спартакиадаһы ла нәҡ берҙәмлек, мәргәнлек сифаттарын тәрбиәләүсе сара булараҡ, йылдан-йыл абруй ҡаҙана бара. Күптән түгел был бәйге өсөнсө тапҡыр старт алды. "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух" тип алға әйҙәгән спартакиада үҙ алдына ниндәй маҡсаттар ҡуя? Быйылғыһы алдағы йылдарҙағы сараларҙан нимәһе менән айырыла? Ошондай һорауҙар менән спартакиаданы ойоштороусыларға мөрәжәғәт иттек.**

# БЕРҘӘМЛЕК, МӘРГӘНЛЕК МӘКТӘБЕ УЛ...
## "Урал батыр вариҫтары"

**Фәнзил ӘХМӘТШИН, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары, Йәштәр ҡоро рәйесе:**

-Баш ҡалабыҙҙың башҡорт гимназиялары, лицейҙары араһында уҙғарылған бәйге алдағы ике йылда ла ҙур ойошҡанлыҡ менән үткәйне. Быйылғы уҡыу йылында ла уның шундай кимәлдә үтәсәгенә шигем юҡ. Шуныһы ҡыуаныслы, ҡатнашыусы мәктәптәр һаны күбәйә. Спартакиадала тәүге йылда - 8, былтыр 10 белем усағы ҡатнашһа, быйыл инде унда барлыҡ башҡорт гимназия-лицейҙары командалары ла йәлеп ителде. "Урал батыр вариҫтары" сараһының туранан-тура маҡсаты - балаларҙы спортҡа ылыҡтырыу. Шулай уҡ был сара аралашыу, дуҫлашыу яғынан да ҙур роль уйнай. Быға саҡлы баш ҡаланың башҡорт лицей-гимназияларындағы балалар бер-береһе менән аралашманы, хәҙер улар, исмаһам, бер-береһен танып белә.

Сараның тағы әһәмиәтле яғы шул: бәйге балаларҙы яуаплылыҡҡа, ойоштороу эшенә өйрәтә. Төрлө документтар, положениелар, программалар төҙөү, уны теркәү эштәре булһынмы, барыһы ла йәш кешене үҫтерә. Аллаға шөкөр, бындай сараларҙың һөҙөмтәһе күренә башланы. Балаларҙың "Шаяниум"да, башҡа башҡорт сараларында , "Урал батыр вариҫтарында" ҡатнашып, рухи яҡтан үҫә, туған телгә, тыуған ергә һөйөү, патриотлыҡ тойғолары барлыҡҡа килә икәненә инана бараһың. Иғтибар иткәнһегеҙҙер: һуңғы йылдарҙа Өфөлә тыуып үҫкән башҡорт йәштәренән торған төрлө ижади коллективтар, төркөмдәр барлыҡҡа килде. Уларҙың сәхнә күгендә туған телдәрендә сығыш яһауы ошо бәйгеләрҙең һөҙөмтәһе лә инде.

Ә спорт менән шөғөлләнгән кеше бер ваҡытта ла юғалып ҡалмай. Зыяны юҡ, тик файҙа ғына. Был бәйге балаларыбыҙҙы яман ғәҙәттәрҙән арынырға, батырлыҡҡа, ҡыйыулыҡҡа өйрәтә икән, үҙ маҡсатына өлгәшәсәк.

**Азат МОНАСИПОВ, Башҡорт йәштәре иттифағы рәйесе урынбаҫары:**

- Башҡорт ир-егеттәре элек-электән мыҡты кәүҙәле, көслө булыуы менән айырылып торған. Төрлө ярыштарҙа бил бирмәүҙәре ошондай ярыштарҙа сыныҡҡыуҙан килгән. Ә сыныҡҡыу бала саҡтан, йәнһә мәктәп йылдарынан килергә тейеш. Ошоларҙы күҙ уңында тота ла инде "Урал батыр вариҫтары". Бәйгелә футбол, пейнтбол, саңғы ярышы кеүек спорт төрҙәре менән һаулыҡты нығытыу ғына түгел, ә берҙәмлек, сәмлелек, мәргәнлек сифаттары тәрбиәләү ҙә күҙҙә тотола. Кешелә ошо сифаттар бар икән, улар тормошта юғалып ҡалмаясаҡ, тигән һүҙ.

Быйылғы миҙгелдә "Урал батыр вариҫтары" бәйгеһе программаһында үҙгәрештәр бар, унда милли көрәш менән өҫтәл теннисы ла индерелде. Көрәш - халҡыбыҙ ҡомартҡыһы. Уны һаҡлау, үҫтереү беҙҙең төп бурысыбыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҫмерҙәрҙе, йәштәрҙе урам йоғонтоһо, насар ғәҙәттәр ҡармап алырға әҙер торғанда бындай сараларҙың уҙғарылыуы оло маҡтауға лайыҡ. Балаларыбыҙ лайыҡлы быуын булып үҫһен өсөн, әлбиттә, уларҙың сәләмәт йәшәү рәүешен хәстәрләргә бурыслыбыҙ. "Урал батыр вариҫтары" сәләмәт тормошҡа юл яра ла инде...**

**Нил ҒАЗИН.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# МӘМЕРЙӘГӘ ХӘҮЕФ ЯНАЙ

**Ғафури районының Киндерле мәмерйәһе торошо мәсьәләләре БР-ҙың Спелеология һәм спелеотуризм федерацияһы үткәргән съезд-конференцияла тикшерелде.**



Халыҡ араһында Еңеүҙең 30 йыллығы исемендә йөрөгән мәмерйәне туристар емереп бөтөп бара. Мәмерйә ауыҙы янындағы "Боҙ ҡаласығы" ирегән, сталагмит-сталактиттар һәм "Пагода" йәйлап емерелә, төҫөн үҙгәртә. "Музыкаль ҡумта", "Ҡыҙыл сталактит" емерелгән һәм мәмерйәнән алып сығылған. Төрлө залдағы гипс сәскәләр һәм Классик залдағы мәмерйә инйылары юҡҡа сыҡҡан. Маршрут буйынса бөтә залдар ҙа һөрөм менән ҡапланған, туристар стеналарға яҙыуҙар ҡалдырған. Бынан тыш, сәйәхәт итергә яратыусылар мәмерйәнән палеонтологик ҡомартҡыларҙы - боронғо йәнлектәрҙең һөйәктәрен дә алып сыҡҡан. Кеше күп йөрөү һөҙөмтәһендә тәбиғәт ҡомартҡыһының микроклиматы үҙгәреүгә дусар булған, белгестәр һауа, һыу һәм тупраҡта патоген флора тапҡан.

Бынан тыш, мәмерйәгә инеү йылдан-йыл хәүефлерәк була бара. Был проблемалар барыһы ла БР буйынса Росприроднадзор идаралығы эргәһендәге айырыуса һаҡланған тәбиғәт территориялары һәм экологик туризм буйынса ведомство-ара советтың сираттағы ултырышында тикшереләсәк.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓"Ҡашҡаҙан" паркында, "Төҙөүсе" стадионында, Спорт һарайында тәүге боҙ майҙансыҡтары асылды. Ошо көндәрҙә тағы ла И. Якутов исемендәге паркта, "Нур" театры артындағы Салауат Юлаев исемендәге спорт-һауыҡтырыу комплексында, "Күл-тау" ғаилә-спорт комплексында,"Нефтсе","Динамо" стадиондарында, "Аҡбуҙат" ипподромында, Дим районының "Локомотив" спорт комплексында боҙ майҙансыҡтары эшләй башлаясаҡ. Өлкәндәр өсөн үҙ конькийы менән инеү хаҡы 50-120 һум, балалар өсөн 40-80 һум. Конькиҙарҙы прокатҡа ла алып була. Боҙ майҙансыҡтарынан тыш, баш ҡалалағы 73 хоккей ҡабының байтағы эшләй башлаған да инде.

✓Ейәнсура яҡташтар ойошмаһы 12 декабрҙә Башҡорт дәүләт филармонияһында яҡташтар осрашыуы үткәрә.

✓Үткән аҙнала республикала 17500 кешегә киҫкен респиратор ауырыуы диагнозы ҡуйылған. Ауырыусыларҙың 71,2 проценты - 14 йәшкә тиклемге балалар. Грипп осраҡтары әлегә теркәлмәгән. Өфөлә иһә 5 менләп кеше ауырый. Был эпидемия сигенән 19 процентҡа түбәнерәк. Декабрь башына 915,1 мең кеше грипҡа ҡаршы прививка яһатҡан.Был республика халҡының 22,6 процентын тәшкил итә.

✓Бөгөн Күмертауҙа "Таҡмаҡ әйтеш" конкурсы буласаҡ. Уны БР Мәҙәниәт министрлығы һәм БР Халыҡтар дуҫлығы йорто ойоштора.

✓Өфөлә йортһоҙ берәҙәктәр өсөн Шакшала һәм Колгуевола ике приют эшләй, улар 70 урынға иҫәпләнгән. Ҡалған берәҙәктәр подвалдарҙа, йылылыҡ трассалары урынлашҡан урындарҙа йәшәргә мәжбүр. Әммә баш ҡала хәҙер өс мендән ашыу берәҙәк рәсми теркәлгән. Теркәлмәгәндәре менән улар тағы ла күберәк булыуы мөмкин.

✓Өфөлә энергияны һөҙөмтәле һаҡлауҫы аҙ ҡатлы йорт файҙаланыуға тапшырылды. Яңы төҙөлөш технологиялары менән төҙөлгән бындай йорт әле төбәктә берҙән-бер. Совет районында урынлашҡан был өс ҡатлы йортта 33 фатир иҫәпләнә, уларҙың дөйөм майҙаны 1234,8 кв метр. Бында авария хәлендәге 6 йорттан күскән 103 кеше өй түйласаҡ.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ИР АБРУЙЫН...

## ғаилә һаҡлай

**Баймаҡта китапханасыларҙың семинары үтте.**
**Билдәле булыуынса, Баймаҡ район китапханаһы тырыш хеҙмәте, төрлө ҡаҙаныштары өсөн республика грантына лайыҡ булғайны. Шуға күрә Ырымбур, Силәбе өлкәләренән, республиканың төрлө райондарынан китапханасыларҙы бер ҡорға йыйған төбәк-ара семинарҙың тап Баймаҡта үтеүе бушҡа түгел. Ҡунаҡтар Баймаҡ китапханасыларының башҡорт китабын халыҡҡа еткереү буйынса эш тәжрибәһен өйрәнде, улар үткәргән үҙенсәлекле сараларҙы үҙ күҙҙәре менән күрҙе.**

Был көндө Баймаҡ китапханасылары ауылдарҙа үткән "Өс таған" конкурсына йомғаҡ яһаны. Бына сәхнәгә кескәй малайҙар, көсө ташып торған атайҙар, инде сәстәренә сал йүгергән ҡартатайҙар сығып теҙелде. Уларҙың күбеһе тәүге мәртәбә оло сәхнәгә, халыҡ алдына сығып баҫыуына ҡарамаҫтан, үҙҙәрен мәртәбәле, матур, килешле итеп тотоуҙары менән һоҡландырҙы. Байыш ауылынан Дәүләтшиндар, Баймаҡтан Сафиуллиндар, Ниғәмәттән Иҫәнбаевтар, Өмөтбайҙан Ғүмәровтар, Темәстән Мырҙабулатовтар, Сәйғәфәрҙән Килдеғошовтар, Яраттан Мырҙабулатовтар, Әбделкәримдән Булатовтар, Беренсе Этколдан Хисмәтуллиндар, Сыңғыҙҙан Рәжәповтар, Яраттан Мырҙабулатовтар улар. Сал сәсле ил ағаларының улдарын, ейәндәрен эйәртеп сәхнәгә күтәрелеүе үҙе бер ҡабатланғыһыҙ тамаша булды.

Район китапханаһы мөдире, ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе Луиза Дәүләтшина әйтеүенсә, ир-егеттәрҙең бәҫен күтәреү, уларҙың аҡса, мал табыусы ғына түгел, ә ғаилә тотҡаһы икәнлеген күрһәтеү, ошо хаҡта ҡатын-ҡыҙҙарҙың хәтеренә төшөрөү өсөн уйланыла был сара. "Әлбиттә, һәр ауылда ғәжәйеп уңған, аҡыллы атайҙар, ҡартатайҙар бихисап. Әммә улар кеше алдына сығып, сығыш яһарға тартына. Шулай ҙа беҙ районыбыҙҙың иң-иң ир-егеттәрен табыуға өлгәштек. Был сараның һөҙөмтәһе булыр, ил ағаһы, Ватан терәге булған аҫыл ир-егеттәр күтәрелеп сығып, башҡаларға матур өлгө күрһәтер, тип ышанам",- тине ул.

"Өс таған" конкурсында ҡатнашыусы ир-егеттәр төрлө кәсептәрҙе сағылдырған күргәҙмәләр әҙерләгән, ырыу-ара шәжәрәһен төҙөгән. Ә инде уларҙың тормош юлдаштары ир һәм ҡатындың мөхәббәтен генә түгел, бер-берећенә булған ихтирамын, ҡәҙерен дә сағылдырып, тәмлекәстәрҙән, аш-һыуҙарҙан табын ҡорған. Ошонда уҡ бәйгелә ҡатнашыусы ғаиләләрҙә үҫкән балаларҙың кәсептәре, таланттары ла, тамырҙары тураһында мәғлүмәтлелектәре лә сағылыш таба.

Конкурста ҡырҡ дүрт ауылдан ҡырҡ алты ғаилә ҡатнашҡайны. Был ғаиләләрҙә атай абруйы, атай тәрбиәһе бар әле һәм буласаҡ, тигән хәҡиҡәтте раҫлай. Финалға сыҡҡан һәр ҡартатай, атай һәм ейәндәр командаһы "Иң яҡшы шәжәрә төҙөүсе", "Халыҡ традицияларына тоғро ғаилә" һ.б. номинацияларҙа еңеү яуланы. "Был ғаиләләр-беҙҙең байлығыбыҙ. Улар менән беҙ хаҡлы рәүештә ғорурланабыҙ һәм башҡаларға үрнәк итеп ҡуябыҙ. Һәр ғаиләлә шулай атай абруйы һаҡланһын, был бөйөк исемгә тап төшмәһен, эскелек, яуызлыҡ, ҡаты бәғерлелек шәүләһе төшмәһен", - тигән матур теләктәр белдерелде уларға.

Сарала ҡатнашып, Башҡортостан Ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһы рәйесе Рәшиҙә Солтанова: "Эйе, беҙ ир-егеттәрҙе күмәкләп әрләргә, кешегә һанамаҫҡа күнегеп киттек. Ә уларға хәҙерге заман проблемаларына ҡаршы торорға кем ярҙам итә ала? Әлбиттә, беҙ, ҡатын-ҡыҙ халҡы. Киләсәктә Баймаҡта уҙған ошо "Өс таған" тантанаһын республика кимәлендә үткәреү мөһим. Ә һеҙҙең өс тағандар дүрт тағанға әүерелһен, бөгөнгө ғәжәйеп ҡартатайҙарға бүләләре менән дә сәхнәгә күтәрелергә яҙһын", - тигән һүҙҙәр еткерҙе.

Ә был сараға бирелгән иң ҙур баһа кескәй генә бер ейәндең һүҙҙәре булғандыр, моғайын. Ул "Һинең өсөн бәхет нимә ул?" тигән һорауға "Картатайым һәм атайым менән сәхнәлә бергәләшеп баҫып тороу һәм үҙ телемдә һөйләшеү - минең өсөн иң ҙур бәхет", - тине. Ябай ғына һүҙҙәрҙә күпме хаҡлыҡ, хатта бөйөклөк ярылып ята.

**Динә ИҪӘНҒОЛОВА.**




ОҺО, ЯҠШЫ ХӘБӘР!

# ЮЛДАР ҺӘМ ИХАТАЛАР ТӨҘӨКЛӘНӘ

**2011 йылда "Берҙәм Рәсәй"ҙең яңы юлдары" проекты сиктәрендә ҡала урамдарын ремонтлау һәм ихаталарҙы реконструкциялау өсөн Өфөгә 795 миллион һум аҡса бүленеүе көтөлә.**

Бүленгән сараларҙың 265 миллионы ҡала урамдарын ремонтлауға, 530 миллионы ихаталарҙы төҙөкләндереүгә тотоноласаҡ. Һуңғы биш йыл эсендә ҡала бюджетынан ихаталарҙы төҙөк тотоу өсөн бары 316 миллион һум бүленгәйне.

"Берҙәм Рәсәй" партияһының 2007 йылдан башланған был проекты бөгөнгө көндә күп кенә төбәктәрҙең баш ҡалаларында тормошҡа ашырыла. "Өфө - Аэропорт" юлына һәм Октябрь проспектына реконструкция, Жилино һәм Базилеевкаға юл төҙөү тап "Берҙәм Рәсәй" проекты сиктәрендә атҡарылды ла инде. Өфө ҡала округы хакимиәтендә әйтеүҙәренсә, киләһе йылда З. Вәлиди, Пушкин, Цюрупа, Киров, Октябрҙең 50 йыллығы, СССР-ҙың 50 йыллығы, Комсомол, Рәсәй, Сипайлово урамдарына капиталь ремонт үткәреләсәк.

# АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫНА ЯРҘАМҒА

**Ҡоролоҡ әҙемтәләрен бөтөрөү өсөн Башҡортостан Республикаһы федераль бюджеттан 3 млрд. 88 млн. һум күләмендә бюджет кредиты алды.**

РФ Ауыл хужалығы министрлығы тәҡдиме буйынса, был сумманың 35 проценты миҙгел эштәрен үткәреү өсөн субсидия итеп йүнәлтелгән. Бюджет кредитының ҡалған өлөшө ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәргә мал аҙығы әҙерләү һәм һатып алыуға тотонолған.

БР Хөкүмәте һәм РФ Финанс министрлығы араһында төҙөлгән килешеүгә ярашлы, ҡоролоҡтан зыян күреүселәргә ярҙам итеү өсөн федераль бюджеттан республикаға 459,045 млн. һум күләмендә дотация ла бүленгән. БР Хөкүмәте ҡарары менән субсидиялар биреү тәртибе ҡабул ителгән һәм улар зыянды ҡаплауға йүнәлтелгән дә инде.

Яҡын арала РФ Хөкүмәте төбәктәргә тағы бер траш бүлергә ҡарар итте. Башҡортостанға 406 млн һум ҡаралған. 2010 йылдың 4-се кварталында федераль бюджеттан республика ҡаҙнаһына 1 йылға тиклем алынған кредит һәм займдар буйынса проценттарҙың бер өлөшөн ҡаплау өсөн - 85 млн. һум, минераль ашламалар һатып алыу өсөн - 29,294 млн. һум, "Ауылдың социаль үҫеше" программаһы буйынса йәш белгестәргә һәм граждандарға субсидиялар биреү өсөн 14,8 млн. һум аҡса бүленгән. Бынан тыш, "2009-2012 йылдарға Башҡортостан Республикаһында малсылыҡты үҫтереү" маҡсатлы программаһы сараларын финанслау өсөн 138 млн. һум бүленеүе көтөлә.

# ТОРЛАҠ ӨСӨН - СУБСИДИЯ

**Башҡортостанда йыл аҙағына тиклем 600 йәш ғаилә торлаҡ өсөн субсидия аласаҡ. Бының өсөн республика бюждетынан 150 миллион һум аҡса бүленгән.**

Был субсидия торлаҡтарын яҡшыртыуға мохтаж булған һәм балаһы тыуған йәш ғаиләләргә тапшырыла. Субсидия беренсе бала тыуғандан һуң - һигеҙ, икенсеһе - ун ике, өсөнсө һәм унан һуңғылары өсөн ун алты квадрат метр өсөн бирелә. Быйыл был программа сиктәрендә 400 ғаиләгә субсидия бүленгән. Әлеге ваҡытта 2011-2015 йылдарға иҫәпләнгән яңы программа проекты әҙерләнә.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



## Юғары ҡан баҫымы

Ҡарағат, ҡурай еләге япраҡтарын, ҡара миләш емешен бер тигеҙ итеп алығыҙ һәм болғатып бер һауытҡа һалып ҡуйығыҙ. Бер стакан ҡайнар һыуға 1 балғалаҡ һалып, сәй урынына эсергә.

Юғары ҡан баҫымы булғанда эсеү өсөн тағы ла бер сәй рецебы: петрушка һәм фенхель орлоҡтары, эт муйылы (крушина) ҡайырыһы, бөтнөк япрағын бер тигеҙ итеп алырға, болғатырға. 1 ҡалаҡ ҡатнашмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойғас, көнөнә ике тапҡыр яртышар стаканлап эсергә.

## Сәй - йәнгә дауа

Иртән ҡуйы итеп ҡара сәй, төшкөлөккә - йәшел, кискеһен йәшел сәйгә үләндәр ҡушып, төнгөлөккә тынысландырыусы үләндәр эсеү яҡшы. Иртәнге сәйгә имбир турап йәки киптерелгән боланут (кипрей) ҡушып ебәрһәң, тонусты күтәреүсе бик шәп сәй килеп сыға.

## Организмды таҙартыу өсөн:

1-әр балғалаҡ бөтнөк, мәтрүшкә, йүкә сәскәһе, ваҡланған миләш емеше, ҡара сәй алып болғатығыҙ. 1 кешегә 1 ҡалаҡ ҡушылма алып төнәткәс, бал ҡушып эсергә. Йөрәккә лә дауа булһын өсөн 1 күрәгә һалып ебәрергә.

## Геморрой яфалаһа...

30 г имән ҡайыры, 30 г етен орлоғо, 40 г аҡ сәскә алып, ярты литр ҡайнар һыуҙа төнәткәс, стакандың өстән бер өлөшө күләмендә ашағандан һуң көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

## Ҡул тиреһе өсөн...

Ҡырғыстан керән үткәреп, саҡ ҡына бал ҡушырға һәм ҡулдарҙың һыртына һөртөргә һәм ярты сәғәт торорға. Йылы һыу менән йыуып төшөргәс, ҡулдарға крем һөртөргә. Был битлек ҡул тиреһен ҡартайыуҙан һаҡлай, йомшарта, матур көйө ҡалырға ярҙам итә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ӘХМӘТЗӘКИ ВӘЛИДИ ҺӘМ...

## бөрйән башҡорттары



**"Бөрйән башҡорттары араһында" исемле хеҙмәтендә Әхмәтзәки Вәлидов үҙенең студент дуҫын, башҡорт халҡының шөғөлөн, көнкүрешен, мәҙәниәтен һәм йолаларын күрһәтеү өсөн, Стәрлетамаҡ тирәһендәге, Ағиҙелдең уң яҡ ярындағы ауылдарға алып барыуы хаҡында яҙа. Ләкин оло юл буйында йәшәгән башҡорттарҙың, күп ваҡыттан бирле рустар һәм татарҙар менән ҡатышҡанлыҡтан, башҡортлоҡтарын тулыһынса һаҡлап ҡала алмауҙарын, "эштән сығып боҙолғандарын" күрә лә, шунан ҡасыңҡырап, ҡояш сығышы яғына - урман эсенәрәк инеп, матур тауҙар араһында ғүмер кисергән тәбиғи һәм саф башҡорттар менән осрашырға китә. Шулай улар дуҫы менән Уралды аша сығалар һәм бөрйән ырыуы башҡорттарының өс ауылы (Оло һәм Кесе Кәбәс, Ҡолғона) халҡы йәшәгән Ялтыран исемле ҙур йәйләүгә килеп сығалар. Был уларҙың яҙғы йәйләүе була.**

Телгә алынған "Бөрйән башҡорттары араһында" исемле фәнни хеҙмәтендә Әхмәтзәки Вәлиди: "Бөрйәндәр был көндә Орск өйәҙендә дүрт улыста йәшәй. Был үҫәргән башҡорттарынан ҡала иң күп ғәҙәтле ырыу (һанлы ырыу). Этнограф Павел Небольсин үҙенең "Ырымбур һәм Әстерхан тарафына сәйәхәтемдең хисабы" тигән әҫәрендә (Вестник Императорского Русского географического общества за 1852 г. часть 4) "...башҡорт халҡының сәсәге үҫәргән, түңгәүер, бөрйән халыҡтарылыр. Былар араһында иң сафы бөрйәндәрҙер" тип яҙған", - тигән.

Әхмәтзәки Вәлиди был сәфәргә халыҡтан боронғо яҙыу, йыр, хикәйәләр йыйыу өсөн махсус сыҡмаһа ла, туҡтап торған ерҙәрендә ҡурай уйнаусылар менән ҡыҙыҡһынып, һораша йөрөй. Ялтыран йәйләүендә Зыяитдин һәм Хәйрулла исемле ҡурайсы егеттәрҙе үҙҙәре янына саҡыралар. Ләкин улар ауыл араһында ҡурай уйнарға уңайһыҙлана. Шуға күрә, кис еткәс, ҡырға сығып, боронғо көйҙәр уйнап ишеттерәләр. Әхмәтзәки Вәлиди боронғо башҡорттоң көйҙәре лә, йырҙарҙары ла онотола барыуына, улар урынын татар таҡмаҡтары, рус частушкалары ала барыуына көйөнөп, әгәр нота дәфтәренә кереп ҡалмаһа, боронғо көйҙәребеҙҙең юғалыуына ла күп ҡалмаясаҡ, тип билдәләгән.

Улар эргәһенә саҡырылған йәш егеттәр боронғо көй-йырҙарҙы аҙ белгәндәр. Шулай ҙа "Юлтый", "Ҡаҙаҡ", "Ишмырҙа", "Ашҡаҙар", "Циолковский", "Карабаев", "Йософ майор" көйҙәрен уйнап ишеттергәндәр һәм "Перовский", "Сыҡ муйыл", "Заһира" көйҙәренә бейеп күрһәткәндәр. Иртәгәһенә икенсе ауылда, тағы ла шулай усаҡ яҡтыһында, Бәхтиәр исемле бер егеттең "Айыу майор", "Калмантай" тигән көйҙәрҙе ҡурайҙа уйнағанын, уға икенсе бер тенор тауышлы егеттең ҡушылып йырлағанын тыңлауҙары тураһында бәйән итә Әхмәтзәки Вәлидов. Шунда уҡ бер бөрйән егете уларға Теләс һәм Күсей ауылдарында "Мораҙым" тигән көйҙө уйнаған ҡурайсы барлығын хәбәр иткән. Әммә көндәр боҙолоп китеп, оҙайлы ямғырҙар башланыуы ул ерҙәргә барыуҙы тотҡарлаған. "Мораҙым" йырын, көйөн башҡорт ауыҙынан, ҡурайҙан ишетеп, яҙып алғанда, ул Хоҙай тарафынан бирелгән донъя баһалы бер нигмәт булыр ине", - тип, Ә. Вәлиди үҙенең сикһеҙ үкенесен белдерә аҙаҡ. Бәхтиһән, Әхмәтзәки Вәлидиҙә тәрән ҡыҙыҡһыныу уятҡан был йыр төньяҡ һәм урта төрөктәрҙә биш йөҙ йылдар йәшәп килгән икән. Шуға ла ул, был йыр онотолоп, юғалһа, ҙур бәхетһеҙлек булыр, тип борсола. Ә йырҙың йөкмәткеһе Алтын Урҙа ханы Туҡтамыштың вәзире Иҙеүкәй һәм уның улы араһындағы хәтәр һәм сәйер хәл-вәҡиғаларҙы сағылдырған була.

Артабан автор рус ғалимдарының бөрйәндәрҙең, бигерәк тә урман бөрйәндәренең шөғөлөн, әхлағын, тәбиғәтен, рухын, музыкаһын, фольклорын өйрәнергә, тарихи йәдкәрҙәрен йыйырға өлгөрмәгәнлегенә үкенес белдерә. Башҡорттарҙың иң сафы булған бөрйәндәр тураһында яҙылған баҫма материал юҡлығына борсола. Шул уҡ ваҡытта Себерҙең әллә ниндәй соҡорҙарындағы һаны яғынан ике мең дән дә үтмәгән таифәләрҙе (ҡәбиләләрҙе) өйрәнеүгә байтаҡ аҡса сарыф ителеүен билдәләй. "...бөрйәндәр - башҡорттарҙың саф булғандары - үҙлектәрен тамам юғалтып баралар. Инде Европа кешеләренең, урыҫтарҙың эсе бошмай икән, беҙ ҙә быға шулай һалҡын ҡан менән ҡарап торорбоҙмы?" тигән һорау ҡуя һәм бөрйән башҡорттарынан әле юғалып бөтмәгән йыр, ауыҙ-тел ижадының барса боронғо ҡалдыҡтарын өйрәнеүгә, яҙып ҡалдырырға һәләтле кешеләребеҙ табылһа ине, тигән фекерен әйтә.

Артабан Әхмәтзәки Вәлидов бөрйәндәрҙең ниндәй халыҡ, әле йәшәгән ергә ҡайҙан килеүе тураһында фекер йөрөтә һәм ғалимдарҙың башҡорттар, шул иҫәптән бөрйәндәр, тураһында ла аныҡ ҡына фекер әйтмәүен, был хаҡта төрлөсә аңлауҙар булыуын билдәләй: "...Һаҙи Атласов башҡорттарҙы саф төрөктәргә, Н.Ф. Катанов, Н.А. Аристов уларҙы төрөкләшкән финдарға индергән. Ә Морат Рәмзи, ғәрәп ғалимдарының V быуаттан башлап яҙған мәғлүмәттәрен йыйып, бөрйәндәрҙе Хива ханлығы эргәһендә торған башҡорттарҙың бер ҡәбиләһе һәм Ғосман Хәлифәте осоронда улар ҡайһы бер һуғыштарҙа ҡатнашҡан, тип күрһәтә. Һуңыраҡ башҡорттар Иртыш йылғаһы һәм Арал күле араһында бәшәнәктәр һәм ҡилмәктәр ҡыҫымы аҫтында хәҙерге йәшәгән урындарына күскән булһа кәрәк, тигән фекер әйтә".

Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң башҡорттар XVII-XVIII быуаттарҙа бер нисә тапҡыр ихтилалға күтәрелә һәм унда бөрйәндәр иң алдынғы урында була, ти ғалим Әхмәтзәки Вәлиди. Уның әйтеүенсә, бөрйән халҡы Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең тыуыуынан (570 йыл) элгәре үк тарих битенә кереп ҡалған. Ғалим башҡорттарҙы дүрт төркөмгә бүлгән. Беренсеһенә тау башҡорттарын - бөрйән, үҫәргән, тамъян ырыуҙарын - индергән. Ғөмүмән, Әхмәтзәки тормошонда һәм эшмәкәрлегендә бөрйән ырыуы ере, халҡы ярайһы ғына мөһим урын биләгән. Был турала ул үҙенең "Хәтирәләр"ендә лә бер нисә урында яҙып үткән.

Ғаиләһенең төрлө тарафтарҙағы күренекле шәхестәр менән мәҙәни бәйләнештәре тураһында яҙған саҡта ул 14 йәшенән Уралтауҙы аша сығып, уның көнсығышындағы Муллаҡай ауылында йәшәүсе мулла Ғабдулла Сәйетовҡа (Сәйетбатталовҡа) йыл һайын атаһы менән килеп осрашып йөрөүҙәрен, атаһының фекерҙәре сикләнгән, мәҙәниәтһеҙ дини фанатиктарға яҡынланмауын бәйән иткән. Бик күп муллалар араһынан иң ғилемлеләр - Троицкиҙан Зәйнулла ишан һәм Муллаҡайҙан Ғабдулла мулла, тип күрһәтә ул.

"Хәтирәләр"ендә Әхмәтзәки Вәлиди бөрйән ырыуының күренекле шәхестәренән Рәсәй Дәүләт Думаһы ағзаһы Шаһишәриф Мәтинов менән бер фәһемле осрашыуынан ҡалған тәьҫораттары менән уртаҡлаша. Әхмәтзәкиҙең атаһы Әхмәтшаһ хәҙрәт Шаһишәриф Мәтинов менән электән дә дуҫтарса мөнәсәбәттә булып, даими аралашып йәшәгән. Был килеүе Әхмәтзәкиҙең Үтәк мәҙрәсәһенән ҡайтҡан ваҡытына тура килә һәм оло шәхес Ш. Мәтинов йәш егет менән атаһы эргәһендә һөйләшә. Ул Әхмәтзәкигә рус телен ныҡлап өйрәнеүен дауам итергә, Рәсәй университеттарының береһендә уҡып, төплө белем алырға кәңәш бирә, ике китап бүләк итә. Рус телен камил, юғары кимәлдә белгән дәүләт эшмәкәре был ғалимдарҙың әҫәрҙәре ярҙамында фекерләү көсөн, тел ҡеүәһен үҫтереп, йәш Әхмәтзәкиҙе сәйәсәт өлкәһенә, йә булмаһа ғилем юлына ылыҡтырырға теләгәндер.

Быға тиклем Әхмәтзәкиҙе өйләндереп, ауыл мәсетенә имам итеп ҡалдырыу уйы менән йөрөгән атаһы һәм ағалары Ш. Мәтинов менән булған был һөйләшеүҙән һуң тәүге фекерҙәренән кире ҡайтырға мәжбүр була. Был һөйләшеү Әхмәтзәки яҙмышының бер мөһим боролошо ул.

Шул уҡ "Хәтирәләр"ҙә Әхмәтзәки Вәлиди әле йәш үҫмер сағында атаһы менән Троицкиға бер сәфәрендә Ирәндек тауҙарының көнсығыш итәгендәге Солтан алтын приискыһында булып китеүен хәтергә алған. Приискының шул ваҡыттағы хужалары ағалы-энеле Рәмиевтар булған. Юл ыңғайы шағир Закир Рәмиевҡа һуғылып, танышып үтеүҙәрен, ә һуңынан күптәнге таныштар булараҡ, Ырымбурҙа һәм башҡа ерҙәрҙә осрашып, фекер алышып йөрөүҙәрен телгә ала Әхмәтзәки Вәлидов. Бигерәк тә 1908 йылда "Шура" журналы сыға башлағас, Закир Рәмиев журналдың бағыусыһы, ә Әхмәтзәки Вәлиди авторҙарҙың береһе булараҡ, Ырымбурҙа йыш осрашалар.

Сираттағы бер осрашыу мәлендә Әхмәтзәки үҙенең Ҡазанға барып, инородецтар мәктәбе (Рәсәйҙәге рус булмаған халыҡтарҙы шулай атағандар) өсөн рус теле уҡытыусылары әҙерләүсе уҡыу йортона инергә ниәтләнеүен белдерә. Тик үҙенең матди хәле мөшкөл икәнен әйтмәй. Шағир уға сәфәргә сығырҙан алда Ырымбурҙа баҫылып ятҡан "Ваҡыт" гәзите мөхәррире Ярулла Вәлиевты мотлаҡ барып күреп китергә тәҡдим итә. Бәхтиһән, был тәҡдим бушҡа ғына әйтелмәгән. Барып күрешеү менән мөхәррир Закир әфәнде исеменән 50 һум аҡса тоттора. Заманы өсөн был аҡса 4-5 баш йылҡы малы бәйәһен тәшкил иткән була. Бына шулай, Октябрь революцияһынан алда һәм унан һуң да башҡорт милли хәрәкәтенең ойоштороусыһы һәм рухи етәксеһе булараҡ, Әхмәтзәки Вәлидиҙең бөрйән ырыуынан яҡын фекерҙәш һәм арҡаҙаштары күп була.

**Әмир СӘЙҒӘФӘРОВ.**

ШАҢДАУ



# АСЫЛЫБЫҘ АРЪЯҒЫНДА...

## рух күтәрелеше булыр

**"Бер кәлимә фекер" рубрикаһында Әхмәр Үтәбайҙың "Асылға тиклем сигендек" (46-сы һан) мәҡәләһен уҡып, уйланмаған, күңеле кителмәгән кеше ҡалмағандыр, тием. "Асылыбыҙҙың аръяғында нимә бар?" тигән һорау менән тамамлай автор фекерен. Тәүҙә был һорауға яуап булып башымды "Юҡҡа сығыу" тигән уй телеп үтте лә, ҡурҡып киттем, ә һуңынан: "Юҡ, "феникс ҡош" кеүек күмергә ҡалғансы янып, яңынан тыуыуҙыр", - тигәнгә үҙгәрттем ул яуапты.**

Башҡортҡа Хоҙай юҡҡа ғына Ҡурай тип аталған серле көпшәне бирмәгәндер бит. Аһ-зарын күңеленән ҡыуып сығарып, ғорурлығын ҡайтарһын, тигәндер. Үҙенең кем икәнлеген онотмаһын, юҡҡа сыҡҡансы теҙләнмәһен, тигән ишараһы ла барҙыр Ҡурайҙы биргән Хоҙайҙың.

Ниңәләр бер атай кешенең һүҙҙәре күңелемә һеңеп ҡалған, онотолмай: "Кескәй генә 5 айлыҡ ҡыҙымды ҡулыма алғайным, ул минә саф аҡыл менән төбәлде. Минә ул мин белмәгән серҙәрҙе лә беләләр һымаҡ тойолдо". Эйе, аңлы бала булып тыуабыҙ ҙа, үҫә килә аңыбыҙ томаланып бөтөп, асылыбыҙҙы юғалтабыҙ... Һиҙгерлекте юғалтып, елдең, йәғни яуызлыҡтың, зыяндың ҡайһы яҡтан килгәнен дә һиҙмәйбеҙ. Халыҡ алдында бер төрлө телмәр тотоп, икенсе төрлө эштәр эшләнгәнен дә аңламай ҡалабыҙ. Бына шулай оло быуын таланып, ҡаушап ҡалды...

Бер-ике быуын үткәс, рух күтәрелеше булыр, ти ғалимдар. Ышанам, сөнки ирек, ғәҙеллек тигән төшөнсәләр әҙәмдең ҡанында һаҡлана, бер ҡасан да юйылмай бит.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

**Быйыл башҡорт халҡының бөйөк эпосы "Урал батыр"ҙы ҡағыҙға төшөрөүгә 100 йыл тула. Республикала был тарихи ҡомартҡыны популярлаштырыу буйынса ҡайны бер эштәр эшләнә эшләнеүгә. Эпос башҡорт, рус, инглиз, төрөк, француз һәм башҡа телдәргә тәржемә ителгән. Мәктәп уҡыусылары араһында йыл һайын ошо әҫәрҙе яттан һөйләү буйынса республика конкурсы уҙғарыла. Әммә барыбер ҙә "Урал батыр" эпосын яҙып алып, халҡыбыҙға еткергән арҙаҡлы шәхесебеҙ Мөхәмәтша Буранғоловтың һәм эпосты башҡорттоң боронғо тарихы булараҡ фәнни нигеҙләүгә өлгәшкән тарихсы, филолог Салауат Ғәлләмовтың фиҙаҡәрлек өлгәһөн бер ни менән дә тиңләрлек түгел. Уҙған быуаттың 90-сы йылдары уртаһында Салауат Ғәлләмов "Урал батыр"ға - 4 мең йыл", тип, бөтөн йәмәғәтселекте ҡуҙғытҡайны. Күптәр быны уйҙырма тип ҡабул итте, бәгзеләр бөтөнләй ҡабул итергә теләмәне. Уҙған йылдар иһә Салауат Абдрахман улының хаҡлы булыуын күрһәтте, уның әйткәндәрен хәҙер күп ғалимдар таный һәм ҡабатлай. Һүҙ - Салауат ҒӘЛЛӘМОВҡа.**




## МИФОЛОГИЯ

### Мифологияға тәүге аҙым

Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында уҡығанда Алексей Федорович Лосевтың "Диалектика мифа" тигән китабы ҡулыма килеп эләкте. Ғалим революцияға тиклемге фәйләсүфтәр Бердяев, Булгаков, Флоренскийҙар менән аралашҡан һәм семинарҙар үткәргән. Әммә 1930 йылдарҙа уның, беҙ коммунистик мифология менән йәшәйбеҙ, тигән фекеренә Максим Горький, коммунизм мифология түгел, ул - фән, тип ҡаршы сыға. Һунынан был һөйләшеү Кагановичҡа барып етә һәм Лосевты бер нисә йылға төрмәгә ултырталар. Мәскәүгә ул Сталин вафат булғас ҡына ҡайтып, Н. Крупская исемендәге педагогия институтында грек телен, эстетиканы уҡыта. Революцияға тиклем бер йыл Германияла стажировкала була. Ул бик күп телдәрҙе, шул иҫәптән немец, боронғо грек һәм латин телдәрен барлыҡ диалекттары менән белгән иң беренсе ғалим, рус тел ғилеме буйынса профессор була. Аҡылға ял бирер өсөн ул шул телдәрҙән тәржемә менән шөғөлләнә. Ошо вузда уҡытҡанда мифология буйынса китап сығара. Мифологияны фольклорсы булараҡ түгел, ә фәлсәфәүи яҡтан өйрәнгән берҙән-бер ғалим ул.

Алексей Лосевтың китабын уҡығас, беҙҙең милләттә лә миф - "Урал батыр" эпосы бар икән, ул беҙҙең боронғолоҡто күрһәтә, раҫлай ала, тип уйланым. Университетта уҡыған йылдарымда барлыҡ фәнни тикшеренеүҙәремде мифология темаһына арнаным. Мәсьәләнең тамырына баҡһаң, беҙҙә мифология мәктәбе бөтөнләй булмаған. Коммунизм заманында уны әкиәт тип һанағандар. Ә боронғо таш быуатта ул идеология булып йөрөгән. Халыҡ ысынлап та унда яҙылғандарға ышанған, буйһонған, ундағы йолаларҙы үтәгән. Сөнки мифология - ул фән, уның үҙ ҡанундары бар. Математиканы, геометрияны теоремалар аша өйрәнгән кеүек, бында ла үҙенең постулаттары бар. Уларҙы Лосевтың китаптары матур итеп аңлатып бирҙе. Шунда аптырағайным: шул тиклем ҙур белгес була тороп, ни өсөн ул мифологияны өйрәнә? Һәм нинә грек мифологияһын өйрәнә, ә рус мифологияһын түгел. Тикшерә башлағас, шуны асыҡланым: баҡтиһәң, рустарҙа, шулай уҡ ҡайны бер башҡа милләттәрҙә, мифология бөтөнләй юҡ. Сәбәбе ябай - ҡайны бер милләттәр һуңыраҡ барлыҡҡа килгән, ә мифология боронғолоҡто иҫбатлай, милләттең килеп сығыуының күрһәткесе ул. Әгәр халыҡтың мифологияһы бар икән, тимәк, был милләт таш быуатта уҡ йәшәгән, уның тамырҙары шул осорға барып тоташа.

### Эпосҡа тотонор алдынан тел өйрәндем...

Тарихсы булараҡ, мифологияны өйрәнеү ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы.Быға тиклем был эшкә тотонған, уны ентекле өйрәнгән ғалим булмағанлыҡтан, минә шундай киңлек, иркенлек асылды. Сикләүҙәр юҡ. Юҡһа, совет заманында, коммунизм осоронда, "Ленин былай тигән", "Брежнев тегеләй тигән", тип, халыҡтың башын ҡатырҙылар, сик ҡуйҙылар. Ленин дәфтәре астырып, унда юлбашсының хеҙмәттәрен конспектлау кемгә кәрәк булғандыр, һаман да аңламайым. Ә мифологияны өйрәнеүгә теләп, ҡыуанып, дәртләнеп тотондом. Әммә телдәрҙе белмәй тороп, ғилми эшкә тотоноу файҙаһыҙ икәнен дә аңлай инем.

Тап шул саҡта Уралда ғалим-археолог Геннадий Зданович Арҡайым ҡаласығын тапты. Уның асышы аша Уралда боронғо ваҡытта һинд-герман ҡәбиләләре йәшәгәнлеген белеп, үҙемдең дөрөҫ юлдан барыуыма тағы бер инандым. Сөнки быға тиклем ғалимдарҙың, башҡорттар Алтайҙан килгән төрки халыҡ, тип раҫлауы төрлө асыштарға һәм тикшеренеүҙәргә аяҡ салған, ғилми тикшеренеүҙәрҙе тотҡарлаған бер кәртә һымаҡ ине. Г.Б. Здановичтың асышы минә ана шул шиктәрҙе таратыуға ҙур этәргес булды.

Сөнки эҙләнеүҙәремдең нигеҙе барлығын аңланым. Шунда "Урал батыр" эпосын ниндәй миф менән сағыштырып өйрәнергә, тигән һорау алдына баҫтым. Совет заманында грек, латин мифологияһы буйынса әҙәби уҡыуҙар үткәрҙеләр ул. Әммә Һиндостан, Мысыр, Месопотамия мифологиялары хаҡында бер кем бер нәмә белмәне. "Библиотека Всемирной литературы" баҫмаһының "Урал батыр" эпосы ингән томының инеш һүҙендә Петросян тигән әҙәбиәт белгесе: "Урал батыр" эпосы шумер эпосы менән тап килә", - тип әйтә. Ә ул ваҡытта шумерҙарҙың кем икәнен дә белмәй инем. Бөгөнгө көндә ундай халыҡ юҡ. Уларҙың телен белмәйенсә, сағыштырып та булмай, шуға курд телен дә өйрәнергә тура килде. Сөнки эшендең ғилми нигеҙе булырға тейеш. Теоретик хеҙмәттәр эҙләнеүсе ғалим өсөн һуҡыр бер тин дә тормай. Яҙмаларҙың баһаһын уның нигеҙе, төп нөсхәһе тәшкил итә. Минең эҙләнеүҙәремә бер кем дә бәйләнә алмай, сөнки мин хеҙмәттәрҙе төп нөсхәһендә, шул хеҙмәт яҙылған телдә - ҡайныһын латин телендә, ҡайныһын грек телендә, ҡайныһын курд телендә һәм башҡорт телендә өйрәндем.



### Ямғыр ярҙамы

1990 йылда мин Англияға киттем. Июлдең бер көнөндә Лондон уртаһында ҡапыл ямғыр яуа башланы. Мин ямғырҙан ҡасып, бер бинаға йүгереп индем. Ә ул Тотенхем Хай Роуд урамындағы "Букинист" магазины булған икән. Магазинда тик боронғо китаптар кәштәләрен күрҙем. Шунда нисектер ҡулыма Е. А. Шпейзер тигән шумерологтың тәржемәһендә "Гилгәмеш" китабы килеп эләкте. Ул бик бәләкәй китап, ямғыр туҡтағансы уҡып та бөттөм. "Урал батыр" эпосын мәктәп эскәмйәһенән үк яҡшы белгәс, фатирға ҡайтҡас, ошо ике эпосты хәтеремдә сағыштырып сыҡтым. Икенсе көнөнә китапты һатып алып, ҡабат уҡыным. Һәм төп һорауға яуап таптым: Месопотамияла ирандар йәшәгән. Үҙем Баймаҡ районынан, Ирәндек буйҙарынан булғас, Ирәндек менән Иран атамалары бигерәк тә ҡыҙыҡһындырҙы. Уларҙың ҡайныһы алданыраҡ барлыҡҡа килгән? Санскрит Иран-дек тигән һүҙҙе "ирандар ере" тип аңлата. Тикшеренеүҙәрем шундай һығымтаға килтерҙе: иран телле халыҡ тегендә лә, бында ла йәшәгән. Шунан Англиялағы китапханала мифология буйынса бөтөн китаптарҙы ҡарап сыҡтым. Күпмелер ваҡыттан һуң өйрәнгәндәремде анализларға, ҡағыҙға төшөрөргә ҡабат Өфөгә ҡайттым. Бер йыл үткәс, Францияға киттем. Унда Париж курд институты бар. Уны милләте буйынса курд булған балетмейстер Морис Бежар тота ине. Ике йыл шунда тел өйрәндем. Телдәр өйрәнә торғас, шундай һорау тыуҙы: шумерҙар милләте буйынса кем булған? Бында ғалимдарҙың фекере айырыла.

## Тағы ла "Урал батыр"

Әммә беҙҙең ҡулда һаҡланып ҡалған бик күп шумер-балсыҡ яҙмалар бар. Уларҙың лексика, грамматикаһы ентекле өйрәнелгән. Шумерҙарҙың лексикаһы башҡорттоҡо менән ауаздаш. Ә бөйөк шумеролог, американлы Симха Ной Крамер (Самуэль Крамер) шумерҙарҙың ата-бабалары иран булған, ти. Г. Зданович Уралда иран телле халыҡ ҡәбиләләре эҙҙәрен тапҡан икән, тимәк, башҡорт эпосы шумер мифологияһы менән бер нигеҙҙән булып сыға.

### "Урал батыр"ға нисә йәш?

"Урал батыр" эпосында төп геройҙарҙың береһе Шүлгән - Уралдың ҡустыһы. Уның дусы - Зәрҡум. Әгәр ҙә беҙ шумер һүҙҙәрен башҡорт эпосының һүҙҙәре менән сағыштырһаҡ, шундай асыштар яһар инек: ысын шумерҙа ысынлап та был ике шәхес йәшәгән. Беҙҙең эраға тиклем 2112 - 2094 йылдарҙа шумерҙа Ур-Намму батшаның улы Шүлгә исемле була, Шүлгәнең улы Бурсин, уларҙың ҡоло - Зәриҡум. Шулай итеп, мин донъя тарихында, донъя фәнендә беренсе тапҡыр "Урал батыр" эпосының барлыҡҡа килеү ваҡытын асыҡланым. Эпос исемдәрҙән һуңыраҡ тыуа алмай, ул исемдәр менән бергә тыуа. Мәҫәлән, Ленин тураһында 1917 йылда телгә алына икән, тимәк, ул шул йылдарҙа йәшәгән. Эпоста телгә алынған реаль кешеләр - Шүлгә, Зәриҡум -

*Шунда аптырағайным: шул тиклем ҙур белгес була тороп, ни өсөн ул мифологияны өйрәнә? Һәм ниңә грек мифологияһын өйрәнә, ә рус мифологияһын түгел. Тикшерә башлағас, шуны асыҡланым: баҡтиһәң, рустарҙа, шулай уҡ ҡайны бер башҡа милләттәрҙә, мифология бөтөнләй юҡ. Сәбәбе ябай - ҡайны бер милләттәр һуңыраҡ барлыҡҡа килгән, ә мифология боронғолоҡто иҫбатлай, милләттең килеп сығыуының күрһәткесе ул. Әгәр халыҡтың мифологияһы бар икән, тимәк, был милләт таш быуатта уҡ йәшәгән, уның тамырҙары шул осорға барып тоташа.*

✓ ***Шулай уҡ эпостағы тәбиғәт күренештәре һүрәтләнеше лә боронғо ата-бабаларыбыҙҙың ниндәй кимәлдәге ғалим-математик һәм астроном булыуына һоҡланырға мәжбүр итә.***






биргән. Болан мөгөҙө башҡорттарҙың туранан-тура варисы булып торған иран телле дахо-мәсәғүттәрҙә ҡояш нурҙарын һүрәтләгән. Дахо-мәсәғүттәрҙе аландар алмаштырған. Тимәк, скифтар, савроматтар, сарматтар, дахо-мәсәғүттәр, аландарҙың башҡорт булыуын уларҙың "Урал батыр" эпосын белеүе лә раҫлай. Сөнки йыландың боланды йотҡанын сағылдырған скиф колчанындағы алтын пластина (беҙҙең эраға тиклем 5-се быуат) һәм 1986-1988 йылдарҙа тарихи Башҡортостан территорияһындағы Сармат ҡурғанынан археолог А. Пшеничнюк тапҡан алтын мөгөҙлө аттар һәм боландар башҡа ерҙә табылмаған да, юҡ та.

Шулай уҡ эпостағы тәбиғәт күренештәре һүрәтләнеше лә боронғо ата-бабаларыбыҙҙың ниндәй кимәлдәге ғалим-математик һәм астроном булыуына һоҡланырға мәжбүр итә. Улар үҙҙәренең күп йылдар дауам иткән күк есемдәрен күҙәтеүҙәрен иҫәпләүҙәргә һала. Мәҫәлән, ай тотолоу. Мифта Ай - Айһылыуҙы йыландың әсирлеккә алыуы тураһында яҙыла. Хәҙерге астрономияла ай тотолған ваҡытты аждаһа айы (йондоҙлоғо түгел) тиҙәр. Айҙың юлы ҡояш юлы менән киҫешкән нөктәләр Аждаһа төйөндәре тип атала, сөнки тап шул төйөндәр эргәһендә ай йәки ҡояш тотола. Төньяҡ йәки байып барыусы төйөндә астрономдар элек-электән Аждаһаның башы, ә тыуып килгәнен йәки көньяҡтағыһын уның ҡойроғо, ти. Был күренештең "Урал батыр" эпосы менән бәйләнеше асыҡ күренә, сөнки боронғо башҡорттар ҡояш йәки ай тотолоуҙы, уларҙы Аждаһа йотҡан, тип күҙаллай.

Эпостағы икенсе мөһим мәл - Уралдың суҡмары (таяғы) - боронғо гномон фетишы - астрономик ҡорал - тигеҙ ерҙә көн оҙоно уның төшкән күләгәһен күҙәтеп, Ҡояштың бейеклеген һәм азимутын, көн үҙәген һәм башҡа астрономик мәлдәрҙе асыҡлау мөмкин булған бағана. Бөгөн һабантуйҙарҙа йәштәр Уралдың үткән юлын төрлө ярыштарҙа сағылдыра. Үҙенәнүҙе дәлил тыуа: һабантуй - төп башҡорт байрамы, сөнки мифтарһыҙ боронғо байрамдар ҙа юҡ. Йәки бына башҡорттарҙың Ҡарға буҡтаһы йәки Ҡарғатуй байрамын алайыҡ. Эпоста Ҡатил батшаның үлеме хәбәрен ҡарға килтерә. Бөгөн дә башҡорттар ҡарға буҡтаһын байрам итеп ойоштора, ҡарғаларҙы бутҡа менән һыйлай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Урал батыр" эпосы логика, математика, астрономия кеүек һинд-герман фәненең нигеҙе булып тора. Беҙ ошо эпосҡа нигеҙләнеп, күп донъяуи күренештәрҙе, фәндәрҙе аңлата алабыҙ. Шулай уҡ боронғо башҡорттар бер нәмә лә мәңгелек түгел икәнлеген, ҡасан да булһа барыһы ла баҡыйлыҡҡа күсә икәнлеген аңлаған. Тимәк, миф миф ҡына булыуҙан туҡтап, фәнни доктринаға әүерелә. Хәҙер "Урал батыр" эпосына иғтибар бермә-бер артты. Әммә ундағы логика, математика, астрономия кеүек ғәмәли яҡтарҙы ла күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Быны иң тәүҙә уҡытыусыларға аңлатырға, параллель рәүештә аңлатыуҙы рус телендә лә әүҙемләштерергә кәрәк. Бәлки, берәй заман мәктәптәрҙә логика, математика, астрономияны "Урал батыр" эпосы буйынса өйрәнә башларбыҙ...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**яҙып алды.**

# БОРОНҒОЛОҠТО РАҪЛАЙ

## эпосы тураһында

ысынлап та беҙҙең эраға тиклем ике мең йыл элек йәшәгән икән, тимәк, "Урал батыр"ға 4000 йыл тип ышаныслы әйтергә була. Был - тарихи ҡараш.

Мифологияның ғәмәли яғы ла бар. Ул халыҡтың ихтыяжына хеҙмәт итеү өсөн тыуа. Идеология һымаҡ. Ғәмәли яҡтан барлыҡ боронғо мифтар космогоник тәртипте һаҡлай. Нимә ул космогоник тәртип? Ул календарь менән тап килеү. Шумерологияға нигеҙ һалыусы, инглиз ғалимы сэр Генри Роулинсон XIX быуат һуңында, "Гилгәмеш" - ул календарь, тип юҡҡа әйтмәгән. "Урал батыр" һәм шумер мифологияһында бөтә йолалар календарь ваҡыты менән тап килә. Боронғо кешеләр мифологияны ғәмәли яҡтан ҡулланған икән, беҙ ҙә уны ҡуллана алабыҙмы? Әлбиттә, ҡуллана алабыҙ. Һиндостан, Греция астрономияһын алып ҡараһаҡ, уларҙың бөтә йондоҙлоҡтарға исем биргәнен күрәбеҙ. Андромеда, Үгеҙ, Пегас һәм башҡалар. Ирекһеҙҙән шундай һорау тыуа: ни өсөн ат булмаған утрауҙа, кәзәләр генә булған ерҙә йәшәгән гректар Пегас йондоҙлоғона исем биргән? Сөнки грек мифының нигеҙендә "Урал батыр" эпосы ята, йәғни грек мифы - ул башҡорт эпосы. Ат ғүмер буйы башҡорттоң айырылғыһыҙ юлдашы була. Хатта Шүлгәнташ мәмерйәһендә лә ҡырағай ат һүрәте төшөрөлгән. Археологик ҡаҙыныуҙар ҙа ат беҙҙә электән йәшәүен раҫлай. Эпоста ла Аҡбуҙат образы бар.

Боронғоларҙың мифологияны ғәмәли яҡтан ҡулланғанынан сығып, "Урал батыр"ҙы календарға яраҡлаштырып тикшерә башланым. Миңә тиклем быны берәү ҙә эшләмәгән. Эпос Йәнбикә менән Йәнбирҙенең ғаиләһе хаҡында һөйләү менән башлана. Йәнбикә менән Йәбирҙе игеҙәк йәндәр булған. Боронғо календарҙа Игеҙәктәр йондоҙлоғо бар - Йәнбикә менән Йәнбирҙе шул йондоҙлоҡто аса ла инде. Шуны аңлағас, ысынлап та эпосты календарға яраҡлаштырып тикшерергә кәрәк, тигән фекергә килдем һәм эшемде дауам иттем. Әммә ни өсөн "Урал батыр" эпосында календарь Игеҙәктәр йондоҙлоғо менән башлана? Был һинд-иран халыҡтарының Яңы йылды - Науруз байрамын яҙғыһын байрам итеүе менән аңлатыла.

Таблица итеп эшләһәк, боронғо башҡорт календары шулай күҙ алдына баҫасаҡ **(Таблицаны ҡарағыҙ).**

Шумер эпосын уҡығанда болан образы ла иғтибарҙы йәлеп итә. Зәрҡум боланды йота алмай интегә. Йотор ине, мөгөҙҙәре ҡамасаулай. Болан бик ҙур территорияла йәшәүсе иран телле скифтарҙа һәм сарматтарҙа ҡояш символы булып тора. Күсмә тормош алып барған скиф, савромат, сармат тигән иран ҡәбиләләре тарихта беҙҙең эраға тиклем 6-сы быуаттан 5-се быуатҡа тиклем билдәле һәм улар айырым башҡорт ырыуҙарына (Бөрйән, Тамъян) исем

**Боронғо башҡорт календары**

| Йондоҙлоҡ | Дата | Грек һәм башҡорт эпосындағы образдарҙың үткән юлы |
|---|---|---|
| Игеҙәктәр-Аҡҡош йондоҙлоғо | 22 май – 22 июнь | Диоскурҙар – бер туған Ашвиндар – Урал менән Шүлгән. Туғандар Һомайҙы тота. |
| Ҡыҫала – Арыҫлан йондоҙлоғо | 22 июнь – 22 август | Ике юл тураһында һөйләүсе ҡарт. Арыҫлан – Урал менеп йөрөгән хайуан. |
| Ҡыҙ йондоҙлоғо | 22 август – 22 сентябрь | Ер аҫты донъяһы батшаһы Ҡатилдың ҡыҙы. Деметра – үлеләр иленә төшөүсе Персефонаның әсәһе. Фемида – ер аҫты суды аллаһы. |
| Үлсәү – Буға йондоҙлоғо | 22 октябрь – 22 ноябрь | Урал һайлау алдында: үлеләр илендә ҡалырғамы, әллә үлем һәм ер аҫты донъяһы батшаһы Ҡатилды үлтерергәме? Урал Үгеҙҙе үлтерә – Буға йондоҙлоғо үтеп китә. |
| Йылан һәм йылан йөрөтөүсе – Буға йондоҙлоғо | 22 ноябрь – 22 декабрь | Шүлгән йыланды осрата һәм Зәрҡум менән бергә Ҡәһҡәһәгә – Аждаһаға юллана. Зәрҡум Праджапати боланын - Ушас (Рохини) боланын (Кәзәмөгөҙ) йота. Буға йондоҙлоғо рудранан (Сириус) Һунарсы йондоҙлоғонан ҡаса. Ушас – Таң аллаһы. Орионды Эос аллаһы ярата. |
| Бөркөт йондоҙлоғо, эргәһендә Бәләкәй ат | 22 декабрь – 22 ғинуар | Урал сукмарында (таяғында) оса. Урал һары күк атына эйә була. |
| Кит – "Авеста"ла Ворукаша балығы | 22 ғинуар – 22 февраль | Һомай Зәрҡумды диңгеҙ ҡараҫҡыһына әйләндерә һәм һыуға ташлай. |
| Пегас йондоҙлоғо | 22 февраль – 22 март | Урал аҡ төҫтәге Аҡбуҙға эйә була (санкр. Буҙ – "аҡ бәҫ") |
| Балыҡ йондоҙлоғо | Март | Зәрҡум балыҡҡа әйләнә. |
| Андромеда йондоҙлоғо. Андромеданы Китка ҡорбан итеп килтерәләр, әммә уны Персей ҡотҡара | 22 март – 22 апрель | Зәрҡум – балыҡ Һомайҙы йота. Урал батыр, ҡанатлы Аҡбуҙаты менән килеп, Һомайҙы ҡотҡара. |
| Һыуғояр (Ганимед) йондоҙлоғо – олимпия аллаларына үлемһеҙлек нектарын ҡоя | Апрель – Майҙың беренсе декадаһы | Урал ергә йәншишмәнең һыуын һибә. |
| Буға (Гава Мард) йондоҙлоғо – тәүбаба-үгеҙ ("Авеста"), Кносста ер аҫты батшалығындағы Минотавр (гректарҙа – Дьяус-Зевс) | Май | Үлеләр иленең батшаһы Ҡатилдың һарайын тотоп тороусы үгеҙ. |

✓ ***Моратшаның һүҙҙәре өҫкә сыҡты: урыҫтар бер ҙә генә кире ҡайтырға ашыҡмай бит. Яндырылған нығытмалары йәнәшәһенә икенсеһен төҙөп ҡуйҙылар.***




Ишҡар бей бер ҡасан да күрше-тирә менән тынсып йәшәй алманы. Аллаға шөкөр, донъяһы иркен, малтыуарының иҫәбе-хисабына сыға алғаны юҡ. Ул биләгән ерҙәр ҡырғыҙ-ҡайсаҡҡа яҡын ята. Ҡаҙаҡ мал ярата. Күрше ырыу бейе Моратшаның ата-бабалары рәхәт көн иткән!.. Мыҙырап тыныс ҡына йәшәп тик ятҡандар. Ерҙәренең бер киҫәге лә баҫҡынсы халыҡтар менән сиктәш булмағас ни. Урталыҡта донъя!

Рәсәй яғынан килеп китеүселәр ҙә күренгеләй башлағас, тәүләрәк күңелгә шом һалғайнылар һалыуын. Ни генә тиһәң дә, урыҫтарҙың да теге ерҙе, был ерҙе баҫып алыуҙары, теге халыҡты, был халыҡты торған төйәктәренән хатта ки ҡыуып ебәреүҙәре тураһындағы хәбәрҙәр ҙә ишетелеп тора бит. Батша кешеләре, киреһенсә, ер-һыуҙы яҡшы белгән башҡорттар менән яҡынайырға тырышты, яулашып-даулашып йөрөгәндәре әллә ни ишетелмәй былай. Заманында бабаларҙың Аҡ бей батшаға баш һалыуының бер ыңғай яғылыр, моғайын.

Ә тәүлә-ә-ә... Эйе, бынан ун биш йыллап электер, бағауылдары унын биләмәһендә урыҫ һалдаттарының аяҡ баҫыуын хәбәр иткәндә... Ишҡар бей уларҙы бик һаҡ ҡаршыланы. Үҙенекеләргә хатта ул-был була ҡалһа, ҡоралланып торорға ҡушҡайны. Эйе, Моратшаға ла ярҙам һорап хәбәр ебәрергә әҙер ине ул мәлдә. Тик саҡырылмаған ҡунаҡтар бик йылы сәләмләне. Үҙен "Әләксәй" тип таныштырған тылмастары суҡынған татар булып сыҡты. Баҡтиһәң, батшаның тоғро хеҙмәтселәре башҡорт ерҙәренә бик яҡшы ниәт менән килгән икән. Ҡырғыҙ-ҡайсаҡ, ҡалмыҡ-ҡайнаҡ һөжүмдәренән һаҡлар өсөн үҙ нығытмаларын булдырмаҡсылар. Ер-һыу атамалары менән дә нығ ҡыҙыҡһындылар. Ни өсөн былай атала, ни өсөн тегеләй. Хужалары Пушкарев тигән әҙәм үҙе лә ҡәҙимге генә төркисә һупалаштыра, күптән төркиҙәр тарихын өйрәнә икән. Һуғыш ҡоралдары, тимер-томор, төрлө таш... Күберәк шулар тураһында һорашты. Ишҡар бей ҙә алйот түгел, бик яҡшы аңлап тора, тегеләргә ер аҫты мәғдәненән башҡа әллә ни кәрәкмәй. Пушкарев унын һөңгөһөн, ҡылысын шундай диҡҡәт менән тикшереп ҡарамаҫ ине. Әйҙә шул Моратша бей ерендә күберәк сыуалһындар, тип, һиҙҙермәй генә шул тарафҡа ишараланы, йәнәһе, бөтә ҡыҙыҡҡан нәмәләре унын биләмәһендә йәшеренгән. Атаһы мәрхүм әйткән мәҡәлде Ишҡар яҡшы хәтерләй: "Урыҫ менән дуҫ булһаң, ҡулыңда һәрпәгең булһын". Уларға үҙенең ярҙамы тейҙеме-юҡмы, бынынын Ишҡар тәғәйен генә әйтә алмай, ләкин урыҫтар оло отряд менән килеп, ҡабат борсоп йөрөмәне. Танышлыҡ өҙөлмәне, әлбиттә. Хатта бер мәл ҡаҙаҡ яубаҫарҙарын ҡыуып ебәрештеләр. Тегеләрҙең йәҙрәһе баҫҡынсыларҙың ҡотон алды, исмаһам! Бына шулай урыҫтарҙың файҙаһы ла тейеп ҡалды бит әле.

Моратша ла тыныслығын юйҙы. Унын ерендә ниндәйҙер ҡаҙыу-төҙөү эштәре башланғас, Ишҡарҙың күңеле күтәрелде. Бәлки, тегеләр оҙаҡҡа ла килмәгәндәрҙер. Нишләһен был тирәлә урыҫ? Күпме ирәүәнләһә лә, барыбер, бөтөн башҡорт еренә хужа булып бөтә аласағы юҡ! Замандың шул тиклем тиҙ үҙгәреүен әйтсәле! Эйе-эйе, һалдаттар килеп, нығытма һалына башлағас, һауалы Моратша уға үҙе килгәйне бит әле.

- Ишҡар бей, урыҫтың беҙҙең ерҙәргә күҙе төшкәндәй, төпләнергә, нығынырға уйҙары бар шикелле.

- Буш һүҙ һөйләйһең, Моратша бей. Урыҫҡа ни ҡалмаған бында? Былай-алаймы ватанын ташлап, нишләп ситкә күсенһендәр, ти? Ана, ҡаҙаҡты ғына ал! Ҡул-аяғы тик тормаған албаҫтылар, ә сасҡап кипкән далаһына сат йәбешеп яталар ҙа баһа!..

- Ишҡар бей, һис кенә лә алға ҡарап эш итә белмәнең. Эргә-тирәңә сиҡ ҡына булһа ла күҙ һал. Сит-яттар ереңде уйып ала башламаҫтар, тимә! Беҙгә берләшеп эш итер кәрәк.

-Әйтерең бармы, ошоға тиклем беҙ күреп тә белмәгән урыҫ тигәнебеҙ ҙә, ана, минең өйгә баш эйеп инә. Кем күбек, кем болғаҡ икәнен улар ҙа яҡшы аңлай. Үҙ бәләңде кешегә япһарма! Янғол ҡәйнешеңде генә алып ҡарайыҡ, торғаны бер башкиҫәр ҙә баһа. Ә теге халыҡҡа килгәндә, урыҫҡа, тием, ул ни, әҙерәк торор ҙа кире ҡайтып китер. Нимәһен юғалтҡан ул бында? Башҡорт ерендә өс бөртөк сит халайыҡ күренде тип, хәҙер яр һалайыҡмы, дау ҡуптарайыҡмы?

- Яңғылышаһың, Ишҡар бей. Улар бик ҡаты тора. Ҡәлғә һалалар. Һөйләшеүҙәр файҙа бирмәне. Түрәләренә хат яҙып ҡараныҡ. "Бөтәһе лә дөрөҫ, эште дауам итергә тейештәр", тигән яуап килде. Тағы барҙыҡ, ләкин бер нәмә лә килтереп сығара алманыҡ. Талаш ҡупты. Бер-ике егетебеҙҙе үлтереп ҡайтарҙылар. Бына ҡалай тора һәлдәр!

Бер ни тиклем ваҡыт үткәндән һуң Ишҡар бей Моратша егеттәренең теге нығытмаға һөжүм яһауҙарын, һалдаттарҙы ҡыйратыуын, ундағы халыҡтың ҡайһыларының үлтерелеүе, ҡайһыларының ҡыуып ебәрелеүе тураһында ишетте. Моратша был алышта ҡатнашмағандыр, бер ҡулы йәш сағында уҡ зәғифләнгәйне. Ә бына башкиҫәр Янғол ҡәйнешененең ҡотороуына шик юҡ. Хәйер, еҙнәһе лә тегеләргә һөсләтмәй ҡалмағандыр. Әүәл-әүәлдән "бүреләр араһы" тип бушҡа нарыҡламағандарҙыр, ҡан көһәүсе уҫал тоҡом.

Нығытма ҡыйратылғас, билгеле инде, батша ғәскәр ебәрҙе. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, батша ғәскәре былай уҡ яуыҙлыҡ ҡылыр тип уйламағайны Ишҡар бей. Әллә күпме халыҡты ҡырып һалғандар. Ҡайһыларын үҙҙәре менән алып киткәндәр. Янғолдоң да бисәһен үлтереп, ике улын үҙҙәре менән алып киткән, тинеләр. Ысын булһа, урыҫ түрәләренә аҫырауға бирәләр, суҡындыралар, имеш, тигән хәбәр ҙә килеп ишетелде. Аллам һаҡлаһын... Барыбер Янғол ғәйепле. Урыҫ ғәскәрен тар-мар итә, йәнәһе. Еңел аҡыл менән суҡмар күтәрәләр тиме ни? Уйлап эш итәләр уны алйот!.. Ана шул хәлдәрҙән һуң, тағы ла күберәк килеп тулдылар ғына.

Янғолдо тота алманылар. Ана шул хурлыҡлы еңелеүҙән һуң, полковник Пушкарев юҡҡа сыҡты. Батша хөкүмәтенең ышанысын аҡламаған өсөн кире саҡырып алғандар, дәрәжәһенән төшөргәндәр, тигән хәбәр килеп ишетелде. Шулай ҙа Янғолдо эҙләүҙән туҡтаманылар. Ләкин ул зымзыя юҡ булды. Моратшаның ҡеүәте бөттө, кешеләрен үлтереп, мал-тыуарын ҡыуып алып китеүселәр ҙә булды. Тораҡ Янғолдо үлтергәндәр икән, шуға тере ҡулһыҙ ҡалған, тип тә һөйләнеләр. Бәлки, шулайҙыр. Ә Моратша бөтә бәләне унан ғына күрә. Бер яҡтан, ныҡлап уйлап ҡараһаң, Моратшаның һүҙҙәре өҫкә сыҡты: урыҫтар бер ҙә генә кире ҡайтырға ашыҡмай бит. Яндырылған нығытмалары йәнәшәһенә икенсеһен төҙөп ҡуйҙылар. Ниндәйҙер килмешәк халыҡты килтереп ултырттылар. Ә бит тәүге урыҫты үҙ күҙҙәре менән күреүенә тиҫтә йылдан саҡ ҡына ашҡандыр. Улар нығына бында... Янғол һәм унын сәнжәрҙәре ҡыйратылғандан һуң да тормошо әллә ни яйланып китмәне. Бына тиҫтә йылдан ашыу көсөргәнешле тормош көтә Ишҡар. Үҙе лә юғалтыуҙар киserҙе. Өлкән улы ауға сыҡҡанда, ҡаянан ҡолап үлде. Бер нисә йылдан икенсе улы, ҡыш ылау менән ҡайтып килешләй, аҙашып, туңып үлде. Хәҙер бөтә ышанысы кинйә улы Хөсәйендә. Йыйған малы, донъяһы һәм даны улына ҡаласаҡ. Өйләндерергә кәрәк баланы.

Ырыуының, ер-һыуының бөтөнлөгө хәстәре менән яна Ишҡар бей. Именлек, тыныслыҡ күңел көрлөгө менән бәйле, башҡорттоң матур байрамдары-йыйындары шул маҡсатҡа хеҙмәт итә. Быйылғы йәйҙе лә көр күңел менән ҡаршыларға тырышты. Бейҙең ҡеүәте йыйын йыя һәм уға затлы ҡунаҡтарҙы саҡыра белеүҙә сағыла. Унын даны, эше алыҫтарға барып ишетелеп торһон. Хөсәйенде бер нисә иптәше менән данлы ҡурайсы, йырау Кейекбирҙегә саҡырыусы итеп ебәрергә булды.

* * *

Кейекбирҙе йырауҙы саҡырып ҡайтыу - Хөсәйен өсөн иң оло мәртәбә. Хөсәйен егеттәрен үҙенә генә билгеле булған һуҡмаҡҡа ҡайырҙы. Ҡараслан тип йөрөтөлгән тау армыттары күптән унын күңелен ҡыҙыҡлай. Әҙәм аяғы баҫмаған ҡарурман ул тирәлә, ҡарттар ҙа ул яҡҡа бик йөрөмәҫкә ҡуша. Берәүҙәр Ҡарасландың урман эйәһе насар, тиһә, икенселәр унда шайтандар оялаған, ти. Төрлөсә сурыталар. Ысынлап та шулаймы, әллә түгелме? Кеше һөйләгәнгә генә ышанып ятыу ҙа дөрөҫ булмаҫ. Хөсәйен үҙен ундай мәүештәр рәтенә индермәй. Ҡараслан яғында һунарға сығыу ҙа унын күптәнге хыялы. Ете дуҫ, ете ышаныслы иптәше менән бына шул яҡҡа ыңғайланы егет. Төнгөлөккә Ҡараслан итәгендә ҡыуыш ҡорҙолар, алмаш-тилмәш ҡарауылда торҙолар. Хөсәйен таң һарыһынан тороп, йылға яғына атланы.

Өҫтән һөҙәккә ҡарап тора биргәс, ул бер ҡыр һыйырын күреп ҡалды. Урман януары етеҙ генә йылғаға төштө лә, ашыҡмай ғына һыу эсергә керешә. Тағы бер ни тиклем ваҡыттан инә мал янына ҡыр аты килеп баҫты. Хөсәйендә шул саҡ һунарсы ҡомары уянғандай булды. Ләкин ул үҙе менән ҡоралын алмағайны. Шулай күҙәтеүсе булып тороуын дауам итте. Ҡапыл ҡыр аты артҡа сүгә башланы. Инәһе урман эсенә ташланды. Кемдер атты бит! Кемдәр йөрөй был тирәлә? Кейеккәме, әллә әҙәм башына ауға сығыусылармы? Абай булырға кәрәк. Хөсәйен боҫто. Уғаса булмай, ағаслыҡ араһынан ике кеше атылып килеп сыҡты. Оло кәүҙәлеһе хәнйәре менән ҡыр атының муйынынан салып та ебәрҙе. Ҡураныс ҡына кәүҙәле ҡара түбәтәйле юлдашы, өлкәненең ҡушҡанын үтәп, эргәһендә орсоҡтай өйөрөлә. "Үәй, бигерәк йылғыр! Улы микән был ут бөрсәһе?" Хөсәйен ныҡлабыраҡ ҡарар өсөн боҫҡан ерендә һонолғайны, аяҡ аҫтында нимәлер шырт итеп ҡалды. Шул уҡ мәлдә тиерлек, кәүҙәле ир кирелгән янын Хөсәйен һыйынған яҡҡа тоҫҡаны. Егет тын алырға ла ҡурҡып, тын ҡалды. Шикле тауыш бүтән ишетелмәгәс, һунарсы йәнә табышына эйелде. Башын күтәрмәй, ҡулы менән ишара яһауы булды, ағастар араһынан йәнә бер ир заты пәйҙә булды. Бынынының башы ялтырап тора, киң ялпаҡ битле.

Хөсәйен егеттәрен уятты. Ары киттеләр. Хәҙер юлдары Арҡан тигән ер аша үтә.

- Бында ла уяу булайыҡ, - тине Хөсәйен. - Атайым ошо тирәлә урыҫтар нығытма ҡора башлаған, ти. Уларҙы ҡуҙғытып, борсоп тороусылар бар шикелле, шуға яҡын килгәндәрҙе өнәмәйҙәр. Аңғармаҫтан ҡул аҫтына барып инмәйек.

Егеттәрҙең йөҙҙәре яна. Йәш кешенең ҡыҙыҡһыныуы көслө, улар быны йәшерә лә белмәй. "Урыҫ" тигәндәрен уларҙың күпселеге әлегә тиклем күргәне юҡ. Улар һымаҡ уҡ кешеләрме, нимә ашайҙар, нисек кейенәләр - бөтәһен дә белгеләре килә.

- Ҡырҙан ғына булһа ла ҡарап китәйек инде, - тип инәлә Йомағужа.

- Беҙҙең һымаҡ ике аяҡлы, ике ҡуллы инде. Аның нимәһе тағы... - егеттәр араһында Хөсәйен үҙен белемсе һымаҡ тоя. Атаһына килеп китеүселәрҙе үҙ күҙе менән күргәне бар. - Беҙгә ҡуныу хәстәрен дә күрергә кәрәк, - тине Хөсәйен. - Киттек арыраҡ...

Ҡуҙғалдылар.

- Хөсәйен, әйҙә, иртәгә һунарға сығабыҙ, - тип дәртле тауыш менән өндәште Йомағужа. - Кейекбирҙе ағайҙың йәйләүенә яҡынлаштыҡ бит инде. Ағай янына елле бүләк менән барып төшөрбөҙ. Беҙҙең өсөн һуғым һуйып мәшәҡәтләнмәҫ. Бөтәһен дә үҙебеҙ тейәп апарабыҙ.

Ахыр шулай килештеләр - иртән иртүк ауға сығырға. Хөсәйен ҡарауыл булып ҡалырға ниәтләне. Бер яҡтан, һиҙҙермәй генә нығытманы барып ҡарағыһы килә, ләкин уйын дуҫтарына белгертмәне, егеттәрен хәүеф аҫтына ҡуйырға теләмәй. Абай булырға кәрәк. Ысынлап та, тирә-йүн тыныс булһа, бергәләп тә барырҙар ине. Икенсе яҡтан, бей улы һунар өсөн был тирәне түгел, ә Ҡараслан яғын хуп күрә. Кире ҡайтышлай шунда егеттәрҙе таң ҡалдырасаҡ! Атаһынан күп йылдар элек Моратша кешеләренең бер нығытманы емергәнен ишеткәне булды. Тағы ҙурыраҡ итеп һалалар, тинеләр. Быныһы нимә өсөн икән? Башҡорт еренә уларҙы шул тиклем нимә йәлеп итә?

Егеттәр ҡуҙғалды. Хөсәйен һүнгән усаҡты ҡабат дөрләтте. Юлда атып алған ҡорҙоң йөнөн йолҡҡослар өсөн йылға ягына атланы. Шул саҡ ат тояғының тоноҡ ҡына дөпөлдәгәнен ишетеп һағайҙы. Йәһәт кенә уҡ-янына йөбеште. Тауыш тынған һымаҡ булды ла, шунан апасыҡ булып эргәлә генә ишетелде, егет ялп итеп унға ҡайырылды. Әһ-һә! Кисәге малай ҙа баһа! Артынан ике һалдат ҡыуа төшкән. Нинә улар янына барып сыҡты икән был анра? Мажара эҙләйме, әллә үлемен көнәп йөрөймө? Атын йән-фарман урман ягына ҡыуалай. Йылғырлығына кисә уҡ хайран ҡалғайны Хөсәйен, әле лә шулай. Атына лыпын ята, түбәнгә эс ягына ла шыуышып төшөп китә. Ләкин һалдаттарҙа мылтыҡ бар. Ана, береһе тоҫҡап маташа. Атына эләкһә, барыбер тотасаҡтар был баланы! Уға ҡыҫылырға ярамай, атаһының киҫәтеүе ныҡ. Батша кешеләре менән араны боҙоу ҡаты тыйылған. Ләкин былар бит баланы баҫтыра. Бот буйындай малайҙан ниндәй һуғышсы сыҡһын. Ярҙам итергә кәрәк. Башһыҙ балапанды ҡотҡарырға. Хөсәйен керештә бар көсөнә тартҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Ялтлап осҡан уҡ алда барған һалдаттың яурынына ҡаҙалды. Икенсеһе уны уҙып китте, ләкин иптәше атының ауыҙлығын шаҡарғанын күргәс, кире боролдо. Ул ике арала малай шырлыҡҡа инеп юҡ булды. Уйламағанда-көтмәгәндә хилаф эш эшләгән Хөсәйен, нишләргә белмәйенсә, ярһып, атына атланды. Ҡыуып етерме икән? Хәҙер әллә күпме ара китеп өлгөрҙө бит инде. Ярар, әллә ҡайҙа китеп олаҡмағандыр, сөнки дошмандарының тороп ҡалғанын күрҙе, урман эсендә атын ҡыумаҫы асыҡ. Бына хәҙер Хөсәйен уны андып барып, абайламағанда эләктерәсәк!

Һыбайлы атын үҙ яйына ҡуйған, үҙе ике ҡулын елкәһенә ҡуйып ултырған. Әйтерһең, әле генә һалдаттарҙан ҡасмаған, әйтерһең, аукан ергә тик хозурланыр өсөн генә сыҡҡан. Аптыраҡ был диуананың ҡыланышы. Ә ҡалай һиҙгер. Ялп итеп артына боролдо, ләкин ҡасырға уйламаны. Көтә. Хөсәйен атын ҡыҙыулатты. Яҡынлашҡас, малайҙың зәһәр янған күҙҙәрен күреп, эсендәге ярһыуын әлегә сығармаҫҡа тырышты. Хөсәйен уға дошман түгел дә баһа, киреһенсә, уны ҡотҡарыусы. Бындай усал күҙҙәр менән Хөсәйенде ҡурҡытам тимә, маңҡыстапан! Юҡ инде, уйың барып сыҡмаҫ! Егет нимәлер әйтергә уҡталды һәм шул килеш ҡатып ҡалды - малай уҡ-янын уға тоҫҡағайны. Ут күҙен һаҙлатҡан үсмер яҡын килергә ярамағанлығын иҫкәртеп, усы аҙылған ҡулын һуҙҙы. Хөсәйен атының ауыҙлығын шаҡарҙы. Шул уҡ мәлдә малай әсе итеп һыҙғырып ебәрҙе. Елдереп урман эсенән алмасыуар килеп сыҡмаһынмы! Малай менгән атын шул яҡҡа борҙо, күҙ асып йомғансы, алмасыуарға күсеп тә ултырҙы, өсәүләшеп урман төпкөлөнә сумдылар.

Күргән-кисергәне Хөсәйенде шаңҡытты. Эйе, улар әлеге мәлдә - сит ырыу биләмәһендә. Әммә ләкин күрше ырыуҙың кешеләре шул тиклем дә сәйер ҡыланышлылыр тигән уй башына ла инеп сыҡҡаны юҡ ине. Йола, ғөрөф-ғәҙәттә, хатта телдә лә айырма бар барлыҡҡа, уға ғәжәпләнергә түгел, хатта төрлө арага, затҡа ҡараған бер ырыу кешеләре лә бер-береһенән айырыла. Ләкин бында Хөсәйен күргән әҙәмдәр береһенән-береһе сәйерәк, ә ҡырыҫлыҡ хәттин ашҡан!.. Унын, мәсәлән, был тирәнән түгеллеге, кирәктән килеп сыҡҡан сит ырыу вәкиле икәне тотошонан, кейеменән уҡ күренеп тора. Ер-һыуҙы һорашыу, юл хәлдәрен белешеү башҡортта борондан килгән йола. Сит кеше менән ҡыҙыҡһыныу түгел, бот буйлыҡ был бала уға янап маташа бит әле. Йәнәһе, яҡын килмә, юғиһә, үлемең минән буласаҡ... Ҡыланышында яугирлек сифаты ла юҡ түгел! Бер хикмәт бар бында... Хөсәйен көлөмһөрәне, "бот буйы", имеш, атып йыҡмаҫ та, тимә! "Башкиҫәр" тип атау хатта дөрөҫөрәк тә булыр... Нишләп һалдаттар бер баланы эҙәрлеклəргә тейеш? Бында урыҫтарҙың берәй оло ғәскәре торамы? Шулар менән алышып маташалармы әллә? Бәлә килгәндә башҡорт һәр саҡ бер-береһенә терәк булған. Хөсәйендең ярҙам итергә теләгәнен күрҙе лә баһа. Улайһа, нишләп Хөсәйенгә ауыҙ асырға ла ирек бирмәне? Кисә Ҡарасланда, бөгөн Арҡан буйында осраштылар. Айыу ғына иркен йөрөр был шөкәтһеҙ урман-тау араһына, атаһы менән аҙашып килеп сыҡмағандарҙыр бит? Аусылар, тип уйлар инең, ләкин был да бала шөғөлө түгел...

Егеттәрҙе иҫкәртергәме? Ҡорған ҡыуыштарын сит-яттар таба алмаҫ табыуын. Шулай ҙа... Хөсәйендең йөрәге дөп-дөп типте. Хәҙер айырата һаҡ булырға кәрәк, ныҒытма тәҙәүсәләр ҙә яралы һалдаттарын күреп, зыҡ ҡубаларҙыр. Иң хәйерлеһе, был тирәнән йәһәтерәк тайыу. Нығытма, нығытма... Юҡ, уны барып ҡарамайынса, барыбер бер ҡайҙа ла китмәйәсәк. Хөсәйен тағы ла үҙе генә белгән йүнәлешкә боролдо. Ҡалҡыулыҡтағы таштар араһына боҫоп, ҡаҙарма кешеләрен күҙәтергә керешә. Ана береһе аҡһаҡ. Эйе, тап шул бәндә атаһының иҫке белеше Пушкарев менән улар йәйләүенә килеп киткәйне бит! Исеме Әләксәй. Аҡһаҡ күп йөрөр, тип белеп әйтәләр, бер ҙә тик тормай, зыр әйләнә. Хужалары - Пушкарев атаһының күптәнге танышы. Пушкарев элек тә башҡорт иләндә бер аҙ тороп киткән, шунан ул юҡҡа сыға. Бәктиһәң, кире ҡайтарып алғандар икән. Ҡабаттан килеүе иһә ҡаҙыныу эштәре менән бәйле, ти атаһы. Хәҙер тау аҡтаралар ҙа, тау аҡтаралар икән. Шулай икәне күренеп тора, ана бит, әләм-һәләм кейемдәге кешеләре сан-туҙан эсендә борҡой. Уларҙы һалдаттар ҡарауыллай, арҡаларында мылтыҡ. Аҡырған тауыштар ишетелеп ҡала. Бер ҙә күңелгә ятышлы түгел. Пушкарев нимә эшләй, көнән нисек үткәрә, әллә үҙе лә ҡараһына батып соҡоноп йөрөймө икән? Ҡайҙа һуң шул түрәләре? Күпме күҙәтһә лә Пушкаревты тапманы. Унын ҡарауы, әйелеп-һыҒылып торған Әләксәйҙең һыны бында ла, тегендә лә ялпылдай.

(Дауамы бар).

ИЖАДХАНА

# РУХЛЫ ТАМАШАСЫЛАР ТӘРБИӘЛӘНҺӘ...

## тамаша залдары буш булмаҫ



**Билдәле актриса Фаина Раневскаяның ошондай һүҙҙәре бар: "Актер телендәге "уйнау" тигән һүҙҙе ҡабул итеп етмәйем. Шахмат, футбол уйнарға мөмкин, ә сәхнәлә уйнарға түгел, йәшәргә кәрәк". Хаҡлыҡ бар был һүҙҙәрҙә. Тормошонҙо сәхнәгә бәйләгәнһең икән, һин сәхнәлә йәшәргә бурыслыһың. Ысын Прометей кеүек... мәңгелек булып!" Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының йәш актеры Рәмзил Сәлмәнов тә тап шундай фекерҙә. Актерлыҡ һөнәрен ул ана шул янып йәшәү, янып ижад итеү өсөн һайлаған да инде. Булмышына, тәбиғәтенә яҡын булған өсөн һайлаған. Һәм ижад юлы башында уҡ шундай роль алыу бәхетенә өлгәшкән ул: Прометей! Янмай ҡара был ролде ижад иткәндә! Түбәндә Рәмзил СӘЛМӘНОВ үҙе һөйләй.**

### Тыуған яҡтан илһам алып…

Тыуған яҡтарым мине ижад кешеһе иткәндер. Мәгрүр һынлы ҡарағайҙар, күкрәргә артылған Ҡырҡты тауҙары, бормалы-бормалы Ҡыҙыл йылғаһы... Һанай китһәң, тәбиғәт гүзәллегенә иҫең китер. Ошо ожмах ҡуйынында - Әбйәлил районы Буранғол ауылында донъяға килгәнмен. Тыуған ауылымдағы урта мәктәпкә уҡырға баргас, уҡый-яҙа белгәнлектән, икенсе синыфҡа ултырттылар. Башланғыс синыфтарҙан башлап уҡ төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнаштым. 6-сы синыфты тамамлағас, дуҫым Салауат Хилалов менән Өфөгә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатына уҡырға килдек. Сит мөхит, ҙур ҡала, аралашыу ҙа икенсе төрлө. Әммә өйрәнеп китеү ауыр булманы. Ғаилә тәрбиәһе лә ҙур роль уйнағандыр. Әйткәндәй, ата-әсәйем дүрт бала тәрбиәләп үҫтерҙе. Атайым оҙаҡ йылдар Асҡар АТП-һында шофер булып эшләне. Әсәйем Мәрйәм Сәлмәнова ижад кешеһе. Райондағы "Йәйғор" әҙәби ижад берекмәһе ағзаһы. Балалар өсөн йыйынтыҡ баҫтырып сығарҙы, әлеге ваҡытта мәктәптә рус теле һәм әҙәбиәтенән һабаҡтар бирә.

### Хыялға илтер юлдар

Мәктәп йылдарында теүәл фәндәрҙе бигүк яратмаһам да, уның ҡарауы, гуманитар фәндәрҙе үҙ иттем. Тел, әҙәбиәт менән бәйле фәндәр еңел бирелде. Хыялға юлдар бала саҡта һалына, тиҙәр. Сәхнә кешеһе булыу теләге шул йылдарҙа тыуҙы ла инде. Актер тормошта ла актер, тигәндәй, әлеге лә баяғы Салауат дуҫым менән төрлө ролдәргә инеп, шаяра торғайныҡ. Бер ваҡыт рәсем дәресендә бер һүрәткә (исеме хәтерҙә ҡалмаған) арнап, таҡмаҡ сығарып йырлап ултырғайныҡ. Ниндәйҙер кисә уҙғарғанда уҡытыусы шул ваҡиғаны хәтерләп, ошо таҡмаҡ менән сығыш яһатты. Башланғыс актерлыҡ мәктәбен гимназияла эшләп килгән драма түңәрәгендә үттем, тиһәм дә хата булмаҫ. Сәхнәләштергән әҫәрҙәрҙә мин хыялымды күрә инем.

Унынсы синыфта уҡыған саҡ. Поезда тыуған яҡтарға ашҡынып ҡайтып барам. Бер купеға эләккән егет менән һөйләшеп киттек. Бәктиһәң, ул актерлыҡҡа уҡып йөрөй икән. Ул ваҡытта әле был һөнәргә уҡытҡандарын, театр бүлеге бар икәнен белмәй инем. Шул ваҡыттан миңә ҡанат үҫтеме ни, актерлыҡҡа барыу теләге көсәйгәндән көсәйҙе. Гимназиянан һуң туп-тура Өфө дәүләт сәнғәт институтына юл тоттом. Театр бүлегенә конкурс ҙур ғына. Беҙҙең төркөмдә махсус рәүештә Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрына тәғәйенләп йыйҙылар. Уҡырға ҡабул ителгәс тә түбәм күккә тейерҙәй булды. Тормош тәжрибәһе туплаған, үҙ эшен яҡшы белгән, көслө уҡытыусыларҙа уҡыуым менән ғорурланам.

### Театрһыҙ йәшәү мөмкин түгел

Бәләкәй ролдәр булмай, шул кимәлдәге актерҙар була, тигән бер аҡыл әйәһе. Ысынлап та, тамашасы күңелен яулар өсөн ролдең ҙур йә бәләкәй булыуы мөһим түгел, уны нисек башҡарыу мөһим. Ролдәрҙең һәр береһен тулҡынланып ҡабул итәм. Уларҙың һәр береһе ҙур яуаплылыҡ талап итә, күп көс һалына. Күңелемә тормошсан ролдәр яҡын. Ниндәйҙер фантастик ролдәргә ҡарағанда, тормошсан образдар тыуҙырып, кеше күңеленә үтеп инеүе еңелерәк. Һәр роль үҙе бер сихри донъя инде ул. Сәхнәгә сығарғансы шул образ менән йәшәйһең, янаһың, көн-төн шул хаҡта уйланаһың.

"Ташлама утты, Прометей!" трагедияһында төп роль Прометейҙы ышанып тапшырыуҙарын бик тулҡынланып ҡабул иттем. Спектаклдең режиссеры минең курсташым, әлеге ваҡытта Мәскәүҙә сығарылыш курсында уҡып йөрөүсе Айнур Сафиуллин. Унын был ауыр ғына әҫәрҙе диплом эше итеп сәхнәгә сығарырға йөрьәт итеүе ҙур батырлыҡ. Был премьераны халыҡ ҙур тетрәнеү менән ҡабул итте. Ни тиһәң дә, тамашасы унын ҡабаттан сәхнәгә сығыуын егерме йылдан ашыу көттө. Минең төп бурыс - заманында Прометей образы менән тамашасыны әсир иткән Илшат Йомағолов һынын сәхнәгә ҡайтарырға өлгәшеү. Өлгәшкәнмеме, юҡмы, уныһы тамашасы хөкөмөндә. Премьера уңышлы үтте, тинеләр. Мине лә маҡтанылар. Шатландым, әммә яуаплылыҡ та, бер аҙ ҡурҡыу тойғоһо ла билеп алды. Тик үҙемде ҡулға алдым һәм, мин булдыра алам, тигән ышанысты нығытып ҡуйҙым күңелемдә. Премьера үтһә лә, һаман ошо образ менән йәшәйем. Башҡорт халҡының Прометей кеүек шәхестәре - Салауат Юлаев, Зәки Вәлиди, Рәми Ғариповтар яҙмышы тураһында ла йыш уйлана башланым, ысын мәғәнәһендә ут өләшеүсе, халҡын алға әйҙәүсе ошо ил уландары тураһында ла спектаклдәр уйнарға яҙһа ине, тип хыялланам.

Театр элек-электән тәрбиә сығанағы булып һаналған. Халыҡ театрға рухланып, күңеле таҙарып ҡайтыр өсөн килә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бәгзе бер театрҙар шоу менән генә мауыға башланы. Был инде театрға халыҡты йәлеп итеү өсөн, сараһыҙҙың көнөнән эшләнәлер, тием. Йыш ҡына театрҙарҙа ярым ярты залды күреп, эс бошоп ҡуя. Кешене, бигерәк тә йәш һәм урта быуынды, виртуаль донъя йолоп алды. Ул-был нәмәгә халыҡ тиҙ әүрәр заманда йәшәйбеҙ шул. Шуға ла беҙҙең маҡсат: рухлы тамашасылар тәрбиәләү. Рух бар икән, милләтебеҙ киләсәге лә бар.

**Данил ӘБДЕЛҒАЗИН яҙып алды.**

✓ *Күкрәк һөтө - яңы тыуған сабый өсөн иң яраҡлы аҙыҡ. Ауырлы саҡта бала әсә менән тығыҙ бәйләнештә була һәм ул донъяға тыуғас, уны күкрәк һөтө менән имеҙеү ошо бәйләнеште артабан һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә.*



СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Бөгөнгө фән дәлилләүенсә, күкрәк һөтө имеп үҫкән балалар һалма тукландырылған тиҫтерҙәренә ҡарағанда, интеллектуаль яҡтан да, физик йәһәттән дә тиҙерәк үҫешә. Шуға ла хәҙер табиптар ҙа, Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) ла баланы ике йәшкә тиклем имеҙергә кәңәш итә. Ҡөрьәндә лә "Әсәләр балаларын ике йыл дауамында имеҙергә тейеш" ("Баҡара" сүрәһе 233-сө аят) тиелә. Халҡыбыҙҙа борондан бала ҙурайғансы уға күкрәк һөтө имеҙеү йолаһы булған, әммә һуңғы осорҙа көнбайыш илдәренә эйәреп, яһалма тукландырыуҙы өҫтөн ҡуйған әсәләр ҙә юҡ түгел. Күкрәк һөтөнөң балаға һәм әсәгә файҙаһы тураһында гинеколог-эндокринолог, Өфө ҡалаһы 44-се дауахананың ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһы мөдире Гөлнара Нәжип ҡыҙы ӘМИРОВА һөйләй.**

# САБЫЙЫҢДЫ ОҘАҒЫРАҠ ИМЕҘҺӘҢ...

## йәндәрегеҙ йәнәш булыр



### Күкрәк һөтө - сәләмәтлек нигеҙе

Психологтар раҫлауынса, әсә һөтө имеп үҫкән сабый эмоциональ яҡтан тиҙерәк үҫешә, әсә менән бала араһында бәйләнеш тә нығыраҡ була. Быға тиклем төрлө сәбәптәр арҡаһында күкрәк һөтөнөң сабыйға һәм әсәгә файҙаһы тураһында артыҡ мәғлүмәт булманы, бары тик һуңғы ун-ун биш йыл эсендә генә был өлкәлә яңы ҡараштар барлыҡҡа килде. Элек баланы ваҡыт менән, әйтәйек, һәр өс сәғәт һайын имеҙергә ҡушалар ине. Был дөрөҫ түгел, сөнки ҡайһы бер бала тиҙерәк асыға, шуға уны йышыраҡ имеҙергә кәрәк. Хәҙер тыуғас та баланы әсәнең күкрәгенә һалалар, аҙаҡтан да улар бер палатала була. Был әсә өсөн дә, сабый өсөн дә унайлы, бала тынысыраҡ та була, иммунитеты ла тиҙерәк нығына. Педиатрҙар балаға алты ай тулмайынса өҫтәмә аҙыҡ, хатта имеҙлек бирергә лә ҡушмай. Алты айҙан һуң ғына төрлө һуттар, пюрелар ашата башларға мөмкин.

Статистика мәғлүмәттәренә күҙ һалһаҡ, аслыҡ йылдарында ла ҡатын-ҡыҙҙар балаларын тик күкрәк һөтө менән генә үҫтергән. Үткән быуаттың 60-сы йылдарында, ҡатын-ҡыҙҙың йорт хужабикәһенән эшлекле ханымға әүерелә башлаған мәленән алып, бала имеҙеүселәр һаны ла кәмей башлай, сөнки ул саҡта декрет отпускыһы 40 көн генә була. Әлбиттә, закон тарафынан бындай әсәйҙәргә өс сәғәт һайын яслеға барып балаһын имеҙеп килергә рөхсәт бирелә. Әйткәндәй, был закон бөгөн дә әсәләргә бындай хоҡуҡты бирә. 90-сы йылдар башында төрлө өҫтәмә аҙыҡтар киң рекламалана башлағас, йәштәрҙә, бала имеҙеү - иҫкелек ҡалдығы, тигән хата ҡараш тыуа. Тап ошо осорҙан балалар араһында диатез кеүек сирҙәр күбәйә. Шуныһы ҡыуаныслы: хәҙерге заман йәштәре баланы күкрәк һөтө имеҙеп үҫтереүҙең файҙаһын аңлай. Рәсәй менән сағыштырғанда, Башҡортостанда имеҙеүселәр һаны күпкә юғарыраҡ. Бында, моғайын да, ҡатын-ҡыҙ консультацияларының да йоғонтоһо барҙыр. Мәҫәлән, беҙҙең дауалау учреждениеһында аҙнаһына дүрт тапҡыр лекция уҡыла, табиптар, акушерҙар, инструкторҙан торған махсус төркөм тәүлек әйләнәһенә тип әйтерлек ауырлы ҡатындарға һәм йәш әсәләргә ярҙамға килергә әҙер. Табиптар хәҙер күкрәк һөтө имгән балаларға имеҙлек һәм имеҙлекле шешә биреүгә ҡаршы ла көрәш алып бара. Бала бәләкәй генә булһа ла бик хәйләкәр. Күкрәк менән сағыштырғанда, имеҙлек йомшаҡ, етмәһә, уның тишеге лә ҙур ғына булһа, балаға унан аҙыҡты һурып алыу өсөн артыҡ тырышлыҡ һалырға кәрәкмәй. Ә күкрәк мускуллы ағза, унан һөттө һурып сығарыу өсөн байтаҡ көс һалырға кәрәк. Иғтибар итһәгеҙ, бала имә торғас, туҡтап хәл йыйып ала. Рәхәт юл менән аҙыҡ табырға күнеккән бала аҙаҡ күкрәкте алмай, тик имеҙлекле шешә һорап тик торасаҡ, шуға ла уны был ысулға өйрәтмәү хәйерле.

Ҡайһы бер әсәләр төнгөләккә балаға имеҙлек бирә. Беҙ быны ла кәңәш итмәйбеҙ. Төндә тороп бала имеҙгән ҡатындарға ҡабаттан тиҙ арала ауырға ҡалыу ҡурҡынысы янамай. Имеҙеүҙең ҡатын-ҡыҙҙың һаулығы өсөн тағы ла бер ыңғай яғы - оҙаҡ бала имеҙгәндәр араһында күкрәк һәм йоморткалыҡ яман шеше һирәгерәк осрай.

Әгәр ҙә әсә ауырып китһә, имеҙергә яраймы, тигән һорауҙы йыш бирәләр беҙгә. Әсә үҙен насар тоймай һәм уның тән температураһы 39-ҙан түбән икән, ул имеҙә ала, бары тик профилактика маҡсатында оксолин майы һөртөп, маска кейергә кәрәк. Әлбиттә, ҡайһы бер сирҙәр мәләндә, мәҫәлән, СПИД, ВИЧ-инфекцияһы, венерик сирҙәр, туберкулездың асыҡ формаһы ваҡытында, психотроп матдәләр ҡулланған саҡта баланы имеҙергә ярамай. Шулай уҡ бала һөттө үҙләштерә алмаған осраҡтар ҙа була, был саҡта уны тулыһынса яһалма тукландырыуға күсерәләр. Бала имеҙгән ҡатындың баланың атаһы менән дә аралары нығыраҡ була.

Шулай итеп, баланы күкрәк менән имеҙеп ғаилә өсөн бөтә яҡлап та файҙалы. Яһалма аҙыҡтар бик ҡиммәт тора, тимәк, һеҙ ғаилә бюджетына аҙмы-күпме экономия яһайһығыҙ. Күкрәк һөтөн әҙерләргә, йылытырға кәрәкмәй, бала асыҡҡан урында уҡ уны имеҙеп алырға мөмкин. Ҡайһы бер саҡта әсәләр, бала туймай, тип урынһыҙ борсола һәм балаһын яһалма аҙыҡҡа күсерә. Хатта күкрәккә һөт бик аҙ күләмдә төшкән хәлдә лә баланы имеҙергә тырышырға кәрәк. Баланың туйыуы йәки туймауын педиатрҙар менән бергә асыҡлағыҙ. Ғөмүмән, һөт булһын өсөн дөрөҫ тукланырға, дөрөҫ йәшәү рәүеше алып барырға кәрәк.

### Иң яраҡлы аҙыҡ

Күкрәк һөтө - яңы тыуған сабый өсөн иң яраҡлы аҙыҡ. Ауырлы саҡта бала әсә менән тығыҙ бәйләнештә була һәм ул донъяға тыуғас, уны күкрәк һөтө менән имеҙеү ошо бәйләнеште артабан һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Әсә һөтөндә сабыйға кәрәкле бүтән, яһалма рәүештә синтезлап булмаған бөтә матдәләр ҙә бар һәм шуныһы ҡыҙыҡлы: баланың ихтыяжына ҡарап, һөттөң составы даими үҙгәреп тора.

Күкрәк һөтөнөң 87 проценты - һыу. Был һыу биологик яҡтан әүҙем һәм шуға ла ул яҡшы үҙләштерелә. Күп күҙәтеүҙәр күрһәтеүенсә, әсә һөтөнән тыш башҡа бер төрлө һыу ҙа баланың һыуһынын яҡшылап ҡандыра алмай. Шуға ла күкрәк һөтө имгән балаға өҫтәмә рәүештә һыу эсермәһәң дә ярай, тик ҡайһы бер осраҡтарҙа, әйтәйек, мунсанан, ваннанан һуң аҙыраҡ һыу бирергә була, сөнки йыуынғандан һуң уның имергә хәле булмай. Һыуҙы имеҙлекле шешәгә һалып түгел, ә ҡалаҡлап эсерергә кәрәк.

Күкрәк һөтөнөң 7 процентын углеводтар, башлыса лактоза алып тора. Лактоза менән бер рәттән, унда башҡа төрлө сахаридтар ҙа бар, тик уларҙың күләме бик бәләкәй. Лактоза, йәки икенсе төрлө әйткәндә, һөт шәкәре ниməһе менән файҙалы һуң? Иң беренсе, ул эсәктә лактобактериялар барлыҡҡа килеүҙе әүҙемләштерә, ә улар үҙ сиратында нормаль флораның төп компоненты булып тора һәм патоген микроорганизмдар үҫешен булдырмай. Лактоза тимер һәм кальций кеүек микроэлементтарҙың үҙләштерелеүенә лә булышлыҡ итә. Һыйыр һөтөндә лә бәләкәй күләмдә лактоза бар, әммә күкрәк һөтөндә лактоза менән бергә был углеводты үҙләштерергә ярҙам итеүсе фермент та булыуы уны күпкә файҙалыраҡ итә. Күкрәк һөтөнөң 4 процент тирәһе майҙарҙан тора. Был майҙар сабыйҙың тәүлегенә тотонған энергияһының 50 процентын "ҡаплай". Иң майлы һөт баланы имеҙеүҙең аҙағында бүленә. Әгәр ҙә һеҙ баланы оҙағыраҡ имеҙмәйһегеҙ йәки сиратлап ике күкрәкте лә бирәһегеҙ икән, был осраҡта бала туймаясаҡ, сөнки ул ана шул иң туҡлыҡлы һөттө имеп өлгөрмәйәсәк. Әйткәндәй, углеводтар осрағындағы кеүек, күкрәк һөтөндә майҙарҙы тарҡатыусы фермент - липаза бар.

Күкрәк һөтөндә аҡһым сағыштырмаса аҙыраҡ. Йыш ҡына әсәләр быны белгәндән һуң аптырап ҡала һәм борсола башлай. Күкрәк һөтөндә аҡһымдың аҙ булыуы уның файҙаһы булыуын аңлатмай. Киреһенсә, баланың организмында аҡһымдың артыҡ булыуы ҡайһы бер сирҙәргә: матдәләр алышыныуы насарайыуына, бөйөрҙәр эшмәкәрлегенең боҙолоуына, шәкәр диабетына һәм һимереүгә килтерә. Күкрәк һөтө организмда башҡа аҡһымдарҙан синтезлана алмай торған аминокислоталарға бай. Сабый организмының бөтә күҙәнәктәре, унда барған бөтә биохимик процестарҙың ферменттар һәм катализаторҙары аҡһымдарҙан төҙөлә. Бынан тыш, үҙенең иммунитеты барлыҡҡа килгәнгә тиклем баланы әсә организмында булған антиматдәләр һаҡлай. Шуға ла баланы имеҙеп үҫтереү уны төрлө сирҙәрҙән һаҡлауҙың иң ҡулайлы ысулы.

### Күп ашау түгел, туклыҡлы итеп ашау мөһим

Бала имеҙгән әсәнең дөрөҫ тукланыуы мөһим. Шул саҡта ғына сабый әсә һөтө аша кәрәкле бөтә биологик әүҙем матдәләрҙе аласаҡ. Халыҡта ни өсөндөр бала имеҙгән ҡатын ике кеше өсөн ашарға тейеш, тигән хата ҡараш йәшәй. Иң мөһиме, күпме түгел, ә нисек итеп ашау - шуны онотмаһын ине әсәләр. Был осорҙа аппетит артыҡ күтәрелә, шуға ла файҙалы булмаған аҙыҡты күпләп ашау һимереүгә килтерәсәк.

Иң тәүҙә рациондан "буш" калория тип йөрөтөлгән аҙыҡтарҙы - конфит, башҡа тәмтомды, рафинадланған продукттарҙы алып ташлағыҙ. Бала имеҙеүсе әсә көн һайын икмәк, бутҡа, дөгө, макарон ризыҡтар, йәшелсә-емеш, ит, балыҡ, йомортҡа (көнөнә 2-3 тапҡыр), һөт, сыр, ҡатыҡ, тәбиғи йогурт, эремсек ашарға тейеш. Йәшелсәләрҙән кәбестә, ҡабаҡ, баклажан, йәшел борсаҡ, фасоль, ҡыяр, помидор, йәшел салат, редис, шалҡан ярай. Емешеләктән башлыса алма, груша, анар емеше (гранат), бер аҙ персик, абрикос, ҡарбуз һәм ҡауын мөмкин. Шулай уҡ ҡарағаттың төрлө төрҙәре, ҡара миләш, крыжовник, сейә, һары сейә, ҡурай еләге файҙалы.

Бала имеҙгән осорҙа көн һайын поливитаминдар комплексы ҡабул итергә була. Беҙ әсәләргә йышыраҡ "Гендевит", "Прегнавит", "Матерна" кеүек витаминдар комплексын тәҡдим итәбеҙ. Сөнки рацион ни тиклем генә бай булмаһын, улар әсәнең организмын кәрәкле витаминдар һәм микроэлементтар менән байыта алмай. Был препараттар һөттөң сифатын яҡшыртып ҡына ҡалмай, уның бүленеп сығыуына ла булышлыҡ итә.

Шуны ла әйтергә кәрәк: ҙур күләмдә ашалған һәр төрлө аҙыҡтан балала аллергия барлыҡҡа килеүе ихтимал. Һәр нәмәлә сама белегеҙ һәм балала булған һәр үҙгәрештәр тураһында ваҡытында табипҡа белдереп барығыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сабый имеҙеү - уны туйындырыу ғына түгел, үҙенә күрә аралашыу сараһы ла. Был саҡта бала үҙен яҡлаулы тоя, кәйефе күтәрелә, донъяны теүәлләнә. Имгән бала тынысыраҡ була һәм иң мөһиме - ул әсә кешегә ышанырға өйрәнә. Баланы күкрәк һөтө менән имеҙеп үҫтереү - ул боронғолоҡ ҡалдығы тигәндәрҙең һүҙенә ҡарамағыҙ. Ниндәйҙер мәғәнәһеҙ фекерҙәр һеҙҙе бер нәмә менән дә сағыштырып булмай торған наҙ һәм һиллек минуттарынан мәхрүм итмәһен.**

Ләйсән НАФИҠОВА
әҙерләне.

ДИНЕБЕҘҘӘ - КӨНӨБӨҘ

# ДИНГӘ ҠАЙТҺАҠ...



## ҡотолабыҙ

**Совет заманының динһеҙлеккә, әхлаҡһыҙлыҡҡа төшөргән шауҡымы үтеп, икенсе бер буталсыҡ осорға аяҡ баҫҡанбыҙ. Кемдер байлыҡ артынан ҡыуа башланы, ә кемдер иманға, рухи үҫешкә ынтыла. Кеше үҙ юлында төрлө һынауҙар үтеп, ауырлыҡтар кисереп, был фани донъяла үҙ-үҙен таный, күрһәтә, әхирәт өсөн сауап йәки гонаһ туплай.**

Халҡыбыҙ быуаттар буйы Ислам динен тотоп, Аллаһы Тәғәлә ҡушҡандарын үтәп йәшәгән. Үткән быуаттарҙа һәр бер ауылда тиерлек мәсет, мәҙрәсә булғанлыҡтан, башҡорттар дин тәғлимәтен яҡшы белгән, муллалар халыҡ араһында иң аҡыллы кешеләр булып һаналған. Ризаитдин Фәхретдиновтың "Аҫар" исемле китабынан да дини ғилемле кешеләрҙең, араларында Нәҡшбәндиә тәриҡәтендә торғандарҙың байтаҡ булыуын күрәбеҙ.

Ҡөрьән-Кәримдә: **"Мин ендәрҙе һәм кешеләрҙе Үҙемә ғибәҙәт ҡылһындар өсөн генә барлыҡҡа килтерҙем"**,- тиелә ("Әҙ-Зәриәт (Елгәреүселәр) 51:56). Эйе, ғаләмдәге бар нәмә Раббыбыҙға тулыһынса буйһона: хайуандар, ҡоштар, үҫемлектәр Уға бер туҡтауһыҙ зекер әйтеп йәшәй. Тик кешеләр генә Аллаһ ҡушҡанды үтәмәй. Әҙәмгә намаҙ уҡырға, ураҙа тоторға, хәйер-саҙаҡа бирергә, мөмкинлеге булғанда хаж ҡылырға, харамдан йыраҡ булырға ҡушылған. Ғөмүмән, был донъяла дөрөҫ йәшәү өсөн әҙәм балаһына тыуғандан алып үлгәнгә ҡәҙәр белем алырға, уҡырға кәрәк. Кеше үҙенең тирәяғына ҡарап уйланырға, Аллаһтың барлығын һәм берлеген танырға, аңларға тейеш. Шуның өсөн дә уға аҡыл бирелгән. Әгәр кешенең ике юғары белеме була тороп та, ул Ислам динен белмәй, ҡушылған ғәмәлдәрен үтәмәй, Раббыһына буйһонмай икән - ул наҙан иҫәпләнә. Ул "һуҡыр" һәм "һаңғырау" булып ҡала килә.

Шуға ла күпләп мәсет-мәҙрәсәләр, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн Ҡөрьән курстары асырға кәрәк, башҡортса дини китаптар баҫтырып, Ислам динен таратыу буйынса ныҡлап эшләү мотлаҡ. Тәнебеҙгә ризыҡ кәрәк булған кеүек, йәнебеҙ ҙә рухи аҙыҡҡа мохтаж. Күп кешеләр был донъяла үҙ урынын тапмай, үҙ-үҙен аңламай ҡаңғыра, байлыҡҡа ла, данға ла сыҙамай, йәки, кireһенсә, ауыр тормошонан бөгөлөп төшә, нисек йәшәргә белә алмай өмтһеҙлеккә бирелә. Ҡайһы берәүҙәребеҙ төрлө китаптар уҡып ҡарай, яңылыш ҡурҡыныс секталарға эләгеп, тура юлдан яҙа. Ә беҙгә, мосолмандарға, ҡулланма итеп Ҡөрьән китабы бирелгән. Шулай уҡ бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллалаһу ғәләйһис-сәләм тормошонан өлгөләр - хәҙистәр бар. **Беҙ шул ике изге "юлкүрһәткестәргә" - Ҡөрьән менән Хәҙистәргә таянып йәшәргә тейешбеҙ.** Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм нисек донъя көткән, ҡатындары менән ҡалайтып мөғәмәлә иткән, сауҙа, сәйәсәт эштәрен ҡайһылай алып барған - барыһы ла хәҙистәрҙә һөйләнелә.

Әлбиттә, был донъяла һәр кем төрлө гонаһҡа бата, әммә тәүбә итә, башҡа ҡылешмәгән харам ғәмәлдән һаҡлана белергә кәрәк. Кешегә үҙ холҡон үҙгәртеү, насар ғәҙәттәрҙән ҡотолоу ныҡ ауыр. Әммә үҙен теләп үҙгәрмәһән, һине бер кем дә үҙгәртә алмаясаҡ, ихтыяр көсө табып, гонаһлы эштәрҙән баш тартыу лазым. Ихлас үкенәһең, тәүбәгә киләһең икән, Аллаһы Тәғәлә бәндәһен ғәфү итә. Был хаҡта Ҡөрьән-Кәримдә бик асыҡ әйтелгән: **"...Эй, Минең үҙҙәренә-үҙҙәре зыян килтергән ҡолдарым! Аллаһың рәхмәтенән өмөт өҙмәгеҙ! Ысынлап та, Аллаһ гонаһтарҙың барыһын да ғәфү итә! Ул ярлыҡаусы һәм рәхимле бит! Һеҙгә ғазап килмәҫтән алда Раббығыҙға тәүбә ҡылығыҙ һәм Уға бирелегеҙ, һуңынан һеҙгә ярҙам итеүсе булмаҫ. Һәм һеҙ белмәгәндә һеҙгә ҡапыл ғазап килмәҫ борон Раббығыҙҙан һеҙгә индерелгән иң гүзәл нәмәгә [Ҡөрьәнгә] эйәрегеҙ!" ("Әз-Зумар, 39 : 53, 54, 55).**

Әгәр ҙә халҡыбыҙ яңынан дингә ҡайтһа, Аллаһы Тәғәләбеҙ ҡушҡан фарыз ғәмәлдәрҙе үтәп йәшәһәк, беҙҙең арала татыулыҡ тағы ла нығып, рухи-әхлаҡи яҡтан таҙарынып, көслө милләткә әйләнәсәкбеҙ. Сөнки Раббыбыҙ: **"Әгәр ҙә миңә ғибәҙәт ҡылмаһалар, мин уларҙы икенсе милләт менән алмаштырырмын"**, - тиғән бит. Бөгөн беҙ был һүҙҙәрҙең нисек тормошҡа ашыуын күрәбеҙ инде.

Эште һәр кем үҙ ғаиләһенән башларға тейеш: араҡы, һыра һымаҡ иҫерткес эсемлектәрҙе бөтөнләй һатып алмаҫҡа, шараплы өҫтәл артына һис ҡасан ултырмаҫҡа кәрәк! Байрамдарҙы ул шайтан һыуҙарынан башҡа ла матур итеп үткәреп була. Беҙгә сит мөхит, башҡа милләт йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен көсләп тағалар, ә беҙ, үкенескә ҡаршы, анра рәүештә шуларға эйәрәбеҙ. Хәҙер Европа илдәрендәге тәртипһеҙлектәр, кире эштәр барыһы ла беҙҙең мөхиткә инеп бөттө шикелле инде. Бына, мәҫәлән, дин буйынса ҡатын-ҡыҙҙың бөтә тәне ғәүрәт, уның йөҙө һәм ҡул суғына ғына ҡарарға мөмкин. Ә беҙ "Һылыуҡай" кеүек конкурстар үткәреп, театрҙарға барып, сәхнәләрҙәге фәхеш-зинаға, ялаңғас ҡатындарға ҡарап, күҙ зинаһына һәм гонаһҡа батып, хушыбыҙ китеп сәпәкәйләп ултырабыҙ...

Кешеләрҙең психикаһына телевизорҙағы йәмһеҙ күренештәр ҙә насар тәьҫир итә, бигерәк тә балалар унда күрһәтелгән бөтә ҡурҡыныс ҡылыҡтарҙы үҙҙәренә һеңдереп ултыра, тормош шулай булырға тейеш икән, тиғән яңылыш һығымтаға килә. Енәйәтсе, кире герой унда, киреһенсә, "батыр" ролендә йөрөй. Телевизорҙан көн дә күрһәтелгән эсеү, һуғышыу, ауызлыҡ, аҙғынлыҡ, енәйәт эшләү, урамда ялаңғас йөрөү, фәхишәлек ғәҙәти күренеш кеүек ҡабул ителә башлай. Шуға ла БСТ каналынан күберәк әхлаҡлы программалар, фәнни-популяр, Ислам хаҡындағы документаль фильмдарҙы күрһәтһәләр икән.

Эскелектең гонаһына килгәндә тағы ла шуларҙы әйтке килә. Аллаһы Тәғәләгә һәм яуап көнөнә ышанған кеше араҡы ҡуйылған өҫтәл артына ултырырға ла тейеш түгел. Сөнки Раббыбыҙ беҙгә иҫерткес эсемлектәрҙе тыйған, харам ҡылған. Ә бер тамсы харам ашаған йәки эскән кешенең 40 көн доғаһы ҡабул булмай. Шунлыҡтан, кешеләрҙең араҡы эсеп, рюмка күтәреп, табындарҙа теләк теләүенән бер файҙа ла юҡ. Ундай харамлы өйҙәргә, иҫеректәр янына фәрештәләр ҙә кермәй, ә байрамдары шайтан туйына әүерелә. Белеүебеҙсә, кем был донъянан кафыр хәлендә китә, шул тамуҡта мәңгелеккә ҡала. Шулай уҡ кем дә кем эскән кешеләр янында ултыра, тимәк, ул уларҙың эсеүен хуплай булып сыға, уға ла шундай уҡ ҙур гонаһ яҙыла. Һәм тағы. Хәҙер Европа этикеты артынан эйәреп, үҙҙәрен зыялы, юғары мәҙәниәтле һанаған әҙәмдәр "фуршет", "швед өҫтәле" ойоштороп, аяғөҫтө баҫып ашауҙы ғәҙәткә индерҙе. Ә мосолмандар ултырып, уң ҡул менән генә ашарға тейеш, тиғән ҡағиҙәне улар бөтөнләй һанға һуҡмай, күрәһең.

Беҙҙә эскелектең көсәйеүенең төп сәбәбе - диндән тайпылыу. Хәҙер бик күп ауылдарҙа мәсеттәр һалына, тик муллалар юҡ, булһа ла, белемлеләре аҙ. Әгәр егеттәребеҙ мосолман илдәренә дин буйынса уҡырға күпләп уҡырға ебәрелһә, улар ҡайтып, халыҡҡа Ислам ҡануындарын аңлатып, эскелеккә ҡаршы көрәш алып барһа, хәл үҙгәрер ине. Динебеҙгә ҡайтыуҙа ғына күрәм иманһыҙлыҡтан, әхлаҡһыҙлыҡтан, шулай уҡ төп бәләләребеҙҙең береһенә әйләнгән эскелектән ҡотолоу юлын.

**Фәнирә ҒАЙСИНА.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Өндәге төш тотторған бәхетле билет

Смит исемле кеше тураһында шундай тарих һөйләйҙәр. Ул доғалар уҡып ултырған бер мәлдә Ижадсыға үҙенең проблемалары тураһында зарлана: "Минең бизнесым көрсөк кисерә. Бары тик лотереяла отоу ғына ярҙам итә аласаҡ. Зинһар, отош миңә сыҡһын өсөн ярҙам ит".

Әммә Ижадсы уға ярҙам итмәй. Смит аптырашта ҡала. Ул тағы бер тапҡыр бәхетен һынап ҡарамаҡсы булып, ҡабат Ижадсыға мөрәжәғәт итә: "Минең бизнесым бөтөнләй үлде. Бурыстарым артты, һәм мин артабан нисек йәшәү, нисек тере ҡалыу тураһында ғына уйлайым. Бары тик лотереялағы отош ҡына минең финанс хәлемде яҡшырта аласаҡ".

Әммә был юлы ла Ижадсы ярҙам итмәй. Смит өсөнсө тапҡыр бәхетен һынап ҡарарға була. "Ҡәҙерле Ижадсы, хәҙер мине ҡатыным ташлап китте. Нимә эшләргә?"

Шулай тип әйтеп тә бөтмәй, уның башынан бер уй үтеп китә: "Смит, ниһәйәт, лотерея билеты һатып ал инде".

Ошо хатаны ҡабатламағыҙ, тип әйтмәксемен. Лотерея билеты һатып алмай тороп, отош көтмәгеҙ. Ғәҙәти лотерея билеттарынан айырмалы, рухи лотерея билеттары ла һәр саҡ отошло. Үҙегеҙҙең имeнлекте, башҡаларҙың имeнлеген күҙ алдына килтереп, ошо хаҡта Хоҙайға теләктәр ебәреп, һеҙ шундай рухи отошҡа өлгәшә алаһығыҙ.

**Донъяның һеҙҙең ярҙам талап ителгән проблемалары:**

Һеҙҙең доғалар ваҡытында уйлаған уйҙарығыҙ күп, әлбиттә. Әммә барлыҡ мәсьәләләрҙе лә бер юлы хәл итергә ынтылырға кәрәкмәй. Уларҙың үҙегеҙҙе үтә ныҡ борсоған бер нисәһен һайлап алып, уларға ижади энергияғыҙҙы йүнәлтергә һәм бәхетле билетты тартып алырға кәрәк. Һайлау енелләшһен өсөн, бер нисә миҫал:

- Таныштарың араһында эшһеҙлектән ашарға аҡсалары булмағандар, ярым ас йөрөгәндәр бар.
- Балалар араһында һыра алкоголиктары, енәйәтселәр, фәхишәлек арта бара.
- Донъя кимәлендә тыныслыҡҡа хәүеф менән янған милләт-ара низағтар, террорсылыҡ осраҡтары күп.
- Урындағы һәм федераль власть органдарындағы коррупция сәскә ата.
- Һеҙҙең йәшәйешкә тынғылыҡ бирмәгән башҡа ҡайһы бер кире күренештәр ҙә етерлек.

Иғтибар итегеҙ, һанап үтелгәндәр - дөйөм проблемаларҙың аныҡ сағылышы. Улар тураһында уйлап, доғаларығыҙҙа ошо проблемаларҙың хәл ителешен һорағағыҙ, Хоҙай, моғайын, ишетер һәм ярҙам итер. Ошо рәүешле айырым кешеләргә йәки ғаиләләргә ярҙам итергә мөмкин. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ әле, күршегеҙҙең өйҙән ҡасып сығып киткән улы кире ҡайтҡан, сирле туғанығыҙ һауыҡҡан, таныш кешегеҙ абруйлы колледжға уҡырға ҡабул ителгән. Хәл ителешен күҙаллай алған проблема - һеҙ хәл ителешенә йөғонто яһай алған проблема ул.

Ниндәй ярҙам һорап мөрәжәғәт итһәгеҙ ҙә, Ижадсы ишетер, тик унан килгән барлыҡ ярҙам да лотерея билетегыҙ өсөн түләү хаҡы буласаҡ. Шуға башта "лотерея билетын һатып алығыҙ, йәғни теләктәрегеҙ ысынбарлыҡҡа тап килһен һәм ихлас булһын.

**Роберт СТОУН.**



## 13 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
11.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Побег". Остросюжетный сериал
22.30 "Поединки. Испытание смертью", 1-я часть
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Подпольная империя", 6-я серия. Криминальная драма
01.00 "Капитан Рон"
02.50, 03.05 "Сохранить лицо"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Кабачок страны Советов"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 210-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 50-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Подарок судьбы", 12-я, 13-я и 14-я, закл. серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Над Тиссой"
01.45 "Анискин и Фантомас"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Кодекс чести"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Брат за брата". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "В зоне особого риска"
01.45 "Кожаное лицо: Техасская резня бензопилой-3". Фильм ужасов
03.20 "У.Е.", 1-я серия. Сериал
04.20 "Особо опасен!"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Ватан. События недели"**
**10.00 "Эдера"**
**11.00 "Детский час с "Тамыром"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Галерея изящных искусств"**
**12.50 "Хрустальный соловей-2010"**
**13.35 "На своей земле"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Царь горы"**
**15.30 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Наруто"**
**16.05 "За спичками"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.20 "Спецрепортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**18.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Ижсталь" (Ижевск). Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Дневник XIII Международного фестиваля оперного искусства "Шаляпинские вечера в Уфе"**
**23.15 "Параграф 78. Фильм первый"**
**01.00 Прогноз погоды**

## 14 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Побег", 16-я серия
22.30 "Поединки. Испытание смертью", 2-я часть
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Врата", 9-я серия
00.40 "Слоеный торт". Триллер
02.40, 03.05 "Идеальная пара"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 211-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 51-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Цвет пламени", 1-я, 2-я и 3-я серии
23.55 "Вести+"
00.15 "Грязный Гарри". Боевик
02.25 "Красавец-мужчина". Музыкальная комедия

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Боевик
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Брат за брата", 3-я и 4-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Капитал. RU"
00.30 "Главная дорога"
01.05 "Птеродактиль". Фильм ужасов
03.00 "У.Е.", 2-я серия
03.55" Очная ставка"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Эдера"**
**11.00 "Гора новостей"**
**10.15 "Царь горы"**
**10.30 "Бинди - девочка из джунглей"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Бабушкин сундучок"**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Судьбы радужные нити"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Книга сказок"**
**15.30 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Наруто"**
**16.10 "Параграф 78. Фильм первый"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.20 "Криминальный спектр"**
**18.35 Новости (на русск. яз.)**
**18.55 "Урал Лото ньюс"**
**19.00 "Чем дорожу, чем рискую на свете я..."**
**19.45 "Деловой форум"**
**20.15 "Учим башкирский язык"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Молодая семья-2010"**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Дневник XIII Международного фестиваля оперного искусства "Шаляпинские вечера в Уфе"**
**23.15 "Криминальный спектр"**
**23.35 "Параграф 78. Фильм второй"**
**01.10 Прогноз погоды**

## 15 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Голоса", 13-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Судите сами"
00.50 "Эволюция"
02.40, 03.05 "Брокер"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 " Вести-Башкортостан"
09.05, 03.45 "Мир входящему. Девять месяцев одного года"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 212-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 52-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Цвет пламени", 3-я, 4-я и 5-я серии
23.55 "Вести+"
00.15 "Хороший немец". Драма
02.25 "Мы, нижеподписавшиеся", 1-я серия. Драма
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чистосердечное признание"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Боевик
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Брат за брата", 5-я и 6-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Час Волкова"
00.30 "Ронин". Боевик
03.00 "У.Е.", 3-я серия
03.55 "Очная ставка"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Эдера"**
**11.00 "Гора новостей" (на башк. яз.)**
**10.15 "Книга сказок"**
**10.30 "Бинди - девочка из джунглей"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Досье. Солдаты ВОВ". Часть 1-я**
**13.10 "Байык" (на башк. яз.)**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Зеркальце"**
**15.30 "Учим башкирский язык"**
**15.40 "Наруто". Мультсериал**
**16.00 "Параграф 78. Фильм второй"**
**17.30 "Тивлет"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.20 "Спецрепортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Автограф". Р. Султангареев**
**19.45 "Деловой форум"**
**20.15 "Учим башкирский язык"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Лэсси"**
**00.55 Прогноз погоды**

## 16 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Голоса", 14-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 Кубок Первого канала по хоккею (в перерыве - "Ночные новости")
01.40, 03.05 "Викторина". Социальная драма
03.00 Новости
04.20 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 213-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 53-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Цвет пламени", 7-я и 8-я серии
22.55 "Ноль-седьмой" меняет курс". Приключения
00.50 "Вести+"
01.10 "Честный детектив"
01.45 "Мы, нижеподписавшиеся"
03.20 "Привика от невежества. Спасти ребенка"
04.15 "Городок"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Развод по-русски. Овощной беспредел"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Особо опасен!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Боевик
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.25 "Литейный". Сериал
21.25 "Брат за брата", 7-я и 8-я серии
23.15 "Сегодня"
23.30 "Очная ставка"
00.25 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
00.50 "Футбол. Лига Европы УЕФА. Обзор"
03.30 "У.Е.": 4-я серия
04.20 "Особо опасен!"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Эдера"**
**11.00 "Гора новостей" (на башк. яз.)**
**10.15 "Цирк в 13 метров"**
**10.30 "Бинди - девочка из джунглей"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Досье. Солдаты ВОВ". Часть 2-я**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей" (на русск. яз.)**
**15.15 "Сулпылар"**
**15.35 "Учим башкирский язык"**
**15.50 "Наруто". Мультсериал**
**16.15 "Лэсси"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.55 "Урал Лото ньюс"**
**19.00 "Исторический Башкортостан". Башкиры Пермского края**
**19.45 "Формула успеха"**
**20.15 "Учим башкирский язык"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Действующие лица"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Девочка и лисенок"**
**00.45 Прогноз погоды**

## 17 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Золотой граммофон". Церемония вручения народной премии
21.00 "Время"
21.30 "Золотой граммофон". Церемония вручения народной премии. Продолжение
23.30 "Падение "Черного ястреба". Военная драма
02.15 "Пожизненно!" Комедия
04.20 "Холоднокровная жизнь"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "Мой серебряный шар"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Настоящая жизнь"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 214-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 54-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Юрмала-2010"
22.55 "Девчата"
23.50 "Ас". Комедия
01.45 "Горячая десятка"
03.00 "Вскрытие инопланетянина". Фантастическая комедия

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Мама в большом городе"
09.00 "В зоне особого риска"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Кодекс чести". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "ЖКХ-потрошитель. История всероссийского обмана"
22.55 "Последнее слово"
00.00 "Женский взгляд"
00.50 "Анализируй то". Комедия
02.40 "Сердце - одинокий охотник". Триллер

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 18.40 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "Неслучайные люди"**
**10.00 "Эдера"**
**11.00 "Гора новостей" (на башк. яз.)**
**11.15 "Сулпылар"**
**11.35 "Бинди - девочка из джунглей"**
**12.00, 18.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Спецрепортаж"**
**12.30 "Хазина"**
**13.15 "Доброе сердце"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Цирк в 13 метров"**
**15.30 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Наруто"**
**16.25 "Девочка и лисенок"**
**18.20 "Криминальный спектр"**
**19.00 "Исторический Башкортостан"**
**19.50 "Свои деньги"**
**20.15 "Учим башкирский язык"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Как упоительны в театре "Вечера..."**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Парад планет". Телешоу. 1-я часть**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Парад планет". Телешоу. 2-я часть**
**23.45 "Мошенники"**
**23.55 "Вне игры"**
**01.35 Прогноз погоды**

## 18 ДЕКАБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.30, 06.10 "Исполнение желаний"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.20 "Смак"
10.50 "Николай Рыбников. Парень с Заречной улицы"
12.10 "Голоса", 2 серии. Сериал
14.10 "Светлана Дружинина. Королева дворцовых переворотов"
15.10 "Кто хочет стать миллионером?!"
16.10 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная России - сборная Чехии. Прямой эфир. В перерыве - Новости (с субтитрами)
18.30 "Большие гонки"
19.50 "Минута славы"
21.00 "Время"
21.15 "Минута славы. Продолжение"
22.00 "Прожекторперисхилтон"
22.30 "Что? Где? Когда?"
23.40 "Владимир Ворошилов. Вся жизнь - игра"
00.40 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная Финляндии - сборная Швеции
02.50 "Дикие сердцем"
05.15 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00 "Карьера Димы Горина"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Подари себе жизнь"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20 "Провинциалка". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Провинциалка". Сериал
16.20 "Новая Волна-2010". Лучшее"
18.15 "Десять миллионов"
19.20 "Кровь не вода". Мелодрама (в перерыве - 20.00 "Вести в субботу")
23.40 "Ваша остановка, мадам!". Мелодрама
01.35 "Нитро". Криминальная драма
03.45 "Повелитель зверей-2: через портал времени". Фантастика

### НТВ
05.10 "Сказки Баженова"
05.40 "Вилли Вонка и шоколадная фабрика". Фильм для детей
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.45 "Авиаторы"
09.25 "Живут же люди!"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.00 "Спето в СССР"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Последнее слово"
17.30 "Очная ставка"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа "Максимум". Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Музыкальный ринг НТВ". "Супербитва"
00.15 "Парк Юрского периода-2: затерянный мир". Фантастический триллер
02.45 "Большой вальс". Мелодрама

### БСТ
**07.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**07.15 "Дарю песню"**
**09.45 "Приключения мальчика-с-пальчик"**
**11.00 "Детский час с "Тамыром"**
**12.00 "Тэмле"**
**12.30 "Млечный путь". Фарида Кудашева**
**13.40 Р. Султангареев. "На том и на этом свете". Спектакль Стерлитамакского башкирского драматического театра**
**15.15 "Ведь это мой путь..." Г. Родионов**
**15.45 "Величие малой Родины". Кугарчинский район**
**16.15 "Мошенники"**
**18.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.20 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**18.40 "На своей земле"**
**19.05 "Фабрика качества"**
**19.30 "Хрустальный соловей-2010"**
**20.15 "КВН. V кубок вузов"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Етеган"**
**22.50 "Терминатор-2"**
**01.10 Прогноз погоды**

## 19 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Ярославна, королева Франции"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.30 "Дисней-клуб"
09.15 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.20 "Фазенда"
12.10 "Побег", 2 серии. Криминальная драма
14.10 "Лев Прыгунов. Джеймс Бонд Советского Союза"
15.00 "Огарева, 6"
16.20 "Шрэк третий". Полнометражный анимационный фильм
18.00 "Лед и пламень"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.20 Познер"
00.00 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная России - сборная Финляндии
02.10 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная Чехии - сборная Швеции

### РОССИЯ 1
05.45 "Дайте жалобную книгу". Комедия
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.00 "Сам себе режиссер"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Местное время. Вести-Башкортостан". События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Ты и я"
12.05 "Провинциалка"
14.00 "Вести"
14.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.25 "Провинциалка"
15.50 "Смеяться разрешается"
17.30 "Стиляги-шоу"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Улыбнись, когда плачут звезды". Мелодрама
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "Два веселых гуся"
00.30 "Холостяк". Комедия
02.25 "Старые ворчуны разбушевались". Комедия

### НТВ
05.15 "Сказки Баженова"
05.45 "Дикий мир"
06.10 "Фортуна". Лирическая комедия
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 "Первая передача"
11.00 "Дело темное. Выстрел в кинозвезду"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Суд присяжных: главное дело"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски. Новогодний кошмар"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Пятницкий". "Отдел". Криминальная драма
00.10 "Нереальная политика"
00.40 "Спящие". Криминальная драма
03.55 "Очная ставка"

### БСТ
**07.00 Новости (на русск. яз.)**
**07.15 "Дарю песню"**
**09.45 "Бэмби-2"**
**11.00 "Детский час с "Тамыром"**
**12.00 "Тэмле"**
**12.30 "Бабушкин сундучок"**
**13.00 "Книжный дом"**
**13.30 Концерт Г. Бикбулатовой**
**15.25 "Ведь это мой путь..." Г. Родионов**
**16.00 "Терминатор-2"**
**18.15 "Урал-батыр и всемирный потоп"**
**19.15 "Байык". Телевизионный конкурс любителей башкирского танца**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.35 "Новое кино"**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.20 "Полезные новости"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.10 "Вечер.com"**
**23.00 "Муз-базар"**
**23.30 "Знакомьтесь, семья Санта Клаус"**
**01.10 Прогноз погоды**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЭШТӘ СИРЛӘП КИТЕҮ...

## кеҫәгә нығ һуғасаҡ



**Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы ауырыу ҡағыҙҙары өсөн түләүҙә яңы иҫәп ҡағиҙәләре индерергә тәҡдим итте. Уның буйынса, ауырыған осраҡта 100 процент компенсацияға фәҡәт 15 йылдан да кәм булмаған эш стажлылар ғына иҫәп тота ала.**

Иң тәүҙә хеҙмәткә ваҡытлыса яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы буйынса эш хаҡынан 100 процент күләмендә компенсация алыусылар һаны үҙгәрәсәк. Әгәр әлеге ваҡытта улар иҫәбенә 8 йыл эш стажы булғандарҙан алып бөтә хеҙмәткәрҙәр индерелһә, 2011 йылдың 1 ғинуарынан төрлө ойошма һәм предприятиеларҙа 15 йыл һәм унан күберәк эшләгән кешеләр генә ауырыу ҡағыҙына ярашлы эш хаҡын юғалтмаясаҡ.

8 йылдан аҙыраҡ эшләгәндәр - эш хаҡының 60 процентын, 8-ҙән 15 йылға тиклемгеләр - 80, ә 15 йылдан алып 100 процентын аласаҡ. Әлеге көндә ауырыу ҡағыҙы буйынса тулыһынса эш хаҡы алыусылар һаны эшләүселәрҙең дөйөм иҫәбенең 80 процентын тәшкил итә.

Эшләп йөрөүселәрҙең байтағының, юғалтыуҙары сәбәпле, тәүге генә хеҙмәт кенәгәһе эйәһе булмауын иҫкә алғанда (ә тиҙҙән был документты, ғөмүмән, юҡҡа сығарырға йыйыналар), эш стажын иҫбатлауы ҡатмарлы мәсьәләгә әйләнәсәк. Ниндәй осраҡта ла был эш менән хеҙмәткәр (йә эшсе) үҙе шөғөлләнергә тейеш. Әгәр хеҙмәт кенәгәһе юғалған икән, уны яңынан тултырырға ла була бит.

### Ике йыллыҡ эш хаҡынан

Тағы ла бер етди үҙгәреш - ауырыу ҡағыҙы буйынса түләү күләмен иҫәпләү өсөн уртаса эш хаҡын хисаплап сығарыу. Әлеге ваҡытта уртаса килем һуңғы 12 айҙағы эш хаҡтарынан иҫәпләнһә, Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы тәҡдим иткән яңы закон проекты буйынса был ваҡыт 24 айға тиклем арттырыла.

Был йәһәттән эшен алыштырған йә булмаһа, ғөмүмән, эшһеҙ ултырған кешеләргә ҡыйынға тура киләсәк, сөнки әле эшләгән урыны буйынса түгел, ә бер нисә предприятие буйынса уртаса килем күләмен билдәләргә кәрәк буласаҡ.

"Беҙ Дәүләт Думаһына ебәрелгән закон проектының был рәүеше менән һис риза түгелбеҙ, - ти РФ Ирекле профсоюздар федерацияһы рәйесе А. Шершуков, - сөнки ул хеҙмәтсәндәрҙең хәлен бермә-бер ауырлаштыра. РФ Конституцияһының 55-се статьяһы хеҙмәтсәндәр хоҡуғын ҡыҫыусы закондарҙы тыя. Быға профсоюз ҡәтғи рәүештә ҡаршы".

### Эш биреүсе лә зыян күрер

Хеҙмәтсәндәр мәнфәғәтендә булмаған быңдай үҙгәрештәрҙән эш биреүселәр ҙә зыян күрәсәк. Әгәр элек һәр бер ауырып киткән хеҙмәткәр өсөн компания иҫәбенән икешәр көн компенсацияланһа һәм шунан һуң ғына "хеҙмәткәр - социаль страховкалау фонды" мөнәсәбәте үҙ көсөнә инһә, хәҙер "компания иҫәбенән" көндәр һанын өсәүгә арттырырға ниәтләнәләр.

Ауырыу ҡағыҙының уртаса оҙайлығы дүрт көн икәнлеген дә оноторға ярамай. Шулай итеп, страховка фондын экономиялап, эш биреүселәр барыбер уның файҙаһына аҡса бүлә, бизнес түләүҙәрҙе күпкә кәметеүе лә ихтимал. Хәйер, Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығында был йәһәттән әллә ни борсолмайҙар. Йәнәһе, был дәүләт менән бизнес араһындағы яуаплылыҡты тигеҙләү булып тора. Ә шулай ҙа иң беренсе сиратта был үҙгәрештәр Социаль страховка фонды менән бәйле хәлдә яҡшыртыуға йүнәлтелгән.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

*Ҙур сәхнә*

**11 декабрь "Әхмәтзәки Вәлиди Туған"** (Н. Асанбаев), тарихи драма

**12 декабрь "Гипнотизер"** (В. Сигарев), өлкәндәр өсөн әкиәт

**14 декабрь "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), романтик-музыкаль комедия

**15 декабрь "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйәт

**16 декабрь "Нәркәс"** (И. Йомағолов), мелоромантик трагедия

**17 декабрь "Их, кәләше лә, кәләше!"** (Х. Зарипов), музыкаль комедия

*Бәләкәй сәхнә*

**17 декабрь "Яратыу гонаһмы?"** (Т. Миңнуллин), драма

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 декабрь "Студенттар"** (Н. Ғәйетбай), лирик комедия

**16 декабрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Хөрмәтле туғаныбыҙ, мөғәллимә, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, мәғариф отличнигы Башҡортостандың сәйәси золом ҡорбандары ассоциацияһы рәйесе **Мәһинур Мөхлис ҡыҙы ҮТӘБАЕВАНЫ** 80 йәшлек күркәм юбилейы менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ!

Туғаныбыҙ Мәһинур Мөхлис ҡыҙы! Бала сағың аяуһыҙ золом-Ҡәһкәһә михнәттәренә тарыһа ла, барлыҡ яҙмыш һынауҙарын оло сабырлыҡ менән үткәреп, Әликәс, Ҡотдос, Буранбай олатайҙарыбыҙҙың, Үтәбай, Сәғәҙей, Суфиян ҡартатайҙарыбыҙҙың, атайың Мөхлис хәҙрәттең изге доғалары хозурында кеше йәнле кеше, оло шәхес булыуға өлгәштең. Заманаларҙың ана ниндәй ас-яланғас мәлендә төпкөл ауылдан Мәскәүҙәге иң оло уҡыу йортона табан атлап, беҙҙең өсөн оло белем, мәғрифәт иленә юл ярҙың, беҙҙә ғилем иленә әйҙәнең. Үҙеңдең донъяла барлығың менән беҙҙә шулай гел ҡыуандырып йәшә, туғаныбыҙ!

**Баймаҡ районының Буранбай ауылында, Сибайҙа, Өфө ҡалаһында һәм районында йәшәүсе барлыҡ туғандары исеменән Әхмәр Үтәбаев.**

* * *

Хөрмәтле **Мирас Хәмзә улы ИҘЕЛБАЕВты** ғүмер байрамы - оло юбилейы менән ысын күңелдән ҡайнар ҡотлайым! Беҙ һеҙҙе талантлы яҙыусы, фән донъяһы буйлап ышаныслы аҙымдар менән барыусы олпат ғалим һәм киң эрудициялы фән эшмәкәре, һәләтле уҡытыусы, шулай уҡ оло йөрәкле кеше булараҡ беләбеҙ һәм хөрмәт итәбеҙ. Бөйөклөк ябайлыҡта күренә, тиҙәр. Һеҙ ҙә изге күңелегеҙ, ябай һәм мәрхәмәтле булыуығыҙ менән абруй ҡаҙандығыҙ һәм күптәргә өлгө булып тораһығыҙ.

Киләсәктә ғүмерегеҙҙең оҙон, бәхет-шатлыҡтар менән тулы, кәйефегеҙҙең һәр саҡ күтәренке, сәләмәтлегегеҙҙең ныҡлы булыуын теләйем. Илһам ҡанаттарығыҙ талмаһын, ижади уңыштар юлдаш булһын. Фән донъяһына юл күрһәтеп, ошо юлда терәк-таяныс булыуығыҙ өсөн рәхмәт һүҙҙәрен еткерәм.

**Ҡотлау менән аспирантығыҙ Гүзәл Байбулатова.**

ХОККЕЙ

# ЮЛАЕВСЫЛАР ҺЫНАТМАНЫ

**"Салауат Юлаев" хоккейсылары Новокузнецк ҡалаһында урындағы "Металлург" менән көс һынашты. Быйылғы миҙгелдә дүртенсегә осрашыу ине был. Бер ай элек кенә Өфө хоккейсылары металлургтарҙы 8:0 иҫәбенә ҡыйратҡанлыҡтан, был уйын реванш алыу буласаҡ, тип күҙалланғайны.**

Беренсе осор тамамланыуға иҫәптең асылмауы ошо хаҡта һөйләй ине. Ә бына икенсе осорҙа ҡунаҡтар үҙҙәрен хужаларса тойҙо. Осор башланып күп тә үтмәне, Владимир Антипов биргән пасты Константин Кольцов оҫта файҙаланды. Әммә ярһыған юлаевсылар бының менән генә сикләнмәне. Команда капитаны Виктор Козлов Новокузнецк ҡапҡасыһы Александр Вьюхинға гол сәпәне. Бер-бер артлы ике шайбанан әллә "Металлург" ҡойолоп төштө, әллә Салауатҡа көс индеме - һаҡсы Мирослав Блатяк иҫәпте 0:3 итте. Дүрт минутта өс гол! Әммә иртәрәк ҡыуанғанбыҙ икән. Өсөнсө осорҙа "Металлург" тулыһынса һаҡланыуға күсеп, контрһөжүмдәр ойоштороҙо. "Салауат Юлаев" хоккейсылары, еңеү беҙҙең ҡулда, тип уйлаңы, ахырыһы. "Металлург" көтмәгәндә ике гол сәпәп саҡ иҫәпте тигеҙләмәне.

Шулай итеп, уйын юлаевсылар файҙаһына 3:2 иҫәбенә тамамланды. Быйылғы миҙгелдәге ике командаһың үҙ-ара уйындарының дөйөм иҫәбе-17:5. Был еңеүҙән һуң Салауат Юлаев командаһы 63 мәрәй менән дөйөм таблицала дүртенсе, ә көнсығыш конференцияһында икенсе урын биләй. Алда юлаевсылары быйылғы миҙгелдә көслө генә сығыш яһаған Новосибирск ҡалаһының "Себер" командаһы көтә.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## "ЗДРАВУР" - файҙалы аҙыҡ өҫтәмәһе

**Күп хужалыҡтарҙа "ЗДРАВУР" аҙыҡ өҫтәмәләре ҡулланыла. Был өҫтәмәләр малдарҙан һәм ҡошҡорттан яҡшы табыш алырға мөмкинлек бирә, ябай мал аҙыҡтарын туҡлыҡлыраҡ итә.**

**"ЗДРАВУР"** өҫтәмәһе ашаған малдың ите тәмлерәк һәм сәләмәтлек өсөн файҙалыраҡ булыуын барыһы ла беләйҙер әле. Ә бит был ысынлап та шулай.

▸ **Беренсенән,** сәләмәт мал сәләмәт продукция бирә.

▸ **Икенсенән,** диетик яҡтан был продукция өҫтөнлөклөрәк һанала, сөнки малдың рационында туҡлыҡлы матдәләр балансы яҡшы һаҡлана.

▸ **Өсөнсөнән,** фәнни тикшеренеүҙәр дәлилләүенсә, витаминлы-минераль премикстар ҡулланыу йоморҡтаны, һөттө һәм итте енел үҙләштерелә торған витамин һәм микроэлементтарға байыта. Шул уҡ ваҡытта **"ЗДРАВУР"**-ҙа антибиотик, гормондар, ГМО, малдың ауырлығын арттырырға ярҙам итеүсе химик стимуляторҙар юҡ.

Сертификацияланған.
**Тауарҙы почта бүлексәләрендә һорағыҙ!**
**www.vhoz.ru**

ИҒЛАН

Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, йыл хужаһы - Ҡуян һәм башҡа әкиәт геройҙары башҡорт телендә Яңы йыл байрамдары, тыуған көндәр үткәрә. Әкиәт геройҙары реклама акцияларында ла ҡатнаша ала. Шарҙарҙан яһалған ҡуян, ҡар бабай, шыршы менән байрам залдарын да биҙәйбеҙ. Телефондар:
**251-14-76, 8-937-33-55-235, 8-917-40-06-894.**
**www. afarin-ufa.ru**

*Мин үҙемдең атайым һәм әсәйемде яратам һәм хөрмәт итәм. Улар минең берҙән-бер таяныстарым. Тәүҙә уларҙы йыуындырам, шунан үҙем йыуынам. Тәүҙә уларҙы ашатам, шунан үҙем ашайым. Бына шуның өсөн дә күпте беләм һәм тоям.*



*АФАРИН!*

# СӘХНӘЛӘ ИХТЫЯР ҺЫНАЛДЫ,

## Әмир ҙә тәүге һынауын үтте



**Спектакль тамам. Халыҡ ҡул саба. Туҡтай алмай саба. Аяғүрә баҫып саба. Спектаклдә ҡатнашыусы актерҙарҙы оҙаҡ ваҡыт сәхнәнән ебәрмәй тота. Тимәк, сәхнә әҫәре тамашасының күңеле түренә үтеп инеп, әсир иткән. Әсир итмәй ни, спектакль берсә илатты, берсә...**

Ул көндө Өфө халҡы Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә Туфан Миңнуллиндың "Риүәйәт" әҫәрен ҡарап кинәнде. Режиссеры - Олег Ханов. Әйткәндәй, Салауат башҡорт драма театры артистары драматургтың был әҫәрен сәхнәгә тәүләп сығарҙы һәм академтеатрҙа сираттағы һынауын тотто.

Сюжет әллә ни ҡатмарлы түгел. Унда атайҙар һүҙенә тоғро ҡалыу, үҙ намыҫың, үҙ выжданың менән йәшәүгә кеше күңеленең иң мөҡәддәс тойғоһо - мөхәббәт ҡаршы ҡуйыла. Төп герой ике ут араһында ҡала: бер яҡта атайҙар ихтыяры, икенсе яҡта ялҡынлы һөйөү. Сәхнә әҫәрендә бер-береһенә ҡаршы торған геройҙар булһа ла, төп ҡаршылыҡ төп геройҙың күңелендә бара. Ғаиләһендә һәм мәҙрәсәлә яҡшы тәрбиә алған Ихтыяр тыуған сағында уҡ ата-әсәһе йәрәштергән ҡыҙға өйләнергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта ул икенсе бер ҡыҙға ғашиҡ була. Спектаклдең башынан аҙағына тиклем Ихтыярҙың йола һәм мөхәббәт ҡапма-ҡаршылығында һынау үтеүе һүрәтләнә.

Әйткәндәй, ошондай уҡ ихтыяр һынауын оло сәхнәлә Ихтыяр ролен башҡарыусы Әмир Үтәбаев та үтте. Спектаклдең төп уңышы - актерҙар, тибеҙ. Драматург ни тиклем уңышлы яҙып та, актерҙар ролдәрҙе еренә еткереп башҡара алмаһа, әҫәр тамашасы күңелен яулай алманы, тигән һүҙ. Ә был юлы Салауат театрының тәжрибәле артистары менән бер рәттән йәштәрҙең сәхнәне дер һелкетеп уйнауы һоҡландырҙы. Әмирҙең үҙенә генә хас уйнау стиле булыуы, тамашасыларҙы ауыҙына ҡарата алыуы маҡтауға лайыҡ. Ихтыяр образында халыҡты хисләндерә, дәртләндерә белеүе йәш актерҙың ысын театр кешеһе икәнен тағы бер тапҡыр иҫбатланы. Кәрәк ерендә көлдө лә, күҙенә йәш тә алды тамашасы. Тимәк... Әҫәр ҙә, уны сәхнәгә ҡуйыусы билдәле актер һәм режиссер Олег Ханов та, төп ролде башҡарыусы Әмир ҙә маҡсатына өлгәште. Тырышлыҡ та, ныҡышмалыҡ та булғанда талант шулай үҙ юғарылығында балҡый ала шул. Афарин, егеттәр!

**Данил РӘШИТОВ.**

*БАШҠАТЫРҒЫС*

# ТАШ ҺАУАЛА ТУҠТАҒАН...

**2-се башҡатырғыс:**

Аристотелдең уҡыусыһы, донъяның бөйөк фәйләсүфе, ғалимы, шағиры,табибы Ибн-Сина-Әбүғәлисинаның (980-1037 й.й.) үҫмер генә сағында өлкән табиптар менән ваба эпидемияһы ваҡытында вафат булған кешеләрҙең мәйетен яндырып йөрөүен ишетеп ҡалған әмир Хамада Шәмс-әд-Дәүлә йәш табипты үҙенең һарайына саҡыра. Йәш Әбүғәлисина һарайға инеп килгәндә әмир уны ихатаһы алдында ҡаршылай. Улар бер-береһенә ҡаршы килеп, 2-3 аҙым етмәй туҡтап ҡала. Әмир ерҙән таш ала ла, йәш лекарь яғына ташлай. Осоп килгән таш бер нисә секундҡа һауала аҫылынып тора, шунан ергә төшә.

- Мин ошо ташты нисек итеп һауала туҡтата алдым? Шуны әйтә алһаң, һиңә һарайым асыҡ. Күпме теләйһең, шунса ашап-эсерһең, йәшәрһең, һарайымдың китапханаһы ла һинең ихтыярҙа, - тигән әмир йәш Әбүғәлисинаға.

Әлбиттә, йәш табип әмирҙең нисек итеп һауала ташты туҡтата алыуының серен әйтеп бирә алған һәм әмир уны һарайына үткәргән. Әбүғәлисина әмирҙең һарайында 25 йыл ҡайғыһыҙ йәшәгән, ундағы бар китаптарҙы уҡып сыҡҡан, беҙ белгән бөйөк Иб-Синаға әүерелгән.

**Һорау: Әмир нисек итеп ташты һауала туҡтата алған?**

**Башҡатырғыстың яуабы:**

Мин үҙемде һай ғына белем туплаған кешемен, тип ҡабул итәм. Сөнки рәссам булараҡ, донъяуи күренештәрҙе күберәк хис-тойғо менән ҡабул итәм. Илдә барған был туҡтауһыҙ реформалар арҡаһында "Былай ҙа баштар ҡатҡан инде" тип, гәзит уҡыусылар был рубрикалағы һорауҙарға яуап эҙләп ҡаңғырмайҙыр, тим.

Һуңғы һанда "Әүҙемерәк булығыҙ!" тигән мөрәжәғәтегеҙҙе уҡығас, бер һорауға яуап эҙләп ҡараным шулай ҙа. Әмир Әбүғалисинаға үҙе ташлаған ташты туҡтата алған. Туҡтата алмаһа, Әбүғалисина йә зәғифләнер, йә үлер ине. Ҙур китапханаһы булған әмир үҙе лә ҙур белем туплағандыр, "телепатия" һәләтенә эйә булғандыр, тип уйлайым.

Мин гәзитебеҙҙә баҫылып сыҡҡан Мөжәүир хәҙрәт ҡылған мөғжизәләрҙе ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып барам. Унда кемдәндер юлда йәшереп ҡалдырған араҡыһы ябай һыуға әйләнеүе хаҡында яҙылғайны. Әлбиттә, әмирҙе Мөжәүир хәҙрәт менән тиңләп булмайҙыр. Уныһы беҙгә ҡараңғы. Әмир һарайына берәй байҙың, йә берәй вәзирҙең улын саҡырмаған бит. Ни сәбәп менәндер, үҫмер Әбүғалисинаны саҡырған. Тағы ла бүтән әмирҙәр кеүек һарайына тик алтын, көмөш, ебәк, ҡыйбатлы балаҫтар ғына түгел, ҙур китапхана туплауы ла күпте һөйләй.

Күп ябай кешеләргә лә "телепатия" (уйынды алыҫ араға оҙатыу һәм уйың менән тартып алыу һәләте) бирелә лер ҙә, тик үҫешмәй ҡалалыр. Бер саҡ һеҙҙең гәзиткә аҡыллы, тыныс холоҡло уҡытыусы тураһында хат яҙып, почта йәшнигенә һалырға сыҡҡайным, ул уҡытыусы йылмайып ҡаршыма килә ята. Һәр ваҡыттағыса, туҡтап, иркенләп һөйләшә алманым. Ҡаушап, һаулыҡ һорашып ҡына үтеп китә һалдым (был ябай тап килеү икәнен һиҙеп ҡаушап ҡалдым). Уйҙың тартып алыу көсөн бик күп тапҡыр һиҙгәнем бар. Уйҙың матди булыуы хаҡында психологтар китаптар яҙа. Көнсығыш көрәштәренең береһендә: "Ҡағылмай ҡотолоу" тигән йүнәлеш тә бар бит. "Телепатия" һәләтен үҫтереүгә арналған китаптарҙы ла күргәнем бар.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# МАҺАЙЫУ...

## белемдең дошманы

Яуаплылыҡтан ҡасыуҙың иң яҡшы юлы: "Мин бының өсөн яуап бирәм", - тип әйтеү.

**(Ричард Бах).**

Кисәге күңел асыуҙар иртәгәге борыстар менән тамамланыуы бар.

**(Арнольд Тойнби).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Урмандар ҡыҙырып, күп батырлыҡтар ҡылып йөрөгән бер аҡыл эйәһе. Бына бер саҡ ағас төбөндә ял итеп ултырғанда һауанан осоп барған һайыҫҡан уның башына тиҙәген төшөрөп китә. Аҡыл эйәһе ҡыҙып китеп, осоп барған ҡошҡа асыулы ҡарашын һирпә. Һайыҫҡан шунда уҡ туҙанға әйләнә. Үҙенең быңдай ҡеүәте барлығын тойоу уның башын әйләндерә, үҙ һәләтлегенә маһайыу барлыҡҡа килә. Шунан ул үҙенең ошондай һәләтлеген тағы кемдәлер һанап ҡарау теләге менән ҡалаға йүнәлә. Бер дин әһеленең йортона инә. Йорт ишеге төбөнә еткәс, хужабикәнән ашарға сығарыуын һорай. "Көтөп тор, - ти хужабикә, - әле мин хужама ярҙам итәм". Аҡыл эйәһе уға асыулы ҡарашын һирпә, әммә хужабикә юҡҡа сығыу урынына көлөп ебәрә һәм: "Һин яңылыштың, аҡыл эйәһе. Мин бит һайыҫҡан түгел", - ти. Аҡыл эйәһе был һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡаушап ҡала: "Ул ҡайҙан белгән икән?"- тип уйлай. Ә хужабикә иренә өйҙәге эштәрен тамамларға ярҙам итә лә, ашарға алып, аҡыл эйәһе янына сыға. "Һайыҫҡан менән булған хәлде һин ҡайҙан белдең? Әйтмәһәң, хәйереңде алмайым", ти аҡыл эйәһе. "Минең иремә тоғролоҡтан башҡа ҡануным да, инаныуым да юҡ, - ти хужабикә.- Шуға ла минең тойоу һәләтем дә көслө. Һин баҙарға барып, ундағы ит һатыусы Дауыт менән һөйләшһәңсе һәм унан сабырлыҡҡа, етдилеккә өйрәнһәңсе..."**

**Аҡыллы ҡатындан ошондай кәңәш ишеткәс, аҡыл эйәһе Дауытты эҙләп баҙарға китә. Үҙенә сәләм биргән сит кешене күргәс, Дауыт: "Нимә, аҡыл эйәһе, һине миңә иренә тоғро ҡатын ебәрҙеме?"- ти. Быны ишеткәс, аҡыл эйәһе аптырап китә һәм һорай:"Һиндә, ит һатыусыла, быңдай тойомлау ҡайҙан?" Быға ҡаршы ит һатыусы шулай тип яуап бирә: "Мин үҙемдең атайым һәм әсәйемде яратам һәм хөрмәт итәм. Улар минең берҙән-бер таяныстарым. Тәүҙә уларҙы йыуындырам, шунан үҙем йыуынам. Тәүҙә уларҙы ашатам, шунан үҙем ашайым. Тәүҙә уларҙы йоҡларға яҡтырам, шунан үҙем ятам. Бына шуның өсөн дә күпте беләм һәм тоям. Ит һатам, шуға көн күрәм. Сауҙа менән шөғөлләнеү -халыҡҡа хеҙмәт итеү, ә аҡсаға ҡыҙығыу түгел. Мин дә, баяғы иренә тоғро ҡатын да, үҙ белемебеҙ менән маһаймайбыҙ, маһайыу - белемдең дошманы. Шуның өсөн Хоҙай беҙҙе сикһеҙ белем менән бүләкләгән. Аҡыл эйәләре араһында лайыҡлы аҡыл эйәһе булғың килһә, аҡылың менән маһайма..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 4947